ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 май (һабанай) 2024

№20 (1113)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*"Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн 897 һум 06 тингә баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҙур эштәр тынлыҡ ярата**



3

**Урал - башҡорттоң тәү ватаны,**

**йәки Билдәһеҙ ғалимдың яҙмаһы низәр һөйләй?**



7

**Китаптар мине кеше итте...**



8

**Динарҙарҙың...**

**сәйәхәт ойоштороғаны**



12-13

*ЯҘЫУСЫ МИНЕҢ ҺӨНӘРЕМ...*

## БЕҘҘЕҢ АРТТА - ХАЛЫҠ

Мин бәләкәй инем әле. Афған һуғышын үткән, күршелә йәшәгән ике туған ағайым атайыма кәңәш һорап инде:

- Коммунистар партияһына ағзалыҡҡа ғариза яҙырға тәҡдим иттеләр, быуай (бабай), нимә эшләйем икән?

- Ашыҡма, Рим. Бик ныҡ уйлап эш ит!

Мин аптырап киттем. Үҙе лә Бөйөк Ватан һуғышын үткән ҡарт коммунист атайым был яңылыҡҡа ҡыуаныр, тип уйлағанмындыр, күрәһең. "Ниңә бик ныҡ уйларға ҡушты һуң ағайыма, уның да үҙе кеүек тура һүҙле, ауыл халҡы алдында ихтирамлы коммунист булыуын теләмәйме икән ни?" - тип аптырағаным хәтерҙә.

Йылдар үткән һайын, ошо ваҡиға әленән-әле иҫемә төшә. Ҡайһылай ҙа төплө аҡыллы кеше булған атайым. Атайһыҙ ҡалған ҡустыһын ни тиклем аяп ҡараған, ул болғауыр заманда туғанының күңел торошо өсөн борсолған.

Яҙыусылыҡ эше лә гел алғы һыҙыҡта булыуҙы талап итә. Ниндәй генә сетерекле хәл-ваҡиға килеп тыумаһын, халыҡ һинең хаҡ һүҙ әйтереңде көтә. Ә һинең үҙеңдең һәр ваҡыт аҡылың етәме һуң дөрөҫ кенә итеп аҡты ҡаранан, ҡаранан аҡты айырырға? Шәхсән минең, мәҫәлән, күп нәмәнең айышына төшөнә алмаған, төшөнгән хәлдә лә, ҡайһы бер нәмәләрҙе әйтә алмаған саҡтарым булды. Яҙыусы исемен күтәреп йөрөһәм дә...

Хәҙер тиҙ-тиҙ генә бер-бер артлы китап сығарып, яҙыусылар рәтенә баҫырға ҡабаланыусылар күп. Ижады тосмо, юҡмы - уныһы бер эш. Шәхес булараҡ, өлгөрөп еткәнме кеше? Шундай заманда йәшәйбеҙ: яҙғандары менән танылыу яулаған, мәртәбәле дәрәжәләргә эйә булғандарҙың да бер көн килеп йә абыныуы, йә шаңҡып юғалып ҡалыуы, йә әйтер һүҙен йоморға мәжбүр булыуы мөмкин. Ашыҡмағыҙсы, ҡәләмдәштәр! Бик ныҡ уйлап эш итегеҙ! Беҙҙең артта - халыҡ.

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**
**шағирә, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре,**
**Ш. Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты.**

*АФАРИН!*

## ТУҒАН ТЕЛМЕ?

### Ул мөғжизәләр иленә асҡыс!



**Һәр ата-әсә үҙ сабыйына был донъяны гүзәл бер баҡ итеп танытырға, оло тормошҡа аяҡ баҫҡанда бала саҡ осоро хаҡындағы яҡты хәтирәләре күп булһын тип тырышалыр. Был йәһәттән баш ҡалабыҙҙа йәшәгән милләттәштәребеҙҙең тағы ла бер шәп мөмкинлеге бар: улар балаларын йыл да мөғжизәләр иленә сәйәхәт иттерә ала. Быны нисек эшләйҙәр, тиһегеҙме? Теләге һәм тырышлығы булғандар ҡулындағы мөғжизәләр иленә асҡыс - башҡорт телен яҡшы белеү һәм һөйләшеү оҫталығы менән өлгәшә быға.**

**(Дауамы 9-сы биттә).**

*(Гран-при яулаусы Нурсолтан Фазылов).*

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## МИН БЫЛ ГӘЗИТКӘ...

### тулыһынса ышанам



**Өйгә тиҫтәләгән баҫма килһә лә, һәр кемдең яратып уҡыған һәм иң беренсе ҡулына алған гәзит-журналы була. Минең өсөн шундай гәзиттәрҙең береһе - "Киске Өфө".**

"Киске Өфө"нө республикабыҙҙың төп гәзиттәре исемлегенә индерәм һәм был бер ҙә хата ла, яңылышыу ҙа түгел. Үҙенең 16 битенә ул тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләрен дә тулы кимәлдә "һыйҙыра". Баҫма республика, ил һәм хатта донъя сәйәсәтен дә урап үтмәй, бөгөнгө менән бер рәттән, тарихты ла киң яҡтырта, һаулыҡҡа ҡығылышлы йөкмәткеле, файҙалы мәғлүмәт менән дә бүлешә. Ошо урында тағы бер нәмәне билдәләп үткем килә: уҡыусы иғтибары артынан ҡыуып, нисек тә булһа иҫте китәрергә тырышып, әллә ниндәй аңлайышһыҙ һәм беҙҙең тормоштан бөтөнләй алыҫ булған сәләмәтлек ысулдарын яҙмай гәзит. Уның битендә сыҡҡан ниндәй кәңәште алһаң да, составында үҙебеҙ күреп-белгән, ишетеп үҫкән үлән, тамыр, йәшелсә-емеш һәм башҡа шундай саралар ғына. Был бик уңайлы һәм, миңә ҡалһа, ышаныслы.

Мин "Киске Өфө"гә тулыһынса ышанам. Бөгөнгө көндә "ышаныс" төшөнсәһе юғалып та барған кеүек, һәр кем үҙен һаҡ тота, уҡығанына ла әллә ни ышанып бармай. Ә "Киске Өфө"гә был йәһәттән мин һүҙ тейҙерә алмайым. Гәзит үҙ битендә баҫҡан һәр һүҙгә ҡарата яуаплылыҡ тойоп эшләй һәм йәшәй. Был үҙ уҡыусыларына ҡарата булған ихтирам тураһында һөйләй.

Өҫтән-мөҫтән генә, "килде - китте", "үтте - эшләнде" тип кенә яҙып сығып килгән ҡайһы бер баҫмаларҙан айырмалы рәүештә, "Киске Өфө"лә донъя күргән һәр материал төплөлөгө, мәғлүмәтлеге, төрлөлөгө менән айырылап тора. Һәр бер мәҡәлә уны әҙерләгән журналист күңеле аша ғына түгел, ә баҫманың баш мөхәрриренең йөрәге, үткер күҙе һәм талапсан ҡулы аҫтынан үткәне күҙгә асыҡ сағыла.

Гәзиттең тағы бер күңелемә яҡын сифаты - яҙылыу теленең уҡымлы, аңлайышлы булыуы. Баҫма ҡыҙыҡлы, күңелде ыңғайға көйләй, аңдаирәне киңәйтә, ышаныс өҫтәй.

**Ғәлим АТАУЛЛИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

12+

ЯҘЫУСЫ МИНЕҢ ҺӨНӘРЕМ

# ШӘХЕСТЕҢ КҮҢЕЛ ТАЛАБЫ

**Эйе, яҙыусы эшенә һөнәр итеп ҡараусылар ҙа бар. Тик ул кәсеп, йәки эш хаҡы бирә торған һөнәрҙәр исемлегендә түгел. Хәҙерге заманда китап баҫтырып, килем алыусылар барлыҡҡа килде, әлбиттә. Рәсәйҙә Донцова, мәҫәлән, ул беҙҙәге байрамға ла киләсәк. Шулай ҙа башҡорт әҙәбиәтендә, тамаҡ аҫрарлыҡ башҡа бер һөнәрең булмаһа, профессиональ рәүештә эшләү мөмкин түгел. Шуға ҡарамаҫтан, яҙыусыларыбыҙ халҡыбыҙ тарихын, киләсәккә баҡҡан өмөтөн әҫәрҙәренә һалғанда профессиональ кимәлдә эшләй. Шәхестең күңел талабы булараҡ йәшәй беҙҙә әҙәбиәт.**

Шиғриәт, ғөмүмән, килемгә бәйле түгел. Әҙиптәрҙең иң төп маҡсаттарының береһе - ошо ауыр заманда тыуған телде һаҡлап ҡалыу, мөмкин тиклем унын бөтә байлығын, тәрәнлеген әҫәрҙәренә һалып ҡалдырыу. Ә инде замандаш ни тиер, интернеттан айырылып, яҙыусы күңел нурын түгеп ижад иткән китаптарға иғтибар итерме? Был инде икенсе һорау.

Үҙемә килгәндә, яҙыусылыҡты ғүмерлек хеҙмәтем итеп һайлағаныма байтаҡ ваҡыт булды инде. Шиғриәттә яңы һүҙ әйтеү еңел түгел, башҡорт шиғриәте традициялары бик бай. Шулай ҙа әҙәбиәттә үҙ юлым бар, тип уйлайым. 16 китабыма шиғырҙар, поэмалар, шиғри шәлкемдәр, хикәйәләр, балалар өсөн әҫәрҙәр, төрлө телдәрҙән тәржемәләр ингән. Шулай уҡ үҙ әҫәрҙәрем дә байтаҡ телдәргә тәржемә ителгән. Төркиәлә "Ебәк юл шағирҙары" тигән халыҡ-ара шиғриәт фестивалендә (2013), Ҡырғыҙстанда И. Нәсимиҙең 650 йыллығына арналған "Төрки донъя шағирҙары" йыйынында (2019), Ҡаҙағстанда "Евразия баш ҡалалары әҙиптәре" йыйынында (2019) ҡатнашыу - ижади ғүмеремдең юйылмаçлыҡ биттәре. Лев Гумилев исемендәге Евразия университеты халыҡ-ара әҙәби һәм мәҙәни хеҙмәттәшлегем өсөн "Көлтәгин" миҙалы менән бүләкләнә. Әле ошо көндәрҙә 21-24 майҙа Ҡаҙан ҡалаһында үткән Халыҡ - ара шиғриәт фестивалենә саҡырҙылар. Төрки телле халыҡтарҙың мәҙәниәте бөтә донъя мәҙәниәте нигеҙендә ятҡанын белгәнгә күрә, был ваҡиғаға ҙур ғорурлыҡ тойоп барам.

Әҙәбиәттә бер быуын икенсеһенең яурынына баҫып үҫә. Был хаҡта ағайҙар гел әйтә килделәр. Һуңғы ваҡытта быуындар сылбыры өҙөлөп-өҙөлөп киткәндәй булды. Бәлки, миңә генә шулай тойолалыр. Шулай ҙа мин буш урында яңы әҫәрҙәр тыуыуына шикләнеп ҡарайым. Әҙәби палитра бай һәм төрлө яҡлы, йүнәлешле, төрлө төҫлө булырға тейеш. Шул саҡта ғына ул яңы заман өсөн ҡыҙыҡлы әҫәр бирергә һәләтле.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуң тотош бер плеяда әҙиптәр килгән. Әлеге заман да, яу яланы, окоптар аша яңы бер быуын яҙыусыларын әҙерләйҙер, тип уйлайым. Башҡорт әҙәбиәтенең балҡыр көндәре алда әле.

**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ,**
**шағирә, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры.**

КӨНАУАЗ

**Яҙ ҡырыҫ килде быйыл, әйтергә лә түгел. Ярай әле республикабыҙ ҙур һыу баҫыуҙарға дусар булып, башҡа төбәктәрҙәге кеүек, ауыр бәлә-ҡазаларға юлыҡманы, ләкин барыбер ил күргәнде йөрәк аша үткәреп, күршеләр (Ырымбур, Һамар, Ҡурған, Төмән һ.б.) ҡайғыһына битараф ҡала алмайыҡ: тәбиғәт стихияһы бер кемде лә һайлап тормай бит. Айырыуса, ошо стихия эҙемтәләре кеше факторына бәйле булып, идара итеүсе чиновниктарҙың яуапһыҙлығы, граждандар алдында үҙ бурыстарын еренә еткереп башҡармауҙары арҡаһында ауыр юғалтыуҙарға килтерһә, шуныһы ҡыйын.**

# БАРЛЫҠҠА ТАРЛЫҠ ЮҠ



Рәсәй Фәндәр академияһының География институты климатологтары раçлауынса, Рәсәйҙәге һыу баҫыуҙарҙың төп сәбәбе - ысынлап та, күп йәһәттән һыубаçар туғайҙарҙа торлаҡ һәм дачалар төҙөү, һыу һаҡлағыстарҙы тейешенсә көйләп тормау, дамбаларҙы нығытмау кеүек эштәрҙе башҡармаған кеше факторына бәйле. Дөрөç, Урал һәм Себер төбәктәрендә ҡарҙың мул яуыуын да (яуым-төшөмдөң норманан 50-80 процентҡаса артып китеүе) бер кем дә инҡар итмәй, шулай ҙа...

Яҙ әле булһа үҙенең холҡон күрһәтә. Мәҫәлән, уңайһыҙ һауа шарттары арҡаһында ил буйынса 830 мең гектар сәсеүлекте ҡырау һуҡты, тип хәбәр итте Рәсәйҙең яңы тәғәйенләнгән ауыл хужалығы министры Оксана Лут. Шул иҫәптән, майҙың тәүге ун көнлөгөндә Башҡортостандың да 10 мең гектар сәсеүлегендә шәкәр сөгөлдөрө, арпа, рапс һәм башҡа культуралар зыянланды. Шуларҙың 6 мең гектарында ҡабаттан сәсеү эштәре башҡарыла. Тәбиғәт көйһөҙлөгө бигерәк тә Шишмә, Ауырғазы, Федоровка райондарына ҡағылды. Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахмановтың әйтеүенсә, әлеге ваҡытҡа республиканың 8 районында сәсеүҙе тулыһынса тамамлаһалар, 23 район ошо көндәрҙә эште тәүәлләй. 20 майға ҡарата ярауайҙарҙың (яҙ сәселә торған культуралар) 58 проценты, йәғни 1,174 млн гектарҙа сәселеп бөткән. Социаль әһәмиәтҡә эйә культураларҙан, мәҫәлән, ҡарабойҙай сәсеүгә айырым иғтибар бирелә. Былтыр ул 1,29 млн гектарҙа сәселеп, 1,6 млн тонна рекорд уңыш алынғайны. Быйыл да ул былтырғы кимәлендә - 1,2 млн гектарҙа сәселә.

Быларҙы яҙыуҙың ғилләһе бни, тиер ҡайһы берәүҙәр. Әйтеүҙәренсә, запас эсте тишмәç, югинә, бөгөнгө тотороҡһоҙ климат шарттары сәселгәндең түл йыйыу һәм аҙаҡ уңыш йыйыу осорҙарында ла кирелеген күрһәтеп алыуы бик ихтимал. Унан һуң ҡайтанан сәсеү менән бәйле сығымдар арҡаһында үҫтереп алынған был уңыштың баһаһы ни хаҡҡа төшөрөн әле тәғәйен генә әйтеп тә булмай. Һәм йәнә лә илдәге хаҡтар тотороҡһоҙлоғо ла ыңғай яҡҡа йөҙ тотмаç, тигәндәй була эксперттар. Иҡтисад фәндәре кандидаты, үҙәк телевидениеның "Ауыл сәғәте"н алып барыусы Игорь Абакумов раçлауынса, әле үк игенгә хаҡтарҙың юғарыға үрләй башлауы күҙәтелә. Әле булмаған һәм нисек булыры ла билдәһеҙ быйылғы уңышҡа түгел, әлбиттә, ә былтырғыһына. Уның әйтеүенсә, Рәсәйҙә миллионлаған тонна былтырғы һәм унан да алдағы иген запаçы һаҡлана. Һәм ваҡытында уны һатырға бик ҡабаланмаған "һаҡсылдар" бөгөн килеп үҙҙәре теләгән хаҡты ҡуйырға бер ҙә оялып тормаясаҡ, имеш. "Был уларҙың Ауыл хужалығы министрлығына былтырғы миҙгелдә ҡуйылған арзан иген хаҡтары өсөн үҙенә күрә үç алыу буласаҡ",- тип тамамлай һүҙен иҡтисадсы журналист.

Эйе, ил-йорт торошондағы һәр бер көйһөҙлөктә, етешһеҙлектә, ҡытлыҡтарҙы һағалап-аңдып, уны үҙ файҙаһына бороп ебәрергә әҙер тороусы "һаҡсылдар", бизнес ҡолдары күп әле беҙҙә, үкенескә. Өҫтәүенә, йылы тарафтарҙа үҫтерелеүсе емеш-еләк ағастары һәм культураларының да зыян күреүе сәбәпле, был йүнәлештә лә ҡулланыусы күнеккән хаҡтарға өмөт итеүе ҡыйын, тип фаразлай белгестәр. Яҡшы көндә көтөп, баҡса ултырта алмай йонсоған халыҡ әлеге мәлдә картуф , йәшелсә ултырта һәм уларҙы тәрбиәләй башланы. Шул ыңғайҙан дөрөç унғанлыҡ күрһәтеп, һәр төрлө ҡытлыҡтарға һәм хаҡтарҙың кеше файҙаһына булмаған сәйәсәтенә ҡаршы торорлоҡ, үҙенде һәм ғаиләнде шәхси хеҙмәт емештәре менән буйтым тәьмин итерлек кимәлдә йәшелсәне һәм айырыуса картуфты күберәк үçтерәү хәйерлерәк, әлбиттә. Әлеге әйткәнсә, запас һәм үҙендән артып ҡалған нигмәтҡә һәр саҡ урын табыла. Халыҡ әйтмешләй, барлыҡҡа тарлыҡ юҡ .

Яҙғы гәҙәттән тыш һауа торошо һәм сәсеүлектәрҙең һәләк булыуы менән бәйле киләһе уңыштың кәмерәк йыйып алынасағы хаҡында һүҙ ҡуйыртыуҙар ҙа бар. Атап әйткәндә, "СовЭкон" аналитика үҙәге Аллаһ ҡулындағы яңы уңыштың йыйлдағыға ҡарағанда 3-4 млн тоннаға кәм буласағын иçәплап сығарырға ла өлгөрҙә хатта. Ошонан сығып, социаль селтәрҙәрҙә икмәккә һәм картуфҡа хаҡтарҙың күтәреләсәгенә күрәҙәлек ҡылына. Дөрөç, май ҡырауҙары арҡаһында игендә ситкә сығарып һатыу ниндәйҙер кимәлдә сикләнер ҙә, бәлки, һәм был һатыласаҡ иген хаҡында ла сағылыр, ләкин бойондороҡһоҙ аграр эксперттарҙың береһе Александр Корбут әйтеүенсә, был хәл илдә икмәк хаҡына бер нисек тә тәьçир итмәйәсәк. Ә бына "икенсе икмәгебеҙ" - картуфтың иртә өлгөрөүсе сорттарын, емешеләккә хаҡтарҙы, тәбиғи, баҙар үҙе көйләйәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы 2024 йылда республиканың муниципаль районда-рында һәм ҡала округтарында "Һабантуй" халыҡ байрамын ойоштороуҙың яҡынса графигын раçланы. Документҡа ярашлы, беренсе һабантуй Әбйәлил районында 25 майҙа була, башҡа район-ҡалаларҙа һабантуйҙар июнда уҙғарыла. Башҡортостан Хөкүмәтенә район һәм ҡала хакимиәттәре менән берлектә халыҡ байрамын үткәреүҙе ойоштороуҙы тәьмин итергә, республика Башлығы хакимиәтенә иһә байрам сараларында ҡатнашыу өсөн республика дәүләт органдарының вазифалы кешеләре исемлеген раçларға ҡушылды.

✓Өфөлә Рәсәй нефть-газ химияһы форумын һәм 32-се "Газ. Нефть. Технологиялар" махсуслаштырылған күргәҙмәһен асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы" йәмғиәтенең Дыуан районында урынлашҡан "Мәтәле" етештереү базаһында газ эшкәртеү буйынса яңы юғары технологияны ҡулайламаны сафка индереүгә, шулай уҡ Ғафури районында ҡасаба-ара газ үткәргесте сафка индерергә рөхсәт бирҙе. Былар Мәтәле ятҡылығында эйәрсен нефть газын файҙалы ҡулланыу дәрәжәһен 96,5 процентҡа еткерергә , ә Ғафури районында 110-дан ашыу йортто һәм яҡынса 6 социаль объектты газға тоташтырырға мөмкинлек бирә.

✓Владимир Путин үҙенең указдары менән Рәсәй Президенты хакимиәте командаһын билдәләне. Етәксе итеп Антон Вайно тәғәйенләнде. Уның беренсе урынбаçарҙары - Алексей Громов һәм Сергей Кириенко. Рәсәй Президенты хакимиәте етәксеһе урынбаçарҙары вазифаһын Дмитрий Козак, Магомедсалам Магомедов, Максим Орешкин, Владимир Островенко биләй. Дмитрий Песков дәүләт башлығының матбуғат секретары вазифаһында ҡалды. Бер үк ваҡытта ул Рәсәй Президенты хакимиәте етәксеһе урынбаçары вазифаһын да башҡара. Шулай уҡ Тула өлкәһе губернаторы Алексей Дюминдың Президент ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнеүе билдәле булды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҙур предприятие етәкселәре ҡатнашлығында төбәктең оператив штабы ултырышын үткәрҙе. Көн тәртибендә - республиканың сәнәғәт объекттарын террористик һөжүмдәрҙән, шул иçәптән пилотһыҙ осоу аппараттарынан һаҡлау. "Оператив штабтың күсмә ултырышында беҙ гәмәлдәге һаҡланыу системаһының эшен тикшерҙек һәм ошо йәһәттән өçтәмә саралар ҡабул итеү тураһында һөйләшеп килештек", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ *Уҡыусыларҙың тормошон сағылдырған, дәрестә рәхәтләнеп, кинәнеп анализларлыҡ әҫәрҙәр кәрәк. Әҙәбиәт программаһында ла юҡ ул. Бәлки, бөгөнгө көндә башҡорт әҙәбиәтен уҡымауҙың проблемаһы ла шунда яталыр?*



*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҘУР ЭШТӘР ТЫНЛЫҠ ЯРАТА



**Үткән аҙнала, 16-17 майҙа, Владимир Путиндың ҡайтанан РФ Президентлығына һайланғандан һуң тәүге рәсми сәфәрен Ҡытайҙан башлауы яңғырауыҡлы халыҡ-ара шаңдау алды.**

Сит ил мәғлүмәт саралары Ҡытай менән Рәсәйҙең бәйләнештәре бер ҡасан булмағанса көсәйеүен Көнбайыш менән АҠШ-ҡа төбәлгән "асыҡ сигнал" тип атаны: "Рәсәй лидеры үҙенең дуҫы Си Цзиньпин менән хеҙмәттәшлекте нығытып, АҠШ тарафынан алып барылған глобаль тәртипкә ҡарата протест белдереүен тағы бер раҫланы" , - тип яҙҙы Испанияның Mundo гәзите. Американың New York Times гәзите иһә Си Цзиньпиндың АҠШ йөҙөндәге "уртаҡ көнәркәш"кә ҡарағанда Путин менән хеҙмәттәшлекте өҫтөн күреүен билдәләй. Washington Post Путин менән Си Цзиньпиндың АҠШ етәкселегендәге донъяуи тәртипкә альтернатива белдереүсе лидерҙар булараҡ үҙҙәрен танытыуҙары хаҡында яҙып сыҡты. Британия гәзите Financial Times аңлатмаһына ҡарағанда, Көнбайышты Пекин менән Мәскәүҙең нығына барған хәрби хеҙмәттәшлеге борсой. Шул уҡ ваҡытта Пекиндың Путинды ҙур һәм сағыу байрам тамашаһы ҡороп ҡаршылауы ла, Цзиньпин менән Путиндың күптәнге дуҫтар булараҡ, ҡосаҡлашып, йылы күрешеүҙәре лә Көнбайыш һәм АҠШ-ты хафаланырға мәжбүр итте. Европаның Politico гәзите Рәсәй лидерының Ҡытай етәксеһе менән даими рәүештә - ҡырҡ тапҡырҙан ашыу инде осрашып күрешеүҙәре Путин менән Си Цзиньпиндың ир-егеттәрсә ныҡлы һәм ышаныслы дуҫлығы тураһында һөйләүен билдәләне.

Ҡыҫҡаһы, Рәсәй делегацияһының был эш сәфәре Пекиндың Мәскәүгә баҫым яһауына өмөт тотҡан Көнбайыштың пландарын пыран-заран килтерҙе. Әммә... Билдәле сәйәсмән Георгий Бовттың фекеренсә, Ҡытай милли традиция буйынса рәсми сәфәрҙәр барышында күберәк тышҡы атрибуттарға иғтибар биреүсән. Һоҡланғыс салют фонтаны ла, ҡыҙыл балаҫтар ҙа, нәзәкәтле мәжлес табындары ла, сағыу концерт тамашалары ла Ҡытай яғы өсөн мөһим, әлбиттә, был уларҙың ҡунаҡтарға ихлас ихтирам билдәһе, ләкин был осрашыуҙың йөкмәткеһенә килгәндә, ике яҡлы килешеүҙәрҙә хеҙмәттәшлектең бөтөн өлкәләре лә яҡтыртылһа ла аныҡ ҡына бурыстарҙың дөйөм төшөнсәләр менән биреләүе күҙгә ташлана. Икенсенән, "Себер ҡеүәте-2" проекты буйынса ла тулы аныҡлыҡ һиҙелмәүен билдәләй Г.Бовт. Уның был фекеренә РФ Энергетика хәүефһеҙлеге милли фондының генераль директоры Константин Симонов былай тип аңлатма бирә: "Ҡытай менән хеҙмәттәшлек, ысынлап та, үҫешә бара, беҙ Ҡытай нефте өләшөнән 20 процентын биләйбеҙ. Былтыр, мәҫәлән, уларға 60 млрд долларға нефть һатылды, ә был 100 млн тонна һәм был тарихи рекорд булды. Ҡытай ҙа беҙҙең баҙарҙы ҙур күләмдә тауарҙары менән тәъмин итә. Газ мәсьәләһенә килгәндә, "Себер ҡеүәте-2" проекты менән дә бер ниндәй ҙә көтөлмәгән хәлдең килеп сығыуы мөмкин түгел, сөнки ул Ҡытайға кәрәк, тик уларҙың артыҡ прагматик ҡарашы һиҙелә: йәнәһе, "был беҙгә ҡарағанда Рәсәйгә нығыраҡ кәрәк", тип уйлайҙар, ахырыһы һәм үҙҙәре өсөн уңайлыраҡ шарттар тыуыуын көтәләр".

МДУ-ның Азия һәм Африка илдәре институты директоры, шәрҡ белгесе Алексей Маслов та газ проекты мәсьәләһендә Ҡытай яғының әле әҙерлекһеҙ булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, проекттың үҙ территорияһы аша үтәсәк тәүге этабы буйынса Монголияның да был йүнәлештә эшлекле ҡатнашлығы күренмәүен билдәләй.

Ҡытай белгесе, сәйәсмән Николай Вавиловтың һығымтаһы иғтибарҙы йәлеп итә: "...күп кенә документтарға публика алдында ҡул ҡуйылманы, ләкин шуны аңларға кәрәк: ҙур эштәр тынлыҡты ярата. Йке ҙур йүнәлеш - Хәрбисәнәғәт комплексы менән финанс хеҙмәттәшлеге хаҡында һүҙ яңғыратылмаһа ла, был хаҡта ҡыҙыу фекер алышыуҙар бара..." Һәм, ысынлап та, йомғаҡлау матбуғат конференцияһында Владимир Путин был турала ентекләп һөйләп тороуҙы кәрәк тапманы. Рәсәй менән Ҡытай банктар йүнәлешендә бәйләнештәрҙе нығытасаҡ, тине ул. Ә был йәһәттән ике яҡлы инвестициялар өсөнсө илдәрҙән ышаныслы һаҡлана һәм күп миллиардлы килешеүҙәргә юл аса, милли валюталарҙы тотороҡландыра. Шулай уҡ ике ил араһында агросәнәғәт тауарҙары буйынса ла бер нисә килешеүгә ҡул ҡуйылған.

Рәсәй - Ҡытай һөйләшеүҙәрендә, әлбиттә, Украина буйынса ла һүҙ булды һәм ике лидерҙың үҙ-ара фекер алышыуынан тыш, Владимир Путин бер нисә мөһим хәбәр еткерҙе. Украинаның "тыныслыҡ формулаһы" буйынса Рәсәй үҙ гәскәрен 1991 йылғы сиккә сығарырға тейеш булһа, был реаль хәлдәргә нигеҙләнмәгәнлектән, уны ҡабул итеү йә булмаһа, уның буйынса фекер алышыу мөмкин түгел, тине. Зеленскийҙың президентлыҡ мөҙҙәте үтеп китеү сәбәпле Путин был мәсьәләнең Мәскәү өсөн мөһим булыуын һәм яҙмыштар хәл ителә торған документтарға фәҡәт легитим властар менән генә ҡул ҡуйылыуын белдерҙе.

Башҡа төр яңылыҡтарға ҡағылышлы, АҠШ президенты Джо Байдендың Киевҡа 375 млн доллар суммаға хәрби ярҙам вәғәҙә итеп ҡайтыуын әйтергә кәрәк. Был хаҡта ул Хиросимала барған G-7 саммитында шәхсән белдерҙе, ләкин Аҡ йортта бындай ярҙам күрһәтеүгә әҙер булмауҙары хаҡында һүҙ алып барыла. Был әлегесә, Байден менән йыш ҡабатланыусы "һул ҡулы эшләгәнде уңы белмәй" торған сираттағы уңайһыҙ хәлдәрҙең береһе түгел микән, тигән һорау тыуа. Шул уҡ ваҡытта Украинаның экс-премьеры Николай Азаров иҫәпләүенсә, Харьков йүнәлешендәге күңелһеҙ хәлдәргә һәм мобилизация тирәләй ығы-зығыға бәйле АҠШ-тың Киевҡа килеп төшкән Дәүләт секретары Энтони Блинкен, Украина гәскәре уңышһыҙлыҡтарында ғәйепте Көнбайышҡа япһарырға маташҡаны өсөн Зеленскийға етди шелтә белдерҙе һәм ярҙамдың ошо араларҙа килеп етәсәген вәғәҙәләне. Ә был ваҡытта иһә Украинала мәжбүри мобилизация бара: һуғышҡа барырға теләмәгәндәргә физик һәм психологик көс ҡулланыу, хатта ки кешеләрҙе урлау күренештәре йышая, тип хәбәр ителә Харьков өлкәһе хакимиәтенең Телеграм-каналға һалған видеоһында.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

# БАЛАЛАРЫБЫҘ... китап уҡыймы?



**Республикала үткән бик матур Китап байрамы алдынан беҙҙе, башҡорт теле уҡытыусыларын борсоған ошо һорауҙарымды күтәргем килә: "Ниндәй ул бөгөнгө балалар әҙәбиәте?", "Кескәй балалар уҡыһын өсөн ниндәй әҫәрҙәр ижад итергә кәрәк?"**

Мостай Кәримдең "Өс таған", "Беҙҙең өйҙөң йәме", Зәйнәб Биишеваның "Дуҫ булайыҡ" әҫәрҙәре яҙылыуға ярты быуаттан күберәк ваҡыт үткән. Әммә хәҙерге быуын - гаджет заманы балалары ошо әҫәрҙәрҙе һаман яратып уҡый. Яратып уҡылған әҫәрҙәргә һуңғараҡ яҙылған Фәрзәнә Аҡбулатованың "Атай икмәге"н дә индерер инем. Бының сере нимәлә? Балаларҙың психологияһын белеүҙәнме, яҙыусының балалар кимәлендә фекерләп, ябай тел менән яҙыуындамы? Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙер мин башҡорт әҙәбиәтендә шул кимәлдә йығылып ятып уҡырлыҡ әҫәрҙәрҙе ҡапыл ғына иҫкә лә төшөрә алмайым. Был башҡорт әҙәбиәтендә ҙур бер проблема. Хатта башҡорт әҙәбиәте программаһын алып ҡарағанда ла, унда күберәк ололар өсөн, ололар темалары булған әҫәрҙәрҙе үтәбеҙ.

Хәҙер Гарри Поттерҙы уҡыған тотош бер быуын үҫеп сыҡты. Бөгөн килеп, минең ейәнем Старкерҙы мауығып уҡый. Бына ошондай кимәлдә балаларҙың бөтә зиһенен биләп алған, ҙур бер сенсация тыуҙырған әҫәрҙәр бик әҙ. Шуға ла уйланам: бөгөнгө башҡорт балаларының милли әҙәбиәтте уҡымауы, бәлки, әҫәрҙәрҙең ҡатмарлы тел менән яҙылыуындалыр? Улар өсөн ябайыраҡ тел менән яҙырға кәрәктер, мажаралы, мауыҡтырғыс, әммә ябайыраҡ тел менән.

Тағы ла беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙә балаларҙың мәктәп тормошон күрһәткән әҫәрҙәр юҡ, тиерлек. Уҡыусыларҙың тормошон сағылдырған, дәрестә рәхәтләнеп, кинәнеп анализларлыҡ әҫәрҙәр кәрәк. Әҙәбиәт программаһында ла юҡ ул. Бәлки, бөгөнгө көндә башҡорт әҙәбиәтен уҡымауҙың проблемаһы ла шунда яталыр?

Эйе, беҙ бәләкәй саҡта башҡорт әҙәбиәтен йығылып ятып уҡыныҡ. Балалар әҙәбиәтеме, ололарҙыҡымы, беҙҙең өсөн барыбер ине. Ә бөгөнгө заман балаһы ул бөтөнләй икенсе. Уларҙы әүрәтеп алып китерлек, үҙебеҙгә ылыҡтырырлыҡ балалар әҙәбиәтен табыуы еңел түгел. Бәлки, матур әҫәрҙәр барҙыр ҙа, баҫылып та сығалыр, әммә улар мәктәп китапханаһына килеп етмәй. Мин каникулға балалар ҡулына китап тотторop ҡайтарырға, тип, китапханаға барам. Тик элекке заманда ололар өсөн сыҡҡан әҫәрҙәрҙән башҡа, бишенсе-етенсе класс уҡыусылары ҡулына тотторорҙай китап таба алмайым. Нишләп китапханаларҙы яңы нәшерләнгән әҫәрҙәр менән тәъмин итмәйҙәр? Улар килеп етмәйме, әллә юҡмы? Килеп етмәгәс, беҙ, башҡорт теле уҡытыусылары ла, ул әҫәрҙәрҙе уҡымайбыҙ, улар менән таныш түгелбеҙ. Бына ошо һорау асыҡ ҡала.

**Фәйгәл ӘМИРХАНОВА,**
**Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡытыусыһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓20-31 майҙа республиканың алыҫ ауылдарында "Сәләмәтлек поездары"ның эше билдәле булды. Медицина хеҙмәткәрҙәренең күсмә бригадалары был көндәрҙә Учалы, Дыуан, Ҡалтасы, Тәтешле, Бүздәк, Әлшәй, Ишембай, Архангел һәм Ҡырмыҫҡалы райондары ауылдарынан пациенттарҙы тикшерә. Белдереүҙәренсә, халыҡты йәнле сират буйынса ҡабул итәләр, алдан яҙылырға кәрәкмәй, үҙең менән паспорт һәм мотлаҡ медицина страховкаһы полисын алырға кәрәк. Шулай уҡ "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы барышында табиптарҙың 2024 йылдың башынан алып 33 мендән ашыу кешене ҡабул итеүе билдәле булды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Дыуан районының урта звено медицина белгестәрен урындағы дауаханаларға һәм поликлиникаларға йәлеп итеү йәһәтенән эшен билдәләне. Муниципалитеттың 2023 йылда күрһәткестәре 102,8 тәшкил иткән. Шулай уҡ Сибайҙа, Белорет районында һәм Өфөлә план күрһәткестәренә өлгәшелгән. Ғафури, Бөрө, Ҡыйғы, Балтас, Мәсетле һәм Ейәнсура райондары юғары күрһәткестәргә ирешкән, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Благовещен, Кушнаренко, Краснокама һәм Благовар райондарында был күрһәткестәр түбән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров үҙенең телеграм-каналында Ляонин провинцияһы губернаторы Ли Лэчэн менән файҙалы осрашыуы хаҡында яҙып сыҡты. Башҡортостан менән Ҡытай араһында хеҙмәттәшлек бынан 25 йыл элек тап ошо провинциянан башланған, тип иҫкә төшөрҙө ул. Андрей Назаров Ли Лэчэнға туғандаш ҡалалар Өфө менән Шэньян араһында тура авиабәйләнеш асыу мөмкинлеген ҡарарға тәҡдим итеүе тураһында хәбәр итте. Был бизнес-берләшмә өсөн логистиканы еңеләйтергә һәм туризм үҫешенә этәргес бирергә тейеш.

✓Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостанға мәктәптәрҙәге класс етәкселәренә айлыҡ түләү өсөн 255,8 миллион һум һәм 100 мендән аҙыраҡ халыҡ йәшәгән тораҡ пункттарҙағы техникумдарҙа һәм колледждарҙа төркөм кураторҙары өсөн 18,5 миллион һум бүлә. Ошо хаҡтағы бойороҡҡа Рәсәй Федерацияһы Премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Ил төбәктәренә шуның өсөн бөтәһе 8 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә. Әйткәндәй, 1 марттан түләү 5 мендән 10 мең һумға тиклем арттырылды.

✓ *"Башҡортостан Рәсәй тормошонда, тарихында һәм яҙмышында һәр ваҡыт айырым, әһәмиәтле роль уйнаны", - тигәйне Рәсәй Президенты Владимир Путин 2023 йылда республиканың баш ҡалаһына сәфәре барышында.*



ҠЫҪҠАСА

# ҺАЙЛАУҘАР

**2024 йылдың 8 сентябрендә Башҡортостанда республика Башлығын һайлау үткәрелә.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының граждандарҙың йәмғиәте институттарын үҫтереү, мәғлүмәт сәйәсәте һәм дин эштәре буйынса комитеты республика парламентының тейешле ҡарарын әҙерләгән. Көнө Башҡортостан Республикаһы Һайлау тураһында кодексының 10-сы статьяһына ярашлы билдәләнгән. Һайлау сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһендә үткәрелергә тейеш, тиелгән унда. Быйыл был дата 8 сентябргә тура килә. Башҡортостан Конституцияһына ярашлы, республика Башлығын һайлауҙы тәғәйенләү Дәүләт Йыйылышы ҡарамағында. Мәсьәләне парламенттың май аҙағындағы пленар ултырышының көн тәртибенә индереү планлаштырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Башинформ" Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Радий Хәбировты яңы срокка тәҡдим итеүҙе хуплауын хәбәр иткәйне.

✓ **Радий Хәбиров социаль селтәрҙә "Рәсәй - Ислам донъяһы" стратегик ҡараш төркөмө ултырышында ҡатнашыуы хаҡында яҙҙы. Был мөһим форумға йыл һайын мосолман илдәренең һәм Рәсәйҙең ислам динен тотҡан төбәктәренең дипломатик корпусы вәкилдәре йыйыла.** Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, ошо сарала ҡатнашыу бик мөһим, сөнки республикала 2 миллиондан ашыу мосолман йәшәй. Әммә, мәҙәни өлөштән тыш, төбәк өсөн тышҡы иҡтисади эшмәкәрлек тә мөһим. "Бөгөн республика көнсығышҡа ҡарай борола. Сауҙа әйләнешенең дүрттән бер өлөшө Үҙәк Азия илдәренә тура килә, Төркиә, Иран Ислам Республикаһы менән әүҙем эш алып барабыҙ. Бурысыбыҙ - республика иҡтисады үҫешен тәьмин итеү, ә тышҡы партнерҙар булмаһа, был мөмкин түгел", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостандың ауыл хужалығы министры урынбаҫары Ирек Сураҡов "Сәләм" тапшырыуының тура эфирында 2024 йылғы сәсеү кампанияһының барышы хаҡында һөйләне.** Әле аграрийҙар дым ҡаплатыуҙы, ужым культураларын һәм күп йыллыҡ үҫемлектәрҙе туҡландырыуҙы тегәлләгән, яҙғы культураларҙың 52 проценттан ашыуы сәселгән. Көндәрҙең иртә йылытыуы һәм ҡырау 1000 гектарға яҡын шәкәр сөгөлдөрөн, етенде һәм рапсты һәләк иткән, шулай уҡ 15 мең гектарҙан күберәк культуралар зыян күргән. "Быйыл беҙҙә һауа шарттары ғәҙәттәгесә түгел, республикала, тотош Рәсәйҙә лә. Юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, аграрийҙар эшләй. Мониторинг алып барабыҙ, кәрәк икән, яңынан сәсәбеҙ. Республика баҫыуҙарында 12 меңдән ашыу трактор һәм сәсеү комплексы эшләй. Санкциялар булһа ла, ҡоротҡостарҙан һаҡланыу саралары бар, йыл һайын баҫыуҙарҙа 1,2 мең тоннанан ашыу пестицид һиптерәбеҙ, 1 мең тоннанан ашыу тупланған биопрепараттар ҡулланабыҙ", - тине Ирек Сураҡов.

✓ **Республиканың Хәрби Дан музейы етәксеһе урынбаҫары Лилиә Нурасова бөгөн төбәктә 124 Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы йәшәүен әйтте.** Уның һүҙҙәренсә, 200 мең яугир орден-миҙалдар (шул иҫәптән Миңлегәле Шайморатовтың легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 3860 яугиры) менән бүләкләнгән, 299 кеше - Советтар Союзы Геройы, ә 47-һе Дан орденының тулы кавалеры исеменә лайыҡ булған. Республикала йәшәүселәр фронтта ғына түгел, тылда ла ҡаһарманлыҡ күрһәткән. Алты яҡташыбыҙ фиҙакәр хеҙмәте өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен алған. Башҡортостандан 710 мең кеше фронтҡа киткән, уларҙың 322 меңе әйләнеп ҡайтмаған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХАЛЫҠТАРҘЫҢ БЕРҘӘМ БИШЕГЕ



**Билдәле булыуынса, бөгөн төрлө дәүләттә йәшәгән халыҡтар элек Евразия киңлеге биләмәһендә күсмә һәм ярымкүсмә тормош алып барған. Беҙҙең бурыс - уларға барыбыҙҙың да тамырҙары Евразия тарихына һәм киңлегенә барып тоташыуын күрһәтеү. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы 2023 йылдың февралендә Күсмә цивилизациялар музейы концепцияһы проекты буйынса фекер алышҡанда әйтте.**

Сара барышында Республиканың Күсемһеҙ милек объекттарын файҙаланыу һәм һаҡлау буйынса фәнни-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин музей проектының фәнни нигеҙен күрһәтте, Өфө, Шишмә, Салауат райондарында табылған археология материалдары менән таныштырҙы.

Республика мәнфәғәттәренә яуап бирәсәк Евразия музейы боронғолоҡ менән бөгөнгөнө, ҡасандыр Бөйөк далала йәшәгән халыҡтарҙы яҡынайтырға булышлыҡ итәсәк, бер нисә төп тарихи һәйкәлде, шул иҫәптән XIV-XV быуаттарҙағы Турахан һәм Хөсәйенбәк кәшәнәләрен берләштерәсәк, туристарҙы, ғалимдарҙы, сәнғәт, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен, спортсыларҙы, ғаиләләрҙе йәлеп итәсәк, тип билдәләнде.

Буласаҡ музейҙың визит-үҙәге бинаһының майҙаны 600 кв. м. Унда артефакттар экспозицияһы, лекция залы, депозитарий, кафе һәм ҡарау майҙансығы урынлаштырыласаҡ. Визит-үҙәккә әлеге ваҡытта Башҡортостандың Милли музейында һаҡланған Осман Ҡөрьәне ҡуйыласаҡ, уны былтыр "Китап байрамы"нда республикаға бирҙеләр. Унда шулай уҡ Башҡортостандың картаһы менән XVIII быуаттағы Рәсәй атласы ла урын аласаҡ. Әлеге ваҡытта визит-үҙәктең бинаһы төҙәлгән, бина эсендә һәм фасадта эш бара. Кәшәнәгә табан 600 метрлыҡ һуҡмаҡ һалынған. Музей биләмәһендә СПА-шифахана, Башҡорт аты һәм һунар ҡоштары үҙәге, ике ипподром, этноауыл төҙөләсәк, халыҡ кәсептәре тергеҙеләсәк. Кәсепселек ауылы күргәҙмә өсөн генә түгел, ә продукция етештереү һәм һатыуҙы күҙ уныңда тота. Айырыуса беҙҙең республикала үҫешкән кәсептәргә иғтибар биреләсәк: кейеҙ баҫыу, туҡыусылыҡ, туҙҙан әйбер эшләү һәм башҡалар.

Проекттың икенсе әһәмиәтле яғы - музейҙа илдәге иң ҙур дисциплина-ара археология тикшереүе үҙәктәренең берәһен булдырыу. Археология материалдарын, эпиграфика һәм палеография һәйкәлдәрен өйрәнеүҙең һанлы ысулдарына иғтибар ҙур буласаҡ.

"Хөсәйенбәк, Турахан һәм Бәләкәй кәшәнәләре торған биләмә боронғо күскенселәрҙең үҙәге булған. Алтын Урҙаның юғары дәрәжәләге кешеләре тап ошонда килгән. Беҙҙең бурыс - Урта быуат Евразияһының сикһеҙ киңлектәрендә йәшәгән дала халыҡтары тарихының, мәҙәниәтенең хронологияһын күрһәтеү. Музей сиктәрендә Евразия күсмә халыҡтарының уникаль мәҙәниәтен һыҙыҡ өҫтөнә алыу, уларҙың Рәсәй дәүләте варисы булған Үҙәк Евразияның дәүләт алды һәм дәүләт берәмектәрен булдырыуҙағы мөһим ролен күрһәтеү", - тип билдәләне БР Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев.

"Башҡортостан Рәсәй тормошонда, тарихында һәм яҙмышында һәр ваҡыт айырым, әһәмиәтле роль уйнаны, - тигәйне Рәсәй Президенты Владимир Путин 2023 йылдың ғинуарында республиканың баш ҡалаһына сәфәре барышында. - Бында бер нәмә лә уйлап сығарырға кәрәкмәй. Рәсәй империяһы составына үҙ ирке менән ингәндән алып башҡорттар үҙ ирке менән айырым миссияны - берҙәм Ватандың тышҡы сиктәрен һаҡлауҙы үҙ өҫтөнә алды. Шулай уҡ Өфө, республиканың баш ҡалаһы һәр ваҡыт Рәсәй Исламының мөһим үҙәктәренең береһе булды. Ислам донъяһында мәғрифәтле, ижади һәм бик абруйлы, шул уҡ ваҡытта патриотик йүнәлешле, илебеҙҙең башҡа традицион конфессиялары менән үҙ-ара эш итеүгә көйләнгән Ислам", - тине Владимир Путин.

Һәм республика сираттағы тапҡыр Евразия халыҡтарын берләштергән төбәккә әйләнәсәк.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ҮЗБӘКТӘР КИЛДЕ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 17 майҙа Ташкент өлкәһе хакимы Зойир Мирзаев һәм Фирғәнә өлкәһе хакимы урынбаҫары Нуриддин Мамажанов менән осрашты. Республика етәксеһе Үзбәкстан делегацияһы менән халыҡ-ара хеҙмәттәшлектең юл картаһын тикшерҙе.**

"Үзбәкстан - беҙҙең өсөн бик мөһим, стратегик партнер, ул республикабыҙҙың тышҡы сауҙа әйләнеше өлөшө буйынса бишенсе урынды биләй. Шул уҡ ваҡытта мөнәсәбәттәрҙе артабан үҫтереү өсөн яҡшы мөмкинлектәр бар, беҙ быны уңышлы тормошҡа ашыра алабыҙ. Осрашыуыбыҙ иң тәүҙә сәнәғәт кооперацияһын формалаштырыуға булышлыҡ итер, тип ышанам. Мәҙәни, гуманитар һәм туристик алмашыу йүнәлештәрен дә тикшереү мөһим", - тип Хәбировтың һүҙҙәрен килтерә Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте.

Ташкент өлкәһе хакимы Зойир Мирзаев производство һәм бизнес өлкәһендә мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыуҙы сәфәрҙең төп маҡсаты тип билдәләне. "Беҙ яңы үҫеш нөктәләрен булдырыу өсөн мөмкинлектәребеҙҙе күрһәтергә, төрлө өлкәләрҙә төбәгегеҙҙең алдынғы тәжрибәһен өйрәнергә әҙербеҙ", - тине ул. Фирғәнә өлкәһе хакимы Нуриддин Мамажанов әйтеүенсә, килеһе аҙнала Өфөгә Башҡортостан менән артабанғы хеҙмәттәшлек йүнәлештәрен ентекле тикшереү өсөн вәкиллекле делегация килә.

Шулай уҡ осрашыуҙа Үзбәкстан өлкәләре менән логистик бәйләнештәрҙе үҫтереү һәм сәнәғәт кооперацияһын үҫтереү мөмкинлектәре тикшерелде. Һүҙ республика биләмәһендә уртаҡ технопарктар булдырыу хаҡында бара. "Бөгөн тап технопарктар иҡтисад өсөн үҫеш этәргестәре булып тора. Шул уҡ ваҡытта беҙ уларҙың эшенең төрлө йүнәлештәрен ҡарарға әҙер. Улар машина эшләү, туҡыу, фармацевтика һәм башҡалар булырға мөмкин. Хеҙмәттәшлекте үҫтереүҙең юл картаһы нигеҙендә эшләргә тип һөйләшеп килештек. Әлеге сәфәр аныҡ проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн һәйбәт этәргес булыр", - тине Радий Хәбиров.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда күп балалы 50 ҡатын "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнде. Бүләкләнеүселәр араһында - Ауырғазы, Баймаҡ, Бәкалы, Белорет, Бүздәк, Борай, Ғафури, Дүртөйлө, Йылайыр, Иглин, Илеш, Ишембай, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы, Миәкә, Салауат, Стәрлебаш, Тәтешле, Туймазы, Учалы, Хәйбулла, Саҡмағош, Шишмә һәм Шаран райондары, Сибай һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары вәкилдәре бар. Башҡортостанда "Әсәлек даны" миҙалы 1998 йылда булдырылған. Был награда, республика ҡануниәтенә ярашлы, биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән әсәләргә тапшырылырға тейеш.

✓Өфөлә Һуңғы ҡыңғырау байрамы ваҡытында бер нисә урамда автомобиль һәм транспорт хәрәкәте сикләнә. Был хаҡта баш ҡала хакимиәте хәбәр итә. Йома, 24 майҙа, төнгө ун икенән көндөҙгө 4-кә тиклем "Ватан" паркының өҫкө һәм түбәнге парковкалары, шулай уҡ "Торатау" конгресс-холы ҡаршыһындағы парковка ябыла. Бынан тыш, көндөҙгө 12-нән 4-кә тиклем генерал-губернатор Перовский, Зәки Вәлиди (Аксаковтан Ғафуриға тиклем), Ғафури (Пятигорскаянан Пушкинға тиклем) урамдарында сикләү индерелә. Баш ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарын икенсе маршруттарҙы алдан билдәләргә саҡырҙылар.

✓Өфөлә "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе ойоштороla, был иһә баш ҡалабыҙҙың 450 йыллығы айҡанлы сараларҙың тәүгеһе. Былтыр ул тотош Рәсәйҙең һәм яҡын сит илдәрҙең китап нәшер итеүселәрен, яҙыусыларын һәм уҡыусыларын йәлеп итеү урынына әүерелде. 22 майҙан 27-һенә тиклем Пушкин (Цюрупанан Ленинға тиклем) һәм Совет (Зәки Вәлидиҙән Пушкинға хәтлем) урамдарында транспорт хәрәкәте үҙгәртелә, тип хәбәр итә республика Транспорт министрлығының матбуғат хеҙмәте. Йәмәғәт транспорты маршруттары схемаһы үҙгәрә.

✓Башҡортостан Башлығы "Хәрби-патриотик тематикаға арналған художестволы әҫәрҙәрҙе конкурс нигеҙендә һайлап алыу тураһында" указ сығарҙы. Документта былай тиелә: "2024 йылда һәм артабан йыл һайын хәрби-патриотик тематикаға бағышланған, шул иҫәптән махсус хәрби операциялағы ваҡиғаларҙы һәм геройҙарҙың батырлығын яҡтыртыуға йүнәлтелгән художестволы әҫәрҙәр конкурс буйынса һайлап алына". Программаның финанслау күләме - йылына 10 миллион һум.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ



**Быйыл Өфө мәктәптәрен 4300-ҙән ашыу ун беренсе класс уҡыусыһы тамамлай. Тантаналы сараларҙың көндәрен Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы тәҡдим иткән.**

Шуға бәйле һуңғы ҡыңғырауҙар һәм сығарылыш кисәләре бер көндә ойошторола, тип хәбәр итә мәрияның матбуғат хеҙмәте. Сығарылыш уҡыусылары, уҡытыусылар һәм ата-әсәләр өсөн дөйөм ҡала байрамы 24 майҙа көндөҙгө сәғәт 2-лә "Торатау" конгресс-холы майҙансығында була. Ул "Мәктәп йылдары" вальсын башҡарыуҙан башлана. Артабан Рим Хәсәнов көйөнә ижад ителгән "Өфө йүкәләре" гранд-вальсы сығарылыш уҡыусыларын берләштерә. Шулай уҡ концерт программаһында: уҡытыусылар һәм сығарылыш уҡыусылары хоры, флешмоб. Сара фейерверк-серпантин менән тамамлана. Шул уҡ көндө 12 меңдән ашыу туғыҙынсы класс уҡыусыһы өсөн тантаналы линейкалар була. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 24 майҙа юлдар ябыла, ә Өфөлә һәм республикала хәмер һатылмай.

# ТӨҘӨКЛӘНДЕРӘЛӘР!



**Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында Башҡортостан Башлығы Өфөнөң Ленин исемендәге паркын төҙөкләндереү тураһында әйтте.**

Эштәрҙе быйыл уҡ башларға йыйыналар. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Хөкүмәт бинаһы янындағы паркта республиканың беренсе президенты Мортаза Рәхимовҡа һәйкәл ҡуйылды. Радий Хәбиров ял итеү урынын күркәмләндереү йәһәтенән баш ҡала халҡы менән кәңәшләшергә ҡушты. "Иң мәһиме - яҡшы концепция уйлап, фекер алышыуға сығарыу. Сөнки кешеләр һәр ағас һәм таш өсөн һорашасаҡ, сөнки был - уҙәк парк", - тип билдәләне республика етәксеһе. Хөкүмәт премьер-министры Андрей Назаров һүҙҙәренсә, төҙөкләндереү концепцияһын әҙерләй башлағандар. Реконструкцияланған паркты 2024 йылдың аҙағына файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана.

Шулай уҡ баш ҡалалағы яңыртып төҙөлә башлаған Башҡортостан урмансылар паркында ла эштәр быйыл сентябрь аҙағына тиклем дауам итәсәк. Әлеге көндә парк биләмәһендә һүтеп алыу һәм ер эштәре алып барыла. Иҫке асфальт ҡатламы тулыһынса яңыртыласаҡ, велосипедта йөрөү өсөн юлдар йәйеләсәк. Төҙөкләндереү проектында биш объект: пикник өсөн урын, бәләкәй һәм ҙур спорт майҙансығы, балалар майҙансығы һәм йәйәүлеләр өсөн һуҡмаҡтар селтәре. Спорт майҙансығында икешәр футбол яланы, волейбол майҙансығы һәм баскетбол, стритбол, йүгереүселәргә юл, тәнде яҙыу өсөн махсус урындар булдырыласаҡ. Балалар майҙансығында ағастан эшләнгән әйберҙәр ҡуйыла. Бәләкәй майҙансыҡта воркаут зонаһы, пинг-понг өҫтәле, шахматсылар өсөн түбәһе ябыҡ урындар төҙәлә.

# ЮБИЛЕЙ УҢАЙЫНАН…

450 ӨФӨ

**Өфөлә баш ҡаланың 450 йыллыҡ юбилейы уңайынан ҙур спорт объекттары төҙөлә.**

Затон биҫтәһендә Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәге янында Фехтование үҙәге асылға. Дөйөм майҙаны 6 мең квадрат метрҙан ашыу тәшкил иткән объект йыл аҙағына тиклем тапшырылырға тейеш. Ошо арала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров төҙөлөш барышы менән танышты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылдың 15 декабрендә республика етәксеһе яңы спорт объекты нигеҙенә һыныу свайын ҡағыу тантанаһында ҡатнашты. "Өфөнөң инвестиция-төҙөлөш комитеты" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Марат Вәсимов һүҙҙәренсә, бинала төп төҙөлөш эштәре тамамланған, бында төҙөүселәр фасад һәм биҙәкләү эштәренә тотонған.

Шулай итеп, 42х24 метр ҙурлығындағы универсаль спорт залында фехтование өсөн 8 юл була. Юғары кимәлдәге турнирҙарҙы тап ошонда үткәрергә мөмкин. Объектта шулай уҡ махсус спорт залы, шәхсән шөғөлләнеү өсөн тренажер һәм спорт залдары бар. Трибуналар 373 урынға иҫәпләнгән. Бында гардероб, тренерҙар, комментаторҙар, судьялар бүлмәһе, душ инеү, сисенеп-кейенеү урындары була. Бынан тыш, Фехтование үҙәгендә ҙур булмаған бассейн, буфет, конференц-зал һәм спорт тауарҙары магазины ҡаралған. Төҙөүселәр эштәрҙе йәй аҙағына тамамлап, көҙ көнө Фехтование үҙәген сафҡа индерергә вәғәҙәләй. Уны Өфөлә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара форумы барышында асыу күҙаллана. Ә декабрҙә бында фехтование буйынса тәүге ярыштар ойоштороласа.

"Ошондай ҙур спорт объектын төҙөүгә күңел шатлана. Олимпия чемпиондары Аделина Заһиҙуллина менән Тимур Сафин, тренерҙар минә мөрәжәғәт иткәс, 300 миллионға бәләкәй үҙәк төҙөрбөҙ тип уйлағайным. Был инде миллиард һумға барып баҫты. Ауыр бирелә, әммә объект бөтөнләй икенсеһе килеп сыҡты. Рәсәйҙә ошондай ике фехтование үҙәге бар. Мәскәү өлкәһендә һәм Новосибирскиҙа. Икеһе лә күренекле спортсыларҙың исемен йөрөтә. Беҙҙекенә билдәле тренер Рәмил Әйүповтың исеме бирелә. Был Рәсәй Федерацияһында иң яҡшы фехтование үҙәге булыр, моғайын", - тине Радий Хәбиров, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналисының һорауына яуап биреп.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ИСМӘҒИЛЕВ ЗАҺИР ҒАРИФ УЛЫ

З.Ғ. Исмәғилев - башҡорт композиторы. БАССР-ҙың, РСФСР-ҙың һәм СССР-ҙың халыҡ артисы, Башҡортостан Фәндәр Академияһы академигы, дәүләт эшмәкәре.

Заһир Исмәғилев 1917 йылдың 8 ғинуарында Верхнеурал өйәҙе Үрге Сермән ауылында тыуған.Түбәнге Сермән ауылында ете йыллыҡ башҡорт мәктәбендә уҡый. Бала саҡтан милли музыка менән мауыға, ҡурайҙа уйнай. 1932 йылда Инйәр урман-химия техникумына уҡырға инә, уны ваҡытынан алда тамамлай һәм Белорет леспромхозында эш башлай. Күренекле артист Арыҫлан Мөбәрәков менән танышҡас, уны Булат Имашев Өфөгә Башҡорт академия драма театры янындағы студияға уҡырға саҡыра. 1937 йылда П. И. Чайковский исемендәге Мәскәү консерваторияһының башҡорт төркөмөнә уҡырға инә. Һуғыш ваҡытында фронт бригадалары концерттарында ҡатнаша, патриотик йөкмәткеле йырҙар яҙа.

1948 йылда студияла уҡыуын тамамлағас, Мәскәү консерваторияһының композиторҙар әҙерләү факультетына уҡырға инә, уны 1954 йылда композиция класы буйынса тамамлай. Диплом эше - "Салауат Юлаев" операһы.

Композиторҙың ижады киң ҡоласлы. Милли опера, камера-вокал, хор һәм инструменталь музыканы үҫтереүгә ифрат ҙур өлөш индерә. Үҙенең ижадында рус музыкаль мәҙәниәте классиктары традицияларын ҡуллана, уларҙың тарихи һәм музыкаль-драматик концепцияларын үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индерә. Милли-тарихи тематиканы сағылдырған "Урал илселәре","Ҡаһым түрә", "Аҡмулла", лирик-драматик "Шәүрә" һәм "Ағиҙел тулҡындары" опералары, "Ҡоҙаса" һәм "Алмаҡай" музыкаль комедиялары авторы. 300-ҙән ашыу йыр һәм романстар ижад иткән. Заһир Исмәғилевтың әҫәрҙәре Рәсәйҙә, СССР-ҙың элекке милли республикаларында һәм сит илдәрҙә (Болгария, Ҡытай, Румыния, Төньяҡ Корея, Югославия, Эфиопия) башҡарыла.

Өфө сәнғәт институтын ойоштороусы, уның тәүге ректоры (1968-1988). 1954-1978 йылдарҙа - БАССР Композиторҙар союзы рәйесе, 1960 йылдан РСФСР Композиторҙар союзы секретары. Башҡорт АССР-ының 6-8 саҡырылыш Юғары Советы рәйесе.

2003 йылдың 30 майында Өфө ҡалаһында вафат була, Өфө мосолман зыяратында ерләнә.

Наградалары: Ленин, Октябрь Революцияһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Халыҡтар Дуҫлығы, "Почет билдәһе", "Салауат Юлаев" ордендары кавалеры.

РСФСР-ҙың Глинка исемендәге премияһы, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты. Өфө дәүләт сәнғәт институты Заһир Исмәғилев исемен йөрөтә. Өфөлә Башҡорт опера һәм балет театры янындағы скверҙа З. Исмәғилевкә һәйкәл ҡуйылған.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы күтәрелеүҙән һиҙгәс тә 2 ҡалаҡ мүк елгән ҡалаҡ менән иҙеп, 2 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Дауаны көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда берәр ҡалаҡ ҡабул итергә. Хәл тиҙ яҡшыра.

## Бөйөр

❖ Бөйөр сирҙәрен дауалағанда цикорий яҡшы ярҙам итә. 2 ҡалаҡ ваҡланған цикорий үләненә (сәскәләре менән) ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта йәки боҫта 10 минут тоторға. Шунан һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Иҫкәртмә: ашҡаҙан һәм бөйән язваһы, нервы ярһыуы, гастрит булғандарға цикорийҙы ҡулланырға ярамаҫҡа мөмкин. Цикорий тамырынан яһалған эсемлектәр ҡан тамырҙарын киңәйтә һәм ҡан баҫымын күтәрә.

❖ 1 ҡалаҡ һарыгүҙ (золототысячник), 1 ҡалаҡ еҫле һирмауыҡ (ясменник душистый), 2 ҡалаҡ айыу ҡолағы (коровяк скипетровидный), 2 ҡалаҡ аҡбаш (лабазник шестилепестной) үләндәрен ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. 1/3 стаканлап көнөнә биш тапҡырға тиклем эсергә ярай.

## Таҙарыныу

❖ Организмды таҙартыу өсөн бер ус ҡайын алҡаһын ваҡлап, 0,5 литр араҡы ҡойорға һәм 7 көн төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 1-әр ҡалаҡ эсергә (ир-тәнсәк һәм кискә). Был рәүешле төнәтмә бөткәнсе дауаланырға. Ул бөтә организмды таҙарта, бигерәк тә ҡурылдай, үпкә, быуындар һәм ҡан тамырҙарын.

❖ Был үләндәр төнәтмәһе организмды витаминдар менән туйындыра һәм көс өҫтәй. Уны әҙерләү өсөн тигеҙ өлөштә шифалы ромашка, меңъяпраҡ, шинмәсғәл һәм ҡайын бөрөләре кәрәк. Килеп сыҡҡан йыйылманың 2 ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 20 минут парҙа тоторға. Шунан һыуынғансы төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәгә 2 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Был төнәтмәне 1 ай дауамында ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Төйләгән

(Черный коршун)



Сағыштырмаса тар ҡанатлы (ҡанаты йәйелгән көйө метр ярым) эре ҡош. Башҡа йыртҡыс ҡоштарҙан ҡойроғо менән айырылып тора, ул икегә айырылған. Төҫө ҡара көрәнһыу, түше аҡһылыраҡ, ҡара төҫтәге буй-буй һыҙаттары бар, башының өҫкө яғы аҡһыл. Бик талғын оса. Тауышы ҡалтырауыҡлы, ҡайһы берҙә ҡолон кешнәгән кеүек ишетелә.

Рәсәйҙең күп территорияларында, шул иҫәптән, Көньяҡ Уралда киң таралған ҡош. Һуңғы йылдарҙа һирәгерәк осрай.

Урманда, ағаста оя ҡора, һыу яткылыҡтары, ауыл, ҡалалар тирәһендә осрай. 2-3 йомортҡа һала. Емтек, кимереүселәр, тәлмәрйендәр, һирәгерәк бөжәктәр һәм вағыраҡ ҡош менән туҡлана. Балыҡ ярата. Йорт бәпкәләрен төйләгәндең ҡайһы бер төрҙәре генә "урлай". "Санитар" ҡош булараҡ, кеше йәшәгән ерҙәрҙә йыш күренә.

## Диңгеҙ бөркөтө, балыҡ бөркөтө, аҡҡойроҡ бөркөт

(Орлан-белохвост)



Эре йыртҡыс ҡош, бөркөткә оҡшаған, тик ҡанаты кинерәк. Оло ҡоштоң төҫө көрән, аяҡтары ҡара-һоро. Ҡойроғоноң аҫты һәм аяҡтары аҡ, исеме лә ошонан килеп сыҡҡан. Башы, муйыны ла аҡһыл. Күҙҙәре, суҡышы, тәпәйҙәре - һары, тырнағы ҡара төҫтә. Бала ҡоштоң үҫә килә төҫө лә үҙгәрә.

Аҡҡойроҡ бөркөт юғалып барған төр булараҡ, бөтөн төр Ҡыҙыл китаптарға ингән. Рәсәйҙә бөтөн ерҙә лә бар, тик уларҙың һаны күп түгел. Башҡортостанда ла ҡара урманлы урындарҙа ғына осратырға була. Ояһын һыу яткылыктарына яҡыныраҡ ҡорорға ла мөмкин.

Көндөҙ һунар итә, кешенән ҡурҡа ла, шуға ла үҙен бик һаҡ тота. Балыҡ, ҡош, йәнлектәр, шулай уҡ емтек менән туҡлана. Йыртҡыс булараҡ, һауала ла, ерҙә лә һөжүм итә.

5-6 йәшлек ҡоштар парланып оя ҡора, парын бер тапҡыр ғына һайлай, улар хатта ҡышлауҙа ла бергә була. 3-5 йомортҡа һала, бәпкәләрҙе ата ҡош менән инә ҡош сиратлап баҫып сығара. Август баштарына йәш ҡоштар оянан осоп сығып китә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ҒАИЛӘ ТАТЫУЛЫҒЫ ХАҠЫНА...



## бер аҙ ғына алдашыу ҙа рөхсәт ителә

**Гәзитебеҙҙә әленән-әле алдаҡсылар хаҡында мәҡәләләр сыҡҡылап тора. Уларҙа, башлыса, заман афәтенә әйләнгән мутлашыусылар тураһында һүҙ алып барыла. 19-сы һандағы "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында әңгәмәләшеүсе Фәрит Рәмов әйтмешләй, алдашыусы менән мутлашыусыны айырып ҡарау дөрөҫөрәк булыр, шулай ҙа. Мутлашыусылар - енәйәтселәр. Башҡаларҙы алдап, шуның менән "кәсеп итеп" көн күреүселәр хөкүмәт ҡаҙнаһын йә айырым кешеләрҙе миллионлап һумдарға "алдаштырыуҙан" да тартынмай. Ундайҙарҙы оялтырлыҡ һүҙҙәр эҙләп маташыуҙан бер ниндәй ҙә файҙа юҡтыр. Күптәр фекеренсә, был әшәкеләрҙән фәҡәт ҡасып ҡотолорға йә иһә, уларҙы хоҡуҡ һаҡлау органдарына тотторорға ғына кәрәк.**

Атайым мәрхүмдең "Алдамағыҙ, урламағыҙ, эсмәгеҙ, тартмағыҙ, үҙ-ара татыу йәшәгеҙ", тигән һүҙҙәре әле булһа ҡолағымда сыңлай. Бына шул нәсихәттәрен ул беҙгә ғүмеренең ахырына тиклем әйтте. Ул вафат булғанда, барыбыҙ ҙа инде үҫеп етеп, үҙаллы тормош ҡороп йәшәп ятҡан булыуыбыҙға ла ҡарамаҫтан, үҙемдең балаларымды ла шулай тип тәрбиәләргә тырыштым. Атайымдың өгөт-нәсихәттәре араһынан алдашыуҙы тыйыуы хаҡында йыш уйланам. Бәғзе берәүҙәр "Яҡшы ниәт менән алдаштырыуҙың бер ниндәй ҙә насар нәмәһе юҡ", тиҙәр. Икенселәр "Хәйләһеҙ донъя - файҙаһыҙ", тип тә әйтеп ебәрә. Ҡайһы бер фәйләсуфтар һәр әҙәм балаһының үҙе лә һиҙмәҫтән көнөнә тиҫтәләгән, хатта йөҙәрләгән мәртәбә ереле-ваҡлы алдаunion хаҡында яҙа...

Беҙ, мосолман кешеләре, бына ошо һорауға динебеҙ ҡануңдарынан сығып яуап эҙләп тапһаҡ, дөрөҫ юлда булырбыҙ, иншаллаһ. Ислам дине алдауҙы рөхсәт итәме? Әҙәм балаһы ниндәйҙер кимәлдә ялҡауыраҡ йә ҡурҡағыраҡ, ҡыйыуһыҙыраҡ, йә иһә, киреһенсә, дыуамал, ҡыҙыуыраҡ булыуы ла мөмкин. Башҡа һәр төрлө етешһеҙлектәрҙән дә буш була алмай кеше. Әммә бына алдашыу мәсьәләһенә килгәндә, Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с. уны тыйған. Тормошта була торған тик өс осраҡ өсөн генә алдашыуҙы рөхсәт иткән. Беренсе осраҡ - асыуланышып йөрөгән ир менән ҡатынды, йә иһә башҡа ике кешене яраштырыу маҡсатында кемдеңдер бер аҙ алдап ебәреүе тыйылмай. Иң яҡшы ниәт менән атҡарған быңдай алдашыу хәләл икәнен белергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, ике күрше ҡасандыр, ниндәйҙер сәбәп менән асыуланышып, ыҙғышып киткән дә, ошоғаса бер-беренә һүҙ ҡушмай, хатта иҫәнләшмәй ҙә йөрөйҙәр икән, ти. Ә өсөнсө ауылдашы быларҙың икеһе менән дә яҡшы мөнәсәбәттә, һәм уларҙың икеһен дә бер үк кимәлдә яҡын күрә. Ул бәхәстә булған күршеләрҙе йәлләй, улар өсөн борсола. Нисек итеп дуҫтарын яраштырырға берәй эсул эҙләй торғас, уның башына бер уй килә һәм ул, яйын тура килтереп, уларҙың береһенә яҡынса былай тип мөрәжәғәт итә: "Мөхтәр ҡорҙаш, яныраҡ Хәсән күршең менән һөйләшеп ултырғайның, һинең менән ни сәбәптәндер бәхәскә ингәнеңә шундай нык үкенә, унайһыҙлана. Үҙендә ғәйеп тоя буғай, шуға уның исеменән һинән ғәфү үтенеүемде һораны. Яҡшы яҡтарыңды ла иҫкә алды..."

Бына шулай, Хәсән күршеһе менән бәхәстә булған Мөхтәрҙең "һалпы яғына һалам ҡыҫтырып", уға уйланыуға "аҙыҡ" бирә. Оҙаҡҡа һуҙмай, Хәсәнгә лә барып, тап шундайыраҡ һүҙҙәр әйтә, "алдаштырып-һолдаштырып", уның йөрәгенә лә бер аҙ "орлоҡ" сәсеп китә. Башҡаса һис бер кемгә был хаҡта өндәшмәй генә үҙенең "боҙоҡлоғоноң" нәтижәһен көтә башлай. Хәсән, ысынлап та, бер көн иртән көтөү ҡыуғанда Мөхтәргә сәләм бирөп үтә. Ә инде иртәгеһен Мөхтәр күрше тегеһенә алдараҡ сәләмләп, уның хәл-әхүәлен дә һорашып ала. Күпмелер ваҡыт быждандары ғазапланып көн күргән был ике күрше бынан ары, күңелдәре бушанып, тыштан әйтешмәһәләр ҙә, эстән генә берҙереһен ғәфү итә, аралаша ла башлайҙар... Айырылышҡан ир менән ҡатынды ла шундай уҡ асул менән яраштырыу мөмкин. Ике кешенең татыулашыуына булышлыҡ итеү бик сауаплы ғәмәл.

Алдау рөхсәт ителгән икенсе осраҡ - үҙеңдең хәләл ефетеңә бәғзе мәлдәрҙә ысынбарлыҡҡа әллә ни тап килеп етеңкерәмәгән яҡшы һүҙҙәр, урыҫса әйткәндә, комплименттар әйтеү. Быға, әлбиттә, бер ниндәй миҫал килтермәгәндә лә була. Быны беҙ (айырыуса ир-аттар) һәр кемебеҙ ифрат та яҡшы беләбеҙ. Кәрәк мәлендә кәләшенә: "Был донъяла һинән дә матурыраҡ ҡатын юҡтыр, Гәзизә, йәнем" - тигән ирҙең һүҙҙәре тик был ғаилә файҙаһына ғына. Шулай уҡ Гәзизәҡәйе лә ҡураныс ҡына иренә: "Русланым, һин ысынбарлыҡта торғаның менән арыҫлан да баһа...", йә булмаһа, "Һин бит - аҡыл эйәһе..." тип әйтһә лә һис зарар юҡ. Бер-береңде шулай "майлаштырып алыу" ысулы, әлбиттә, ир менән ҡатындың үҙ-ара татыу йәшәүенә этәргес булып тора. Икенсе миҫал: әйтәйек, әлегә тәмле итеп бешерергә өйрәнеп етмәгән йәш кәләш, ире эштән ҡайтыуға, тырыша-тырыша киске аш әҙерләп ҡуйған. Әммә тоҙо артыҡ күп булғангамы, ир кеше уны йүнләп ашай алмай. "Нишләптер бөгөн ашҡаҙаным ауыртып тора әле", - тип кенә хәйләләй, әммә "Аш тәмһеҙерәк булған" тип, кәләшенең күңелен ҡыймай...

Ошондай риүәйәт бар. Бер кеше Аллаһ илсеһенә һорау биргән: "Мин ҡатыныма алдашһам, был яраймы?" Бәйғәмбәр с.ғ.с. уға: "Аллаһ Тәғәлә алдашыуҙы яратмай", - тип яуаплаған. Әлеге кеше: "Мин бит ҡатыным менән мөнәсәбәтебеҙ боҙолмаһын өсөн генә алдаштырҙым...", - тип әйтҡәс, Бәйғәмбәр: "Улайһа, һиндә гонаһ юҡ", - тигән...

Аллаһ илсеһе с.ғ.с. яу ҡырында дошмандарҙы алдауҙы ла, әлбиттә, рөхсәт иткән. Үлән йә ҡар төҫендәге маскировкалы хәрби кейемдән алып, һәр төрлө хәйлә ярҙамында атҡарылған маневрҙар, дошман ишетһен өсөн ебәрелгән дезинформация (әрме ләғәтендә "утка" тип атала) кеүек һанһыҙ ысулдарҙы һанап китеүҙең кәрәге лә юҡтыр. Был хаҡта хәрби хеҙмәттә булған, хатта булмаған кешеләр ҙә бик яҡшы белә.

Бына ошоларҙан башҡа осраҡтарҙа һәр төрлө алдау - хәрәм. Хатта бала кешене "Кил, балам, кәнфит бирәм", тип янына саҡырһаң, уға вәғәҙә ителгән кәнфитте мотлаҡ бирергә бурыслыһың. Сабыйҙы алдау ярамағанлығы хаҡында ла хәҙис бар.

Тормош тигән нәмә ифрат та ҡатмарлы шул, төрлө мәлдәр була. Һәр кем һәр аныҡ осраҡта килеп тыуған мәсьәләне үҙенсә сисә... Ҡайһы берҙә ни тиклем дөрөҫ булһа ла кемгәлер ниндәйҙер мәғлүмәтте еткереү ярамай, ти. Әммә шул хаҡта үҙеңә бирелгән һорауҙы яуапһыҙ ҡалдырыу еңел түгел, хатта килешмәй ҙә. Шуға күрә, ошондай осраҡта һорау биреүсене алдамаҫ өсөн берәй "нейтраль" (шылдырма) яуап табыу (урыҫта "отговорка" тип тә әйтәләр) хәйерле. Өйөнә үҙен һорашып килгән кеше менән күрешергә теләмәгән бер сәхәбә ҡатынын былай тип иҫкәртеп ҡуя торған булған: "Әгәр Фәлән кеше мине һорап килһә, "мәсет тирәһенән эҙләп ҡара", тип кенә әйт, тик "өйҙә юҡ ул" тип әйтмә, сөнки улай тиеү - алдашыу була..." Элегерәк ауылыбыҙҙа бер ағайҙың ошондай осраҡҡа ҡағылышлы, һүҙҙәрен мәҙәк итеп һөйләйҙәр ине. "Күпме зарплата алдың, атаһы?" тип һораған ҡатынына йыш ҡына: "Мин уны дауны алдым", - тип кенә яуап бирә торған булған был ғаилә башлығы...

Әле килтергән миҫалдар көнкүреш мәсьәләләренә ҡағылышлы. Ә инде Аллаһ Тәғәлә хаҡында, Уның китабы, фәрештәләре, бәйғәмбәрҙәре тураһында алдашыу айырыуса хәүефле. Үҙеңдең шәхси фекереңә генә таянып, динебеҙ өлкәһендә һүҙ алып барыу, Ҡөрьәндә лә, Бәйғәмбәр хәҙистәрендә лә булмаған нәмәләр уйлап сығарып һөйләү - бик ҡурҡыныс ялған һәм оло гонаһ! "Бәйғәмбәр шулай, йә былай тип әйткән", тигән мәғлүмәттәрҙе сахих хәҙистәр йыйынтығынан үҙең уҡып, йә уҡымышлы имамдарҙан ишетеп кенә бәйән итеү мөмкин. "Минең хаҡта ялған һөйләгән кешенең гонаһы башҡа кеше хаҡында һөйләгән ише генә түгел. Ундай кеше Ахирәттә Утта (тамуҡ утының уңында тотола) буласаҡ", тип иҫкәрткән рәсүлуллаһ.

Күңелгә килгән уй өсөн генә кеше яуаплы түгел, сөнки әҙәм башына ниндәй генә уйҙар килмәүе мөмкин. Әлбиттә, уйыбыҙға ла баш булырға тырышырға тейешбеҙ. Ниндәйҙер берәй шундайыраҡ анекдот, йә иһә ғәйбәт булырҙай хәбәр ҡасандыр ишеткән булһаң да, иҫеңә төшөү менән "әғүҙубилләһи мин-әшшәйтән-ирраҗиим" (таш менән ҡыуылған шайтандан Аллаһҡа һыйынам) тип, уны онотоу яйын ҡарау кәрәк. Һүҙең өсөн ҡасандыр мотлаҡ яуап бирергә һәм уның яҙаһын алырға тура киләсәк. Бына нимә өсөн алдау - бик насар нәмә. Ялған шаһитлыҡ ҡылыуҙың да Аллаһ Тәғәләгә тиңдәш биреү һәм ата-әсәне ҡәҙер итмәү һымаҡ иң оло гонаһтарҙан һаналғанлығы хаҡында Бәйғәмбәр с.ғ.с. әйткән хәҙис бар.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**Рәсәйҙең боронғо акттары дәүләт архивында Билдәһеҙ автор тарафынан 1852-1855 йылдарҙа яҙылып, "Башҡорт-мишәр ғәскәрен тарихи һәм статистик яҡтан байҡау" тип аталған документ табылғайны. Ошо тарихи документ өлөшләтә "Башҡортостан архивтары" ғилми-документаль журналында 2007 йылда рус телендә баҫылып сыҡҡайны. Бынан 150 йылдан ашыу элегерәк барлыҡҡа килгән был яҙмала авторҙың башҡорт тарихына ҡағылышлы үҙенсәлекле генә ҡараштары сағылыш тапҡан. Күрәһең, яҙма авторы башҡорт халҡының боронғо тарихы буйынса мәғлүмәтле тарихсы-ғалим булғандыр. Ошо документта башҡорттарҙың Урал төбәгендә йәшәүсе иң боронғо халыҡтарҙың береһе булыуы тураһындағы фекер айырыуса иғтибарҙы йәлеп итеп тора: билдәһеҙ ғалимдың фекеренсә, башҡорттарҙың борон-борондан Урал буйҙарын төйәк иткән тәү ҡәбиләнең туранан-тура варисҭары булыуы бәхәс тыуҙырмай. Бик боронғо дәүерҙәрҙә Урал ерлегендә төрки, фин, монгол ҡәбиләләре лә барлыҡҡа килеүенә ҡарамаҫтан, бары тик башҡорттар ғына үҙенең тәү Ватанында мәңгелеккә тороп ҡалған… Был документты башҡорттарҙың килеп сығышының һәм тарихының күскенселек концепцияһына тәнҡит күҙлегенән ҡарау өсөн тағы ла бер дәлил рәүешендә күрһәтергә була. Өфө ҡәлғәһенә 1586 йылда ҡала статусы бирелеү факты ошо яҙма авторы тарафынан уны нигеҙләү датаһы итеп күрһәтелеүгә сәбәп булғанлығына иғтибар итергә кәрәк. Ошо яҙмалағы тарихи мәғлүмәт уҡыусыларыбыҙҙа ла ҡыҙыҡһыныу уятыр,тип уйлайбыҙ.**

# УРАЛ - БАШҠОРТТОҢ ТӘҮ ВАТАНЫ,

## йәки Билдәһеҙ ғалимдың яҙмаһы ниҙәр һөйләй?



"Тарихи өлөш. Башҡорттар тураһында боронғо мәғлүмәттәр. Хәҙер Ырымбур крайында көн иткән төрлө ҡәүемдәр араһында башҡорттар үҙҙәре билгән ерҙәрҙә борон-борондан йәшәгән берҙән-бер халыҡ булып тора. Уларҙың Волга арьяғында йәшәүе тураһындағы мәғлүмәт Христос тыуғандан һуң X быуат башында уҡ билдәле булһа, бында осраған башҡа ҡәүемдәрҙең барыһы ла тарихи ҡомарткыларҙа XVI быуат урталарынан, Грозныйҙың Ҡазанға яһаған походтарынан да иртәрәк иҫкә алынмай.

X быуат башҡорттары тураһында Хиванан (Джорджак) Волга булғарҙары батшаһына барышлай уларҙың ерҙәре аша үтеп сыҡҡан Моктадир хәлиф илсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан аша хәбәрҙарбыҙ. Ул ошо халыҡтың атамаһы Башгурд булыуын билдәләй һәм, башҡорттарҙы төрки ҡәүемдәр иҫәбенә индереп, уларҙың иң көслөһө һәм уҫалы булыуы тураһында яҙа. Артабан ул, башҡорттарҙың мәжүси диндәре тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреп, уларҙың ҡайһы берҙәренең мосолман булыуын да иҫкә ала... Ибн Фаҙландан һуң башҡорттар һәм Башҡортостан XIII быуатта Көнбайыш Европанан Урта Азияға бөйөк монгол хандарына папа илселәре сифатында килеп йөрөгән католик миссионерҙар яҙмаларында телгә алына. Уларҙың береһе, Плано Карпини, Половецтар (Ҡыпсаҡ) ере тураһында бәйән итеп, уның төньяҡтан "башҡорттар иле, венгрҙарҙың ватаны менән" сиктәш булыуы тураһында әйтә. Икенсеһе, Руисбрек (Рубрук. - **Ред.**), Башҡортостандың Волга менән Урал араһында, Волга булғарҙары еренә күрше булыуын иҫкә ала. Шулай уҡ ул Паскатир кешеләре "венгр телендә һөйләшә", тип билдәләй.

Иң яңы тикшеренеүҙәр буйынса халыҡтың килеп сығышы, башҡорттарҙың венгрҙар менән оҡшашлығы тураһында иҫкә алынған миссионерҙар тарафынан әйтелгәндәр хәҙер ошо хаҡтағы күп тикшеренеүҙәрҙән һуң аҙ ғына булһа ла шик тыуҙырмай. Былары ла, тегеләре лә бер үк боронғо Урал ҡәбиләһенән килеп сыҡҡан. Хәҙерге заман этнографтары аңлатыуынса, был ҡәбилә тәү тормош дәүере ҡәбиләһе булып, бик боронғо замандарҙа уның нигеҙендә фин, монгол һәм төрки ҡәбиләләре, ә унан да һуңыраҡ бөтә хәҙерге фин-татар халыҡтары тип аталып йөрөлгәндәре барлыҡҡа килгән. Ул Урал ҡәбиләһе тип аталған, сөнки Урал тауҙары уның тәү төйәге итеп һаналған... Ҡәбиләнең үҙ Ватаны булған тауҙарҙа, Көньяҡ Урал һырттарында тороп ҡалған өлөшө иң кәмендә X быуаттан алып хәҙерге ваҡытҡа тиклем башҡорттар тип аталып йөрөүсе халыҡты барлыҡҡа килтергән...

Башҡортостанда рус хакимлығының тәүге осоро. Яңы подданныйҙарға еңел яһаҡ һалынып, уны индереү һәм бер үк ваҡытта Башҡортостан сиктәрендә рус власын нығытыу, унын халҡын нуғай баҫҡынсыларынан ҡурсалау маҡсатында 1586 йылда Өфө йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған урында шулай уҡ Өфө тип аталған ҡала төҙөлә. Рәсәйҙән күсерелеп килтерелгән дворяндар һәм хеҙмәтсе кешеләр йәшәгән был ҡала, уны уратып ятҡан бөтә ил кеүек үк, махсус воевода идаралығына тапшырыла. Башҡортостан дүрт "юлға" ("дороги") бүленә: Өфөнән Ҡазанға табан ятҡан өлөшө - Ҡазан юлы, Оса (Камала) ҡала яны йүнәлешендәгеһе - Оса юлы; Себер тарафына ҡарағаны - Себер юлы, ә көньяҡ далалары йүнәлешендәгеһе - Нуғай юлы, тип атала. Был буленеш Ырымбур губернаһы ойошторолғанға тиклем һаҡлана. Һуңынын башҡорт ерендә аҡрынлап бүтән ҡалалар ҙа төҙөлә башлай: Бөрө, Минзәлә һ.б...

Башҡортостанда төҙөлгән ҡалаларҙан, дворяндарға һәм хеҙмәт итеүсе кешеләргә бирелгән ерҙәрҙән башҡа урындарҙа башҡорттарға үҙҙәренең боронғо ғөрөф-ғәҙәттәренә ярашлы старшиналары тарафынан идара ителеү мөмкинлеге бирелеп, беҙҙең хөкүмәтебеҙ уларҙың эске идаралығына бер нисек тә ҡыҫылманы, ә уларҙың башҡа ерҙәрен һатып йәки ниндәй ҙә булһа бүтән төрлө юл менән милеккә алыу ғына түгел, ә оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға алыу ҙа тыйылды.

Уларҙың "тархан" исеме алғандары яһаҡ түләүҙән азат ителеп, үҙ торлаҡтарына яҡын ерҙәрҙә генә түгел, ә батша ихтыяры ҡайҙа теләй, шунда хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Яһаҡ юҡҡа тиң булғас, тарханлыҡ күрәләтә ауыр йөк рәүешендә ҡабул ителергә тейеш булыуына ҡарамаҫтан, был башҡорттарҙың яугирлығына тап-таман тура килгән хәл булды; тарханлыҡ хөрмәт билдәһе итеп ҡаралды, һәм башҡорттар һәр ваҡыт беренсе саҡырыу менән үк меңәрләп килеп, үҙҙәрен поляктарға һәм шведтарға, йәки төрөктәргә һәм ҡырымлыларға ҡаршы хеҙмәткә ебәреүҙе талап итте..."

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

Пилица, Варта һәм Одер йылғаларын кискәндә, Томашув-Мазовецки ҡалаһын азат иткәндә беҙҙең яугирҙарыбыҙ массовый батырлыҡ өлгөләре күрһәтә, командование уларға юғары баһа бирә, ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләй. Алыш ҡорбанһыҙ булмай, яу ҡырҙарында байтаҡ атлылар яралана һәм һәләк була. 7-се гв. атлы корпусы командованиеһының 23 февралдәге бойороғо менән I дәрәжә Ватан һуғышы ордена лайыҡ булалар: 62-се гв. атлы полкының 3-сө ҡылыссылар эскадронының отделение командиры, гв. өлк. сержанты Горошанский Александр Тимофеевич, ул. Янни ауылы янында, Одер йылғаһының ун яҡ ярында батырҙарса алыша. Взвод командиры һәләк булғас, Горошанский взвод менән үҙе командалыҡ итә. Немецтарҙың утыҙлап һалдаты сафтан сығарыла. 60-сы гв. атлы полкының разведка взводы командиры ярҙамсыһы, гв.өлк. сержанты Егигиян Владимир Арнольдович Одер йылғаһының уң яҡ ярына разведкаға барып, "тел" алып ҡайта. Дошман һалдаты ҡиммәтле мәғлүмәт бирә. Кире ҡайтҡанда батыр разведчик үлемесле яралана.

58-се гв. атлы полкының разведчиктар взводы командиры, гв. кесе лейтенанты Игнатенко Петр Трофимович, Висла йылғаһы аша сығып, дошман траншеяһына ташлана һәм иптәштәре менән 6 немец һалдатын юҡ итә, берәүһен әсиргә ала. Ҡыҙғаныска күрә, ошо алышта Игнатенко үҙе лә һәләк була; 62-се гв. атлы полкынан разведчик, гв. ефрейторы Котков Федор Иосифович элегерәк "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланған (Молдова ССР-ынан). Висла йылғаһы аша сығып, дошман позицияһына ташлана, "тел" ала, әммә разведканан ҡайтҡанда һәләк була. 58-се гв. атлы полкының разведка взводынан гв. старшинаһы Косачев Александр Хрисанфович (Томск өлкәһенән) дошман дзотын гранаталар менән шартлата, "тел" ала, кире ҡайтҡанда үлемесле яралана. II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнеүселәр: 62-се гв. атлы полкының 3-сө эскадроны яугиры, станковый пулемет тоҫкаусыһы, гв. ефрейторы Вишницкий Гавриил Изотович, (Ҡаҙаҡ ССР-ы, Павлодар өләһенән.) 1945 йылдың 30 ғинуарында Одер йылғаһының уң яҡ ярындағы алышта Янни ауылы янында дошман контратакаһын кире ҡаға. Ул немецтарҙың биш тиҫтәгә яҡын һалдатын сафтан сығара; 62-се гв. атлы полкының 2-се эскадроны командиры, гв. лейтенанты Колбасюк Андрей Иванович (Киев өлкәһе Маньков районынан) Томашув-Мазовецки ҡалаһы һәм станцияһы өсөн барған алышта уның взводы 20-ләп немец һалдатын һәм офицерын сафтан сығара; 62-се гв. атлы полкының пулемет взводы командиры, гв. лейтенанты Ишембаев Сибәғәт Ниғмәт улы (Мәләүез районының Ерғән ауылынан) Томашув-Мазовецки ҡалаһына һөжүм иткәндә үҙенең взводынан алғараҡ сығып, пулеметынан дошмандың 7 һалдатын сафтан сығара, взвод алға табан барыуын дауам итә; 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадроны командиры, гв. капитаны Колесников Петр Михайлович, элегерәк Ҡыҙыл Байраҡ һәм һәм I дәрәжә Ватан һуғышы ордендары менән бүләкләнгән. Уның эскадроны 1945 йылдың 18 ғинуарында Пилица йылғаһы аша сыға һәм Томашув тимер юл станцияһын ала, дошмандың көслө терәк пунктын юҡ итә. Томашув ҡалаһын һәм тимер юл станцияһын алғанда Колесниковтың эскадроны дошмандың 80 һалдат һәм офицерын сафтан сығара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

ЯҘЫУСЫ МИНЕҢ ҺӨНӘРЕМ...

# ТӘБИҒӘТТӘН БИРЕЛГӘН БУЛӘК

**Бөгөнгө көндә яҙышыусылар һәм шиғырсылар күбәйеп китте. Уларҙы һис кенә лә ғәйепләргә, кәмһетергә теләмәйем, йыйынмайым да, улар бит шул ҡылыҡтары менән нәфис һүҙгә ынтыла, көнделәрендәге тойғоларҙы, кисерештәрҙе аҡ ҡағыҙға төшөрә. Нәфислеккә, юғарылыҡҡа ынтылыу әлеге сыуалыштар мәлендә, бола осорҙа минең өсөн үтә лә ҡәҙерле һәм мөһим. Яҙһындар әйҙә, яҙышһындар, һәр кеше лә яҙыусы йә шағир булып китмәй бит, моңһоҙ ғына итеп мәжлестә йырлашҡандар ҙа сәхнәгә менеп баҫмай.**

Яҙышыусылар, тигәндәй, әсәйем парта артында ултырмаһа ла, минең менән ҡуша уҡып, дәрестәремде әҙерләшеп белем алды. Латинсанан башҡортса яҙырға өйрәнде, һуңынан рәхәтләнеп барлыҡ гәзит-журналдарҙы уҡып, минә, партия ойошмаһы секретарына, ярҙам йөҙөнән партия съездарындағы һөйләнгән докладтарҙың кәрәкле ерҙәренең аҫтына һыҙып сыға торғайны. Әсәйем ҡағыҙға яҙмаһа ла, таҡмаҡ сығарып, шиғри юлдар менән яуап бирергә хирес булды. Һәр яҙғанымды минә күрһәтмәй генә уҡып барып, ижадыма тәнҡит күҙлегенән ҡарап, үҙенсә баһа ла бирә торғайны. Оҡшамаһа, ят йоҡларға, нимә ултыраһың юҡ-бар яҙып, ти, күнелнә ятһа, балам, артыҡлап ултырма, иртәгә бит һинә таңдан эшкә, ти. Апайым да яҙышты, яҙғанын һис кемгә күрһәтмәне, шул иҫәптән минә лә. Туйҙар, тыуған көндәр булһа, дуҫ-иштәренә һә тигәнсе шиғыр, йә таҡмаҡ әтмәләп бирер ине. Үҙенән һуң шиғри йыйынтыҡ та ҡалдырған, тик билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында ул минең ҡулыма килеп эләкмәне.

Быларҙы ни өсөн яҙаммы? Яҙыусы булып китеүемдә яҡындарымдың да өлөшө булған, баҡтиһәң, мин әҙәби мөхиттә, нәфис һүҙ уратаһында үҫкәнмен. Юҡтан бар булмай, тиҙәр бит, бәлки, шулайҙыр ҙа.

Яҙышыусылар күбәйеп китте, тип башланым һүҙемде, әммә күптәр кеҫәләрендә яҙыусы танытмаһын йөрөтөп тә иждадтан ситләштеләр, йылдар буйы яҙғандары гәзит-журнал биттәрендә күренмәй, әммә багаждары юҡ кимәләндә булһа ла мәртәбәле ҡунаҡтар йыйып, ижад кисәләрен үткәрергә, исемен хәтергә төшөрөп шаулатырға онотмайҙар. Тағы ла ғәйепләп әйтмәйем, яҙышмайҙар икән, тимәк, яҙмыштары ижадсы түгел, тимәк, ят ҡорға яңылыш килеп эләккәндәр...

Кем һуң ул яҙыусы? Бер көн түгел, бер сәғәт тә яҙышмайынса йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәгән, яҙғандары менән уҡыусыһын матурлыҡҡа илһамландырған, юғарылыҡҡа саҡырған һүҙ оҫтаһы ул яҙыусы! Тағы ул үҙенән аҙаҡ нур, яҡтылыҡ, сафлыҡ, иман ҡалдырған кеше. Ә ундайҙар күп түгел, ул бик һирәктәргә тәбиғәттән бирелгән бүләк һәм һәләт!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

ҒАЛИМҒА ӨС ҺОРАУ

**Билдәле ғалим, юрист, тарихсы-этнограф, философия фәндәре кандидаты Зәкирйән ӘМИНЕВты беҙ хаҡлы рәүештә "китап ене ҡағылған"дар исемлегенә индерә алабыҙ. Ҡайҙа ғына йөрөһә лә, уның ҡулында ҙур сумкаһы, уның эсендә яңы ғына һатып алған, типография еҫтәре аңҡып торған китаптар ята булыр. Шул да мәғлүм булһын, пенсия йәшенә еткәнсе хоҡуҡ һаҡлау органдарында тәфтишсе, прокурор булып хеҙмәт иткән Закирйән Әминев отставкаға сыҡҡас, көтөлмәгән йүнәлеш, тарих, этнография менән шөғөлләнеп, халҡыбыҙҙың мифологияһы буйынса сенсацияға торошло асыштар яһаны. Быларҙың барыһы менән Зәкирйән Әминев бала сағынан башлап туплаған китаптарына бурыслы. Хәйер, был хаҡта ғалимдың үҙенә биргән һорауҙарға яуаптарында.**

# КИТАПТАР МИНЕ КЕШЕ ИТТЕ...



**Зәкирйән ағай, һинең фатирыңа барып ингәндә иң тәүҙә күҙгә салынғаны китап. Ҡайҙа ҡарама - китап. Һин уларҙы билдәле бер система буйынса туплайһыңмы, барыһын да уҡып өлгөрәһеңме?**

- Мин алты йәшемдә уҡырға өйрәндем. Күршелә йәшәгән Алһыу апай мәктәпкә барып уҡырға-яҙырға өйрәнгән дә, беҙҙең тирәлә йәшәгән балаларҙы йыйып алып, күмәкләп уҡытыусы һәм уҡыусы булып уйнайбыҙ, апайҙың ҡустыһы Азат мәрхүм менән беҙ ул "мәктәп уҡыусылары". Уҡыуыбыҙ уйын һымаҡ булһа ла, уҡырға, яҙырға өйрәнеүебеҙ ысын ине.

Тәүге ҡулыма алған китабымдың тышында арбаға егелгән мөгөҙлө аттар һүрәте төшөрөлгәйне, йөкмәткеһе Египеттың иң боронғо тарихы. Китап урыҫ телендә, аңламаһам да уҡырға тотондом. Ҡыҫҡаһы, беренсе класҡа килгәндә уҡый белә инем инде.

Китап йыйырға етенсе класта башланым. Әсәйем мәктәптең буфетында ашарға аҡса бирә торғайны. Мин ул аҡсаны тотонмайым, өйҙән өҫтөнә май һылап шәкәр һибеп алып килгән икмәк, бер тингә шәкәрһеҙ сәй менән генә мөрхәтһенәм. Шулай итеп, тинлектәрем һумдарға әйләнгәс, китап магазинынан күнелемә оҡшаған китапты һатып алам. Беҙҙең мәктәптә етенсе класта Йәмилә тигән апай уҡығайны. Ул ҡайҙандыр алып килеп, мәктәптә балалар китаптары һата торғайны. Яңы китаптар булһа, иң тәүҙә минә йүгереп килә. Мин барлыҡ китаптарын ҡарап сығып, үҙемә кәрәген һатып алам. Унынсыны тамамлауға апаруҡ ҡына әҙәби баҫмаларҙан торған китапханам тупланғайны. Китаптар башҡорт, урыҫ, татар телдәрендә.

Әрмегә барғас, аҙна-ун көн хеҙмәт иткәс тә, китапханаға яҙылдым. Ике йыл буйына ундағы китаптарҙың ҙур өлөшөн уҡып сыҡтым. Минең бәхеткә, китапханасы Нуриман районында тыуып үҫкән башҡорт апайы ине. Ире офицер. Апай мине: "Төпкә үтеп ултыр, офицерҙар күреп ҡалмаһын", - тип китапхананың эсенә индерә торғайны.

Әрменән һуң университетта уҡығанда инде системалы рәүештә тематика буйынса махсус китаптар туплай башланым. Минең китап туплауҙың төп принцибы: уларҙа теге йәки был кимәлдә башҡорт тарихы сағылыш табырға тейеш. Был темаға арналған китаптар бар, әммә артыҡ күп түгел. Шул йүнәлештә тарихи-этнографик китаптар йыя башланым. Ғафури урамында китап магазины булды. Ундағы букинист бүлегендә "Башҡорт халыҡ ижады"ның ике томы бар ине. Шуларҙы ҡулға төшөрҙөм. Ул саҡта томлыҡтар яңы сыға башлағайны. Йылап ҡына "Башҡорт халыҡ ижады"ның 18 томын да йыйып бөттөм.

Атайым ул ваҡытта эше буйынса йыш ҡына Өфөгә килә торғайны. Ул килеүгә китаптарҙы туплайым да, Баймаҡҡа ҡайтарып ебәрәм. Сөнки ятаҡта китаптарҙы һаҡлау мөмкин түгел. Кемдер ала ла, кире алып килмәй, китап юғала. Атайым мәрхүм үҙе лә китап яратты, күп уҡый торғайны.

Аҙаҡ, эшләй башлағас, эш хаҡым китап һатып алырға ҙур мөмкинлек бирҙе. СССР заманында аҙнаһына бер тапҡыр "Книжное обозрение" тигән гәзит сыға торғайны. Шуны яҙҙырҙым да, илебеҙҙә сыҡҡан барлыҡ китаптар хаҡында мәғлүмәт алып, үҙем кәрәкле тип һанаған китаптарға заказ биреп, китап туплауымды яңы кимәлгә күтәрҙем.

Шулай итеп, йыйылған китаптарым фатирымды боролоп сыҡҡыһыҙ итте. Бер саҡ венгр авторының "Комедия книги" тигән китабын уҡығайным. Унда ҡатыны сығып китеп, яңғыҙ йәшәгән профессорҙың тормошо һүрәтләнә. Ул да минең һымаҡ фатирын китаптар менән тултырған да, йомран кеүек йәреп ятҡан. Тәҙрә төптәренә лә китаптар өйөп ҡуйған, фатирына хатта ҡояш нуры ла төшмәй башлаған. Оло йәштә була профессор. Бер мәл китаптары өйөлгән кәштә емерелеп төшөп, хужаны баҫып үлтерә. Ҡыҙым: "Атай, һин һағыраҡ бул, теге венгр профессоры кеүек булып ҡуйма", - тип көлә.

**Һәр кеше үҙ ғүмерендә 3 мең самаһы китап уҡый ала икән. Шул уҡ ваҡытта ул шунсама китап уҡып та, үҙенә иң кәрәкле китапты уҡымауы бар. Һин үҙеңә кәрәкле китап менән кәрәкле булмағанын нисек айыраһың? Китаптың кәрәклеме-юҡмы икәнен белер өсөн уны кәмендә уҡып сығырға ла кәрәк бит әле...**

- Мин әрмелә шундай хәрби часта хеҙмәт иттем, унда беҙгә мәғлүмәтте хәтерҙә һаҡларға өйрәттеләр. Мин теге йәки был китапты асам да, уның һәр хәрефен уҡып тормайым. Дөрөҫөрәге, мин китапты уҡымайым, ә диагональ буйынса ҡарайым да, унда нимә хаҡында һүҙ барғанын шундуҡ төшөнәм. Минутына 5-6 битте ҡарап сығып, унда нимә хаҡында һүҙ барғанын тулыһынса аңлайым. Был һәләтем бигерәк тә университетта имтихан, зачет биргәндә нык ярҙам итте. 300 битлек китапты 5 сәғәт эсендә уҡый алдым. Имтихан, зачет биргәндә, күҙҙәремдә йомам да, китаптың һәр битен күҙ алдына баҫтырып, унда яҙылғанды иҫемә төшөрәм. Ҡайһы ваҡыт уҡытыусылар күҙемдә йомоп ултырыуымды күреп ҡалып: "Нимә, ҡыйын булып киттеме?" - тиҙәр. Мин уларға: "Юҡ, уҡығанымды иҫемә төшөрәм", - тиһәм, аптырайҙар ине.

Китап магазинына инһәм дә, иң тәүҙә китаптың исемен, авторын ҡарайым, шунан тәүге биттәрен асып күҙ йүгертәм дә, ул китапты алырғамы-юҡмы икәнен хәл итәм.

**"Иң күнелһеҙ китап та иң яҡшы китап булыуы бар..." тигән Пушкин. Һуңғы ваҡытта ниндәй китаптар һатып алдың, уларҙың араһында иң ҡәҙерлеләре ҡайһылары?**

- Мәскәүҙә мифология буйынса китаптар сығара башланылар. "Ирәмәл" сауҙа йорто янындағы "Планета" магазинында монгол, румын мифологиялары буйынса китаптар күреп ҡалдым. Үҙемдең ысул буйынса бер битен асып ҡараным да, шундуҡ һатып алдым. Кәрәкле бите асылды. Йәш саҡта шундай маҡсат ҡуйғайным: теге йәки был китапта бер генә һүҙ кәрәкле булһа ла ул китапты һатып алырға. "Волга буйы һәм Урал халыҡтары мифологияһы", "Себерҙең аҙ һанлы халыҡтары мифологияһы" ла китаптарым араһында үҙенең лайыҡлы урынын тапты.

Атайыма автоколоннала политинформация үткәрер өсөн "Маркс, Энгельс, Ленин, КПСС о развитии сельского хозяйства" тигән китап биргәндәр, шуны өйөбөҙгә алып ҡайтты. Мин ул саҡта туғыҙынсы класта уҡый инем. Китапты тегеләй ҙә әйләндереп ҡарайым, былай ҙа ҡарайым. Уйлайым, баҫып сығарғастары кәрәк китап бит инде. Уҡый башланым. Документтарында ҡыҙыҡ тапманым. Иң ҡыҙыҡы комментарийҙарында икән. Уларҙы уҡығас, төп текстарҙы ла уҡығы килде. Шулай итеп, ул китапты уҡып бөттөм. Шунан үҙемә шундай һығымта яһаным: күнелһеҙ китап булмайҙыр ул. Китап буштан тиккә яҙылмай. Шулай ҙа ҡайһы бер авторҙарҙың китаптары ауыр уҡыла.

Үҙемә ҡуйған принцип буйынса башҡорт әҙәби китаптарын барыһын да уҡып барырға тырышам. "Бер аҙым алға баҫам да, әйләнәм мин артыма", тигән Ғафури. Мин дә әҙәбиәтебеҙ алға китеп, артта тороп ҡалмайым, тип тырышам. Бер туҡтауһыҙ башҡорт халыҡ ижадын уҡыйым. Сөнки телебеҙҙең байлығы шунда бит.

Урыҫ әҙәбиәте дарья кеүек, уны уҡып та бөтөрөп булмай. Мәҫәлән, Юрий Поляковтың барлыҡ яҙғандарын уҡып барырға тырышам. Әле уның "По секрету" тигән китабын һатып алдым. Алексей Ивановтың, Борис Акунинның сыҡҡан китаптарын ҡарап барам. Захар Прилепинды ла уҡыйым, әммә ул "шығырҙай-шығырҙай тәгәрләгән тәгәрмәс кеүек" ауырыраҡ яҙа. Талха Ғиниәтуллинды совет осоро ваҡытынан алып уҡыйым, уны иң тәүҙә Анатолий Генатулин тип белдем. Астафьев, Проскурин, Бондарев, Распутин китаптарын да тулыһынса уҡып сыҡтым.

Йомғаҡлап шуны әйткем килә: мин үҙ ғүмеремдә нимәгәлер өлгәшкәнмен икән, бының өсөн иң тәүҙә китаптарға бурыслымын. Улар мине кеше итте.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

***✓ Тәүге йылдарҙа күберәк әсәй һәм балалар ғына сәхнәгә күтәрелә торғайны. Был юлы атайҙар ҙа ситтә ҡалмаған, ул һәм ҡыҙҙарына өлгө күрһәтеп, кемеһе баянда, кемеһе ҡурайҙа уйнарға оҫта, телмәрҙәре лә саф икән.***

АФАРИН!

# ТУҒАН ТЕЛМЕ?

## Ул мөғжизәләр иленә асҡыс!



**(Башы 1-се биттә).**

Был серҙе белгән һәм әһәмиәтен аңлаған, күңелдәрендә туған теленә, халҡына ҡарата һөйөү йөрөткән һәм киләсәген хәстәрләргә маҡсат иткән өлкәндәр һәм уларҙан өлгө алып үҫеп килгән бәләкәстәр Донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡортса һөйләүселәрҙең "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсында әүҙем ҡатнаша. Бына инде 15-се тапҡыр үткәрелгән конкурста бөтәһе 7430 бала мөғжизәле әкиәт иленә сәйәхәт иткән, шуларҙың 221-е - быйылғы ҡатнашыусылар.

Ғаилә йылына арналған "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсының йомғаҡлау тантанаһы яңыртып төҙөлгән Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры бинаһында уҙғарылды. Бында балаларҙы үҙҙәре яратҡан әкиәт геройҙары театр тупһаһынан уҡ ҡаршы алды, ә инде тамаша залында "Алиса мөғжизәләр илендә"нән Алиса, Ҡуян һәм Эшләпәсе сәләмләне. Быны кескәй тамашасылар бик ихлас ҡабул итте, артабан үҙҙәре үк сәхнәнән тиҫтерҙәренә тылсымлы, фәһемле һәм, иң мөһиме, туған телендә әкиәттәр һөйләп, күмәкләп сәхнәләштереп, байрамды йәнләндереп ебәрҙеләр. Тәүгеләрҙән булып Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһынан Азалия Көмөшбаева "Күк һыйыр" тигән башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләп ишеттерҙе һәм яңғыҙ башҡарыусылар араһында 1-се урынға лайыҡ булды. "Мин өсөнсө класта уҡыйым, ә был конкурста балалар баҡсаһына йөрөгәндән алып ҡатнашам. Әкиәтте үҙем һайлайым, шунан аңламаған һүҙҙәрҙе өйрәнеп, ҡат-ҡат уҡып, ятлап алам. Был юлы "Күк һыйыр" тигән әкиәтте бик оҡшаттым. Конкурс башҡорт телен һаҡлау, белеү, онотмау өсөн кәрәк", - ти Азалия. Ҡыҙ өйҙә тик башҡортса һөйләшеүҙәре, рәсем түңәрәгенә йөрөүе һәм М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына "Амеля" спектаклендә уйнауы тураһында ла һөйләне.

Конкурс, ғәҙәттәгесә, балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре һәм мәктәп уҡыусылары араһында ойошторолдо. **"Әкиәтте ғаилә менән сәхнәләштереү" номинацияһында быйыл 63-сө балалар баҡсаһынан Алсыновтар ғаиләһе "Алтын балта" әкиәте менән, 82-се гимназиянан Хәсәновтар "Тылсымлы ҡурай" әкиәте менән сығыш яһап, Гран-приға лайыҡ булдылар.** Шулай уҡ был номинацияла I урын 308-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Ғүмәровтар менән Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһынан Алсыновтар, II урын "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Йыһангировтар һәм 117-се мәктәптән Йосоповтар, III урын 18-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Ғиззәтуллиндар һәм Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһынан Хәмитовтар ғаиләһенә бирелде.

Бергәләп сығыш яһаған ғаиләләргә һоҡланған арала шундай күренешкә лә иғтибар ителде: атайҙар ҙа әүҙемләшә бара, шөкөр. Юғиһә, тәүге йылдарҙа күберәк әсәй һәм балалар ғына сәхнәгә күтәрелә торғайны. Был юлы атайҙар ҙа ситтә ҡалмаған, тормош иптәштәренә терәк булып, ул һәм ҡыҙҙарына өлгө күрһәтеп, зауыҡлы башҡорт халыҡ кейемдәрендә килгәндәр, кемеһе баянда, кемеһе ҡурайҙа уйнарға оҫта, телмәрҙәре лә саф икән. Ғөмүмән, балаларыбыҙ ир-егет һәм атай кеше өлгөһөн үҙ тиҫтерҙәренең татыу, ижади ғаиләһенә ҡарап белә ала хәҙер.

**"Фольклор коллективы менән һөйләү" номинацияһында ҡатнашыусылар һәр ваҡыттағыса үҙҙәренең төплө әҙерлеге менән һөйөндөрҙө.** Уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр балаларға ролдәренә ярашлы һүҙҙәрҙе генә ятлатып ҡалмай, уларҙы актерлыҡ оҫталығына ла, йыр-бейеүгә лә өйрәтә, сағыу сәхнә кейемдәре һәм биҙәлештәрҙе лә хәстәрләй. Бында балаларҙың ата-әсәләренең теләктәшлеге, ярҙамы ла барлығы тойола. **Гран-при быйыл М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы һәм "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһы фольклор коллективтарына бирелде.** Уҡыусылар "Ни өсөн ҡаҙҙар ала була?" башҡорт халыҡ әкиәтен оҫта сәхнәләштерҙе: бик матур башҡорт йырҙары, көйҙәр яңғыраны, думбырала һәм ҡумыҙҙа оҫта сиртеп тә тамашасыларҙың иғтибарын яуланылар. "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында етенсе тапҡыр ҡатнашам. Икенсе класта уҡығанда әкиәтте яңғыҙ һөйләп, Гран-приға лайыҡ булғайным. Был минең иң яратҡан конкурсым. Ул балаларҙы телефондан айырырға, әкиәттәрҙе хәтергә төшөрөргә, туған телебеҙгә ҡарата һөйөү уятырға ярҙам итә. Шуға тиҫтерҙәремә "Һаумы, һаумы, әкиәт"тә ҡатнашығыҙ, тип әйткем килә. Ул тормошоғоҙҙа ярҙам итәсәк", - ти 136-сы Башҡорт лицейының 4-се класс уҡыусыһы Әминә Аллабирҙина.

"Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһының фольклор коллективы ағзалары менән дә һөйләшеү форсаты тейҙе. Улар "Йомро икмәк" рус халыҡ әкиәтен бик оҫта сәхнәләштерҙе, хатта тамаша залында ултырған шаяншуҡ балалар ҙа бер аҙға тынып ҡалды һәм бар иғтибарын сәхнәгә йүнәлтте - был бик юғары баһа. Йомро икмәкте уйнаған Булат Батыровҡа алты йәш, ул тәүге минуттарҙан уҡ көләслеге, ихласлығы менән арбаны. "Был байрам бик оҡшаны миңә. Йомро икмәк булыуы ла оҡшай. Ә үҙем тағы "Урал батыр" әкиәтен яратам, ул малайҙарҙы батыр, яҡшы булырға өйрәтә", - ти Булат. Әкиәттә Төлкөбикә ролен башҡарған Айзилә Бикмөхәмәтоваға ла тантаналы сара бик оҡшаған, бүләктәргә ҡыуанған ҡыҙ. Ә бына Әмирхан Хәсәнов нимәләр яратыуы тураһында һөйләне: "Йомро икмәк" әкиәтен яратам, "Өс бесәй" мультигын, бөгөнгө байрамды, машина һәм лего уйнарға, балалар баҡсаһында уйнарға һәм йоҡларға яратам. Миңә 6 йәш, тиҙерәк мәктәпкә барғым килә. Унда уҡыясаҡмын. Әле хәрефтәрҙе беләм, Арыҫлан ағайым өйрәтте", - ти малай.

Фольклор коллективтары менән сәхнәләштергәндәр араһында I урын 40-сы Башҡорт балалар баҡсаһы һәм 160-сы лицей коллективына, II урын 308-се Башҡорт балалар баҡсаһына, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһына һәм 24-се мәктәпкә, III урын 18-се Башҡорт балалар баҡсаһына һәм Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһына бирелде.

**"Йәш әкиәтселәр" номинацияһы - конкурстың балаларҙың ижади ҡомарын үҫтереүгә арналған бик мөһим өлөшө.** Бында үҙҙәре әкиәт уйлап сығарған кескәйҙәр ҡатнаша ала. Быйыл номинацияла I урынға 102-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Айсилә Хәсәнова менән М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһынан Айлина Ишбаева лайыҡ булды. II урында - 296-сы балалар баҡсаһынан Розалина Ялалова, 46-сы лицейҙан Илшат Бикмәтов, III урында - 95-се балалар баҡсаһынан Асҡар Ситдиҡов, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһынан Алтынай Хәлилова.

**Быйыл ойоштороусылар "Яратҡан әкиәтте тауышландырыу" тигән яңы номинация булдырған.** Унда ебәрелгән эштәр ҙә бик үҙенсәлекле булған. Балалар әҙер төшөрөлгән әкиәт геройҙарын үҙ тауыштары менән "һөйләштереп" кенә ҡалмаған, хатта ҡурсаҡтар һәм уйынсыҡтар ярҙамында айырым видео төшөрөп, тотош бер йәнһүрәт эшләп тә ҡуйған. Был йәһәттән 18-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре Ильяс һәм Мираҫ Ишдәүләтовтарҙың, йәнә Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Алтынай Хәлилованың эштәре иң юғары баһаланып, уларға I урын бирелде. II урынға 239-сы балалар баҡсаһынан Данияр Кәримов, 111-се гимназия коллективы, ә III урынға 102-се башҡорт балалар баҡсаһынан Азалия Дәүләтова, 46-сы лицейҙан Әлмир Ғәббәсов лайыҡ булдылар.

**Конкурстың иң төп номинацияһы - "Яңғыҙ башҡарыу".** Был номинацияла ҡатнашҡан балаларҙың телмәр оҫталығына ғына түгел, әртислегенә, күмәк кеше алдында баҙамай сығыш яһай алырлыҡ ҡыйыулыҡтары булыуына ла хайран ҡалырһың. **Быйыл Гран-приға 24-се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Нурсолтан Фазылов менән 107-се лицейҙың 2-се класс уҡыусыһы Йософ Зарипов лайыҡ булды.** Өс йәшлек Нурсолтан "Ҡарға ни өсөн исемен әйтеп бөтөрмәй?" тигән башҡорт халыҡ әкиәтен бик оҫта һөйләне. Йәше бәләкәй булыуға ҡарамаҫтан, хатта "р" хәрефен дә асыҡ итеп әйтә белеүе лә, зирәклеге лә хайран итте: "Балалар баҡсаһында бик ҡыҙыҡ миңә. Ә был байрамда ҡотлауҙары, уйынсыҡ бүләк итеүҙәре оҡшаны. Ҡарға тураһында әкиәтте һөйләгәйнем, әсәйем өйрәтте. Үҙем "Маша һәм айыу"ҙы ҡарарға яратам, уйынсыҡтарым да күп. Конструкторҙан машина, пирамида төҙөйөм", - тип үҙе тураһында ихлас бәйән итте Нурсолтан. Исеме есеменә тура килеп торған бәләкәстең ата-әсәһе Таңсулпан һәм Вилдан Фазыловтар әйтеүенсә, улар был конкурста тәүге тапҡыр ҡатнашҡан, артабан да улдарына туған телдә матур һөйләргә, күмәк кеше алдында сығыш яһарға өйрәтеүҙе дауам итергә теләктәре ҙур.

Әкиәтте яңғыҙ башҡарыусы мәктәп уҡыусылары араһында Гран-при эйәһе Йософ Зарипов менән дә әңгәмәләшеү форсаты тейҙе. Ул "Батыр малай" тигән дағстан халыҡ әкиәтен һөйләгәйне. "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында быға тиклем дә ҡатнашҡаным бар, йыл һайын бик матур байрам ойошторола. Ҡурсаҡ театрында элек тә булғаным бар ине, хәҙер ул тағы ла матурыраҡ, барыһы ла алтындан. Быйыл миңә "Йомро икмәк" әкиәтен сәхнәләштергән балаларҙың сығышы бигерәк оҡшаны. Үҙемә был конкурс башҡорт телен яҡшыраҡ аңларға, күп кеше алдында сығыш яһарға өйрәнеү йәһәтенән ярҙам итә. Мин уҡыған 107-се лицейҙа башҡорт балалары бик күп түгел, шулай ҙа башҡорт теле дәрестәре ҡыҙыҡлы үтә. Хәҙер үҫкәс, әкиәттәрҙе бик уҡымайым. "Ҡыҙыл китап" бүләк иткәйнеләр миңә, шуны өйрәнергә яратам. Тағы ла каратэ, музыка түңәрәктәренә йөрөйөм, баянда уйнайым. Дуҫым менән футбол тибәбеҙ", - ти Йософ.

Шулай уҡ "Яңғыҙ башҡарыу" номинацияһында I урын - "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Булат Батыровҡа, Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһынан Азалия Көмөшбаеваға, II урын - 51-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Салауат Ғүмәровҡа, 160-сы лицейҙан Алһыу Һабанбаеваға һәм М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейынан Әмирә Билаловаға, III урын 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһынан Рамаҙан Йәркинбаевҡа, 161-се лицейҙан Йәсминә Йәрмөхәмәтоваға бирелде.

- Беҙ балаларҙың теле асылғандан бирле "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында ҡатнашабыҙ, сөнки ул бик мөһим. Бала үҙ туған телен белеп үҫергә тейеш. Шуға башҡорт мөхите булған балалар баҡсаһын, гимназияһын һайланыҡ. Өлкән ҡыҙыбыҙ Азалия быйыл ҡатнашып, беренсе урын яуланы. Уртансыбыҙ Илсиә лә апайынан күреп ҡатнашыр йәштә, ә Дилиәбеҙ әле бәләкәй. Ҡала мөхитендә балаға туған телен өйрәтеү ысынлап та ғаиләнән башлана, беҙ хатта шаяртып: "Рус телен тышта ҡалдырайыҡ", - тип әйтәбеҙ. Балалар өйгә "Һаумыһығыҙ!", "Хәйерле кис!", тип килеп инә. Бына шундай ябай ғына тылсымлы һүҙҙәрҙән телдәре асылып киткәйне ҡыҙҙарыбыҙҙың, хәҙер матур итеп үҙебеҙсә һөйләшеп йөрөүҙәренә һөйөнәбеҙ. Был конкурста улар матур бүләк аласаҡмын, тип тә тырыша: үҙҙәре әкиәт һайлай, теләп ятлай. Шулай балаларҙың күңелдәрен күреп, сағыу байрам үткәргән ойоштороусыларға бик рәхмәтлебеҙ, - тине әңгәмә барышында Розалия Көмөшбаева.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

✓ *Ҡайһы көндә улының тауышын да ишеттерә кәләше. Телен бошоборак "Атай, ҡайт!" тигән һүҙҙәр егеттең күңеленә йылы һала, тиҙерәк нацистарҙы дөмөктөрөп, тыныс тормошҡа ҡайтып йәшәү теләген арттыра.*





# ГЕРОЙҘАР ВАҠЫТЫ

Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

(Хикәйә)

*Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һәм һәләк булған батырҙарға арнайым.*

Мина ергә төшөп шартлағанда ярсыҡтары бик алыҫтарға тарала. Һин мина төшкән ерҙән алыҫта, окопта ултыраһың икән, ерҙең көсәнеүен тояһың. Ер көсәнә, ыңғыраша төҫлө. Ҡайһы бер тауышһыҙ миналар ҙа бар, уларҙың ҡырт итеп ергә инеп китеүен генә ишетәһең һәм ерҙең, һауаның тулҡыны килеп бәрелә. Был нык контузия бирә торған тулҡын. Һуғыштың аяуһыҙлығын, төрлө ҡорал уйлап табыусы ғалимдарҙың башлылығын күрергә була был ҡанҡойош ваҡытында. Шундай миналар бар: улар шартлай, һауа тулҡыны һалдаттарҙы төрлө яҡҡа атып бәрә. Барып ҡараһаң, һалдат ята, бөтөн ере имен, яраланған ере күренмәй. Әммә ул кешенең эсендәге бөтөн ағзаларын селпәрәмә килтергән! Уға ҡағылдыңмы - иптәшең инде һуңғы һулышын алған була... Аяуһыҙ, мәрхәмәтһеҙ кешелекһеҙ был һуғыштың йөҙө! Уға йәлләү, намыҫ, изгелек кеүек төшөнсәләр ят, бары күберәк һалдаттарҙы юҡ итеү, хәйләкәрлек, үлем көсәү генә уның булмышы!

* * *

Төндә икешәр сәғәт һайын алышынып поста торған ваҡытта бигерәк тә башҡа төрлө уйҙар килә. Кемдең хаҡлы, кемдең ғәйепле икәнен уйлай башлайһың. Был уйҙар - йонсотҡос уйҙар! Быны аңламаған егеттәр, шулар иҫәбендә "Лев" позывнойлы Зариф та нык уйланды, хәҡиҡәткә төшөнөргә маташты. Әммә ауыр уйҙарҙың күңелгә һиллек түгел, киреһенсә, уны хәлһеҙләндереүен, көсһөҙләндереүен, үҙен эстән ашауын аңлап ҡалды һәм ул баш ватыуҙарҙан ҡотолорға булды. Ул - һалдат, ул - яугир. Ил саҡырҙы - уны һаҡларға бурыслы! Башҡалары уға ҡағылмай! Шуға күрә Зариф һаҡта торған төндәрҙә тыуған ауылын, өйөн, атаәсәһен, һеңлеләрен, кәләшен, улын уйланы. Күңелле мәктәп һәм студент йылдарын хәтергә алды. "Бөгөн батырлыҡҡаа урын бармы?" тигән һорауға ла йыш әйләнеп ҡайтты. Әммә был һорауға ул күптән яуап тапҡайны инде. "Батырлыҡ мөһим түгел! Кеше булып ҡалыуың иң мөһиме! Намыҫыңа тап төшөрмәү! Сөнки һуғыш ваҡытында һалдаттарҙың кешелеклеген юғалтып, инстинктҡа бирелеп, хайуандарса эш итеүен аҙ күрергә тура килмәне.

Мәҫәлән, булды шундай ваҡиға: дошман һалдаттарын әсиргә алдылар. Уларҙан допрос алырға ла, штабҡа оҙатырға кәрәк. Әммә араларында бер нисә егет: "Улар беҙҙең һалдаттарҙы нисек туҡмаған, кәмһеткән, ниндәй ағзаларын ҡырҡып алған, беҙ ҙә шулай итәйек! Ҡанға - ҡан, үскә - үс!" тигән талап ҡуйҙы. Бер яҡтан ҡараһаң, улар хаҡлы ла кеүек. Әммә... нацистар ҡыланғанды ҡыланһаң, бер нәмә уйламаған, кешелеклеген юғалтып, робот үлтереүселәр - наемниктар кеүек үлем ҡоҙғонона әйләнереңде көт тә тор! Кеше булып ҡалырға! Шулай уҡ был афәттән имен-аман ҡотолоу! Әгәр яралана икән, еңелсә булһын! Йырҙа йырланғанса "Если смерти - то мгновенной, если раны - небольшой!" - йыш ҡына шуны йырлап, йә һыҙғырып ултырыр булып китте ул. Һөжүм тынған, һил ваҡыттарҙа, йә кисен йоҡлар алдынан блиндажда һөйләшеп ятҡанда ошо турала ла һүҙ сыға ине.

- Мин калека булып ҡайтырға теләмәйем! - тине "Жираф" позывнойлы рус егете. Улар "Лев", йәғни Зариф менән бер осорҙа яраланғайны. "Лев"тың яраһы еңелсә генә булғас, ошонда ғына перевязка менән ҡотолдо. "Жираф" госпиталдә ятып килде.

- Госпиталдә аяҡһыҙ, ҡулһыҙ, ярты башын снаряд умырған һалдаттарҙы күрҙем. Минең ундай хәлдә туғандарыма ҡайтырға хаҡым юҡ!

- Мин дә! - тип уны йөпләне икенсеһе. - Инвалид булып, туғандарыма йөк булып йәшәмәйем! Әгәр нык яраланып та, үлмәһәм, мине госпиталгә ебәрмәгеҙ! Ошонда уҡ ярҙам итегеҙ - атығыҙ! Был иң изге эш булаҫаҡ! Калека булып түгел, герой булып даным ҡайтһын!

Мине лә йәлләмәһендәр! - ти өсөнсөһө. - Әйҙәгеҙ, һөйләшәйек! Ысынлап та үҙ-үҙебеҙҙе ҡарарлыҡ, атлап йөрөрлөк яра алмайбыҙ икән, "300"-сө булабыҙ икән, атабыҙ! Йәлләмәйбеҙ! Бер-беребеҙгә вәғәҙә бирәйек!

Тәүҙә "Лев" та шулай тип уйланы. Атаһы йәшләй инфаркттан китеп барғас, ауыл тормошоноң бөтөн ауырлығын уның менән бергә күтәргән әсәһен йәлләне. Аяҡһыҙ, йә ҡулһыҙ булып ҡайтып, йөк булып ятырға теләмәне. Кеше көнлө булып, йә аҫтыңа ярау итеп ултырыу - тағы ниндәй ауырлыҡ килтерһен ул әсәһенә! Мәңгелек ғазап, көсһөҙлөк кенәме? Бындай йәшәүҙән йәшәмәүең мең артыҡ түгелме?

Ләкин телефон аша ҡыҫҡа ғына һөйләшеүҙәр ваҡытында әсәһе уның уйын белгәндәй: "Имен-һау ҡайт, улым! Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ, күҙһеҙ булһа ла ҡайт! Аяғың да, ҡулың да, күҙең дә булырмын! Тик ҡайт ҡына! Шунһыҙ мин йәшәй алмам, улым! Һине юғалтһам, миңә лә йәшәү юҡ!" - тип һәр ваҡыт тәҡрарлап торҙо. Егеттәрҙең ошондай һөйләшеүендә Зариф ҡатнашмай, ә үҙенең инвалид булып ултырыуын күҙ алдына килтерергә тырыша. Ярай, бер ҡулһыҙ ул йәшәр, һыңар ҡулы менән бына тигән донъя көткән кешене күргәне бар. Һыңар аяҡ менән дә йәшәгән бер ветеран булды. Ағас аяғын туҡылдатып, бөтөн эште эшләне. Һыҙланғандыр, төндәрен йоҡламағандыр - унышын бер кем белмәне... Ә ике аяҡһыҙ, йә ике ҡулһыҙ ҡалһа? Юҡ, юҡ! Бындай йәшәүҙән Аллам һаҡлаһын! Күҙһеҙ, дөм-ҡараңғы тормошто ла күҙ алдына килтермәй Зариф. Кәрәкмәй! Ошо ике осраҡта уны ла юҡ итһендәр!

Бер ай алғы һыҙыҡта булғандан һуң уларҙы артҡа күсерҙеләр, улар урынына икенселәр китте... Бында шундай тәртип: ай һайын алмашынып торалар. Әлбиттә, алмашынырлыҡ кеше ҡалһа һәм форсат булһа. Форсаты сыҡмай икән, нисә ай "передок"та - окопта, асһыңмы, ҡар өҫтөндәһеңме, эсер һыуың бармы- юҡмы - бер хәл дә итеп булмай. Сөнки алғы һыҙыҡтағы алыш барған ергә гумконвой ҙа, полевая кухня ла килеп етә алмай. Үҙҙәренең ҡанлы мәхшәр эсенән имен сығыуҙарына һаман да ышанып етмәйҙәр әле. 200-сөләр, 300-сөләрҙе лә яу яланынан алып сығыуы мең бәлә... Йөк машиналарын йөрөтөүсе, яралыларҙы һәм һәләк булыусыларҙы ташыусы водителдәр ҙә һәр саҡ "мина яланы" аша үтеүсегә торошло. Һәр минут һайын өҫтөңә снаряд, граната, мина, пуля рәүешендә "үлем ямғыры" яуып торғанда бары йәнен фиҙа ҡылыусылар ғына ошо юлдарҙан яңынан үтергә әҙер. Ысын геройҙар!

* * *

Улар - һиңә, һин - уларға! Снарядтар һәм пулялар оса, ҡай саҡ башыңды ҡалҡытып ҡарарға ла форсатың юҡ. "Лев" бер нисә иптәше менән ҡалҡыуҙараҡ, башҡалар аҫтараҡ урынлашып, дошманға ҡаршы ут яуҙыра. Бөгөн айырыуса ҡаты алыш бара, бер нисек тә алға китеп булмай. Уларҙың заданиеһы ауылды алыу ине, әлегә йөҙ метрға ла алға китә алманылар. Сираттағы гранаталарҙы дошман позицияһына оҙатҡан Зариф, урынын алыштырыр өсөн, уңғараҡ шыуышты. Тап шул мәлдә геүләп снаряд осоп килгәне ишетелде. "Лев" ҡулдары менән башын ҡаплап, ергә һенде.

- Гөрҫ! - Снаряд ул киткән ерҙән саҡ ҡына аҫҡа төшөп шартланы. Ыңғырашҡан тауыш ишетелде, ярҙамға саҡырҙылар. "Лев" тәгәрләп тигәндәй, аҫҡа ынтылды. Яраланған егеттең эргәһенә "Боксер" килеп еткән ине инде. Ул иптәшенең каскаһын систерҙе.

- Ярҙам кәрәкме? - тип ҡысҡырҙы "Лев" атыш тауышын еңергә тырышып.

- Бронникты сисегеҙ! - тине яралы, ул иҫендә ине. -Тын алып булмай...

"Боксер" менән "Лев" икәүләп һаҡ ҡына бронежилетты һалдыра башланы. Ул теткеләнеп бөткәйне һәм, снаряд ярсыҡтары менән ҡуша, һалдаттың тәненә ҡаҙалғайны. Ҡанлы, тупраҡлы бронник ҡалдығын саҡ-саҡ ысҡындырып алдылар. Яралы һалдат ауыр ыңғырашты, "иплəп" тип ҡысҡырҙы. Шул мәлдә генә уларҙың баш осонда геүләү ишетелде. Дрон! Пулялар һыҙғырыуы, снаряд-гранаталар шартлауы ғына уның килеүен ишеттермәгән булған икән. Бер мәлгә генә атыш тынды һәм коптерҙың ауыр ыңғырашыуы уның снаряд ташларға йыйыныуын аңғартты. Был бер секундта Зариф нимә уйларға ла өлгөрмәне, "Боксер" уны ла, яраланған иптәшен дә ҡаплап, улар өҫтөнә ауҙы. Шул секундта уҡ шартлау яңғыраны! Донъяның аҫты-өҫкә килгәндәй тойолдо... Төтөн, дары, көйгән ит еҫе танауға тулды. "Лев"тың аңы бер мәлгә генә юғалғандай булды ла, кире үҙ халәтенә ҡайтты. "Теребеҙме?" - тигән уй үтте башынан.

- Боксер? Һин тереме? - тегеһе ауыр шыуышып уның өҫтөнән төштө һәм иҫтән яҙҙы. Зариф та, алдан яраланған һалдат та тере ине. Ә уларҙы үҙ кәүҙәһе менән ҡаплаған "Боксер" нык ҡаты яраланғайны, арҡаһы ярсыҡтарҙан тишкеләнеп бөткәйне...

"Боксер"ҙың был аҙымы, иптәштәрен үлемдән һаҡлап, үҙ ғүмерен ҡорбан итергә ынтылыуы - ысын батырлыҡҡа тиң! Быны ҡысҡырып бер кем өндәшмәһә лә, Зариф та, башҡалар ҙа аңланы. "Батырлыҡҡа урын бар! - тип уйланы Зариф аҙаҡтан ошо хәл иткес бер секунд тураһында хәтеренә алып. - Бөгөн тап геройҙар ваҡыты! Тик улар батырлыҡ, герой булыу тураһында уйламайҙар! Бары иптәшеңде ҡотҡарыу, уға терәк булыу хаҡында ғына уйлайһың! Хатта уйламайһың да, ә ҡотҡараһың! Бына ошо инде батырлыҡ! Ә уның тураһында ҡысҡырыу, гәп һатыу түгел!"

"Боксер"ға ла, иптәштәрен ҡотҡарыу өсөн үҙ ғүмерҙәрен йәлләмәгән башҡаларға ла ихтирамы артты Зарифтың. Ул үҙенең дә рухи яҡтан сыныгыуын, башында буш уйҙарға урын ҡалмауын аңланы. Ул - һалдат! Ошоноң менән барыһы ла әйтелгән!

* * *

Алғы һыҙыҡтан сығыу - тамуҡтан сығыуға тиң булды... Күптәр ятып ҡалды... Иптәштәренең күҙҙәрен йомдороп, ҡара тоҡтарға тығып, "200"-се йөк менән тыуған ерҙәренә оҙатыуға ғына һаман күнеп булмай! Нисек? Нисек инде 20, 25, 30 йәштә китәһең был матур донъянан! Улар әле бит йәшәп тә, яратып та өлгөрмәне! Уларҙы кәләштәре, балалары, атайәсәйҙәре көтөп тора!..

Штаб янында интернет бар, ялан вай-файы тота. Алғы һыҙыҡтан сыҡҡас, һәр һалдат үҙенең иҫән-именлеген белдерер өсөн тиҙерәк штаб янына ашыға. Уларҙың тауышын ишетеүгә зар-интизар булып торған яҡындарын шатландырыр өсөн ҡабалана улар. "Бөтәһе лә яҡшы! Имен-һаубыҙ!" - ошо хәбәрҙән дә, ғәзиз балаһының, һөйөклө иренең, ҡәҙерле атаһының тауышын ишетеүҙән дә ҙурыраҡ шатлыҡ, олораҡ бәхет бармы көткәндәр өсөн!

"Лев" тәүҙә йышыраҡ әсәһенә шылтырата, өйҙәге хәлдәр, ике һеңлеһенең уҡыуы, ауыл яңылыҡтары менән ҡыҙыҡһына ине. Үлем менән күҙгә-күҙ ҡараша башлағас, кәләшенә лә шылтыратырға ғәҙәт итеп алды. Бәләкәй улының хәлен белешә, ниндәй һөнәр арттырған, нимәгә өйрәнгән, балалар баҡсаһына йөрөймө, ниндәй һүҙҙәрҙе әйтә - уның өсөн донъяла тағы бер ғәзиз йән барлыҡҡа килде. Ҡайһы көндә улының тауышын да ишеттерә кәләше. Телен боҙобораҡ "Атай, ҡайт!" тигән һүҙҙәр егеттең күңеленә йылы һала, тиҙерәк нацистарҙы дөмөктөрөп, тыныс тормошҡа ҡайтып йәшәү теләген арттыра. Улы арҡаһында ҡатынына ҡарата ла йылы хистәрҙең уяныуын үҙе лә һиҙмәй ҡалды Зариф. Көндө нисек үткәреүен, нимәләр борсоуын, ҡалала ниндәй үҙгәрештәр булыуын һораша, кәйефе үҙгәреүен дә һиҙеп тора. Ул да көтә, ахырыһы, Зарифты. "Ҡасан ҡайтаһың, улың һине таптыра, һине һағына!" - тиһә, ҡулдарында көс артыуын, йөрәге йышыраҡ тибә башлауын тоя ул. "Имен ҡайт, улым! Һин беҙҙең берҙән-бер күҙ терәп торған терәгебеҙ! - ти әсәһе лә. Доғалар уҡый башлауын, намаҙға өйрәнеүен әйтә. - Бер ҡасан да башыма яулыҡ ябынып, ҡул ҡаушырып, доға уҡып ултырырмын тип уйламағайным. Тормош үҙе ошо көнгә алып килде. Көнөн-төнөн һинең иҫән ҡайтыуыңды һорап, Аллаһы Тәғәләгә ялбарам... "

**(Дауамы. Башы 16-19-сы һандарҙа).**

✓ ***Шиғырҙы яҙғанда шағир бөтөнләй икенсе нәмәне лә уйлауы мөмкин, әммә мин унда үҙемдекен күрәм. Ана шундай, кешеләр үҙҙәренең кисерештәрен тойған шиғырҙар халыҡ араһында таралып китәләр ҙә инде.***



*ШАҒИРӘГӘ ӨС ҺОРАУ*

# ИЖАД ИТЕР ӨСӨН...

## тормош ауырлыҡтарын да үтеү кәрәк

**Был юлы өс һорауҙы ошо көндәрҙә 50 йәшен билдәләгән Әбйәлил һылыуы, шағирә Зөлфирә ҠАРАҒУЖИНАға төбәнек.**

➔ **Шиғриәт тураһында ҡанатлы һүҙҙәр күп әйтелгән. Ләкин һәр кем элек яңғырағандарға үҙенекен өҫтәй ала. Илһам ҡошо көтмәгәндә-уйламағанда килеүе лә ихтимал. Күңел хистәрен шиғри юлдарға ҡасан һала башланығыҙ?**

- Белорет мәктәп-интернатында (хәҙер лицей-интернат) 6-сы класта уҡығанда Белорет педагогия училищеһынан практиканттар килде. Беҙҙең класта сығышы менән Учалы районынан Зәкиә исемле апай әҙәби түңәрәк алып барҙы. Шул түңәрәккә класташым Рита Дәүләтова менән йөрөнөк, мәҡәлә йә акиәт-фәлән дә түгел, тик шиғыр яҙырға өйрәндек. Минең шиғыр гәләмәтем яйыраҡ,Ританың йәһәт кенә, оста ғына, күпләп килеп сыға торғайны, тип хәтеремдә ҡалған. Уның шиғыры ул ваҡыттағы "Башҡортостан пионеры" гәзитендә лә баҫылып сыҡты. Үҙем шул ваҡытта яҙған берәүһенең бер куплеты иҫтә ҡалған:

*Ҡарағастар - ҡара ағайҙар,*
*Ҡәберлектә ҡайғы кисерә.*
*Әйтерһең дә кеше ҡайғыларын*
*Алып үҙҙәренә күсерә...*

Ауылыбыҙҙа, нигеҙҙә, ҡайынлыҡ, ә зыяратта ҡарағастар үҫә. Элегерәк шул тирәлә ҡарағаслыҡ булған, шунан торош ҡалған ул ҡарағастар, тип әйтә торғайны атайым. Олоғая башлағас, атайым: "Ҡарағастар араһына китергә күп ваҡыт ҡалманы инде", - тип ултырыр булды. Юғарыла яҙылған шиғыр шул һөйләшеүҙәр нигеҙендә күнелдә уйылғандыр. Шул уҡ алтынсы класта уҡығанда йәшел генә тышлы дөйөм дәфтәргә таҡмаҡтар яҙғайным, уларҙы әсәйемдән ишетеп, ятлап алғайным, уларҙың байтағы әле лә иҫтә, бигерәк тә "Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң исемдәре..." тип башланғандары. Әсәйем оста таҡмаҡсы булды тип әйтә алмайым, әммә таҡмаҡтарҙы күп белде...

Илһам ҡошо уйламағанда-көтмәгәндә килә бит инде ул. Мәҫәлән, Таһир Күсимовҡа арналған "Ат тояҡҡайҙары" тигән шиғыр ауылда йәшәгәндә иртәнсәк һыйыр һауып ултырғанда һыйырҙың тояҡтары иғтибарымды йәлеп итеп яҙылды. Сепарат өйөрөлтөп ултырғанда "Йәйҙең бер көнө" тигән шиғыр башҡа килгәйне. Һуңғы ваҡытта шиғырҙарҙы автобуста яҙам, иртәнсәк 14-се автобустың һуңғы туҡталышынан ултырам, урындар була, берике шиғыр яҙып өлгөрәм. Ошо турала шаярып үҙем өсөн генә яҙған дүрт юллыҡ бар:

*Автобус - минең кабинет,*
*Кабинеты - яҙыусы.*
*Шиғырына баш булалмай*
*Бәйеленән яҙыусы.*

➔ **Тормош һынауҙарҙан тора. Бына шундай саҡта шиғриәт ярҙамға килә. Фәлән шағирҙың шиғырҙарын уҡығас, күңелемә тынлыҡ таптым, тигәнде ишетергә тура килә. Һеҙгә шәхсән шулай тип әйткәндәре барҙыр тип уйлайым. Ниндәй ул бөгөнгө уҡыусы?**

- Тормош һынауҙарҙан тора, эйе, килешәм. Шул һынауҙар кешене сыныҡтыра ла инде ул. Шиғыр минең өсөн дә күңел дауаһы, йәш саҡта йыр-шиғыр, иҫтәлектәр яҙылған дәфтәремдә Рәмзилә Хисаметдинова, Рәми Ғарипов, Шәриф Биккол, Рафаэль Сафиндарҙың ҡыҫҡа шиғырҙарын яҙып ҡуйғанмын. Шул ҡыҫҡа шиғырҙар минең дә кисерештәремде бирә ине, әйтерһең, уларҙы кемдер түгел, мин әйткәнмен. Ул шиғырҙы яҙғанда шағир бөтөнләй икенсе нәмәне лә уйлауы мөмкин, әммә мин унда үҙемдекен күрәм, үҙемә үҙемдең күҙаллауым яҡыныраҡ. Ана шундай, кешеләр үҙҙәренең кисерештәрен тойған шиғырҙар халыҡ араһында таралып китәләр ҙә инде. Бөгөнгө уҡыусы төрлө: ысын шиғырҙы айырғаны бар, айырмағаны бар, аңлағаны бар, аңламағаны бар. Бөгөнгө уҡыусыға ниндәйҙер хәл-ваҡиғаны теҙеп һөйләү, яҙылған ниндәйҙер хәл-ваҡиғаны теҙеп һөйләү, ябайлаштырып биреү ныҡыраҡ оҡшаған һымаҡ тойола. Һүҙ уйнатыуҙы, йәшеренгән фекерҙе аңламаусылар бар. Яңыраҡ бер шиғырыма Сибайҙан иҡтисад фәне уҡытыусыһы Фирүзә апай Барлыбаева (был апай минә яҡын туған, әммә әлегә күрешкәнебеҙ юҡ) яҙғайны: "Элекке коллегам Рәйес Түләк: "Һеҙ нимә, рифмалап яҙылған юлдарҙы шиғыр тип уйлайһығыҙмы?"- тип әйтә торғайны. Ә бына, Зөлфирә һеңлем, һинең яҙғаның шиғыр, уны уҡығанда илағыларым килә, ғүмер юлым күҙ алдымдан үтә". Ошондай фекерҙәр уҡыусының баһаһы инде: Фирүзә апай ул шиғырҙа ғүмерен күргән, ә мин уны тәҙрәм аша ялан өҫтөнә, таллыҡта йәйелгән көн һайын күргән томанды күреп яҙғайным.



➔ **Тәүге китапты ҡулға алып ҡарау - оло шатлыҡ. Ул яуаплылыҡ та өҫтәй. Ижадҡа нимә ярҙам итә?**

- Тәүге китапсығым 2013 йылда "Йәш тауыштар" серияһында сыҡҡайны, шатлыҡ булды, көтөлмәгәнерәк булды. Икенсе йылына БР Яҙыусылар Союзына алыуҙары шулай уҡ көтөлмәгәнсә булды, сөнки инициатива үҙемдән булманы. Ул ваҡытта үҙемде шағир итеп түгел, күберәк шиғыр яратыусы итеп тойҙом микән, тип уйлайым. Шағир тигән ҙур исемде күтәрергә әҙер түгел инем шикелле. Ә шиғриәткә ҡыҙыҡһыныуымды ташламаным, ауылда мәҙәниәт өлкәһендә эшләгәндә йыл һайын 21 мартта Бөтә донъя шиғриәт көнөнә арнап саралар үткәрҙем. Ул осор минең өсөн ҙур тормош тәжрибәһе булды, шуға ғүмеремдең һәр осорона, һәр мәленә рәхмәтлемен.

Ижадҡа нимә ярҙам итә, тигәндә, минең фекерем шулай: ижад итер өсөн тормош ауырлыҡтарын да үтергә кәрәк. Ижад өсөн бөтә шарттар булдырылып та, тик шул ижадтың булмауы мөмкин. Әҙер тормош шарттары ярҙам да итеүе, ярҙан да этеүе мөмкин булған һымаҡ, ауырлыҡтар менән дә шул уҡ хәл. Әлеге мәлдә, шөкөр, ижади ҡомарым асылған мәл. Тормоштоң һәр күренеше мине илһамландыра. Яҙҙың матурлығын һәр мәлендә күрәм, хатта батҡағы ла, йонсоу көндәре лә миңә илһам сығанағы. Кешеләрҙең күңел матурлығы хайран итә, уларҙы мин күрәм, тоям. Бөгөнгө заманда кешенең рухи байлығын матди байлыҡтар баҫып киткән мәлдә кешеләрҙең үҙ асылына тоғро ҡалыуы мине тетрәндерә. Әлеге мәлдә илһам сығанағы ана шул кеше булып ҡала алған кешеләр, тип уйлайым. Улар әҙ түгел, шуныһы ҡыуаныслы. Ижад итеү өсөн күңелдең йыртҡысланған мәленән һуң бөтөн мәле килеүе мөһимдер.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**яҙып алды.**

# ҠАЛАЛАРҘА КЕШЕЛӘРҘЕ ТАПТЫМ...

*Зөлфирә ҠАРАҒУЖИНА*

### Асылыбыҙ

Милли кейем - мәҙәниәт,
Халыҡтың асылы ул.
Боронғо ҡәүемдә йәшәп,
Бөгөндә асыла ул.
Милли кейем - сал тарих ул,
Сатнамаҫтай көҙгә ул.
Донъялағы һәр халыҡтың
Үҙенә хас йөҙә ул.
Милли кейем - ҡомартҡы ул,
Нәҙере сал быуаттың.
Милли миллионға нәҙер,
Һаҡланыр көс булаттан.
Милли кейем уңмай торған,
Туҙмай торған асылым.
Асылымда хасил булып,
Хәс ил булып асылам.
Милли кейем - асыл ул.

### Туған телем

Сыр-сыуҙарҙы, сарсауҙарҙы баҫа
Саф шишмәһе туған телемдең.
Шишмәм сығанағы хәлен күреп,
Зиһендәрем меңгә теленде.

Хайран ҡалам, сығанаҡта күреп
Хазиналар яткан һандыҡты.
Йәш кәләштең күрҙем бирнәлеген,
Ҡәйнешенә сиккән янсыҡты.

Хайран ҡалам, сығанаҡта күреп
Йәш кейәүҙең тирмә ҡорғанын.
Тирмә эсен ике яҡҡа бүлгән
Бирнәлектән сыҡҡан ҡорғанын.

Һыуһын ҡана, сығанаҡтан тәмләп
Шишмәләге һыуҙың сафлығын.
Етмеш быуын олатамдың ҡәҙер,
Нәҙер иткән иң саф ҡылығын.

Вайран булдым, сығанаҡта күреп
Шишмә юлын быуған суп-сарҙы.
Был афәттән көс-хәл менән ҡурсып,
Һаҡлап торҡан кескәй утрауҙы.

Шишмәһенә төшөп мүк ҡапланған
Хазинаны сүптән таҙартам.
Таҙартырға бында әмә кәрәк,
Шишмә бысрай, бында һаҙ арта.

Көн дә барам шишмәм сыҡҡан ергә,
Мүктәренән һүҙҙә таҙартам.
Алтын һүҙгә яңы һулыш бирәм,
Яңы моңдан яңы саз тартам.

### Өфөм

Өфөмдә төн, әммә тын түгел ул,
Төнгө Өфөм үтә тынғыһыҙ.
Яңы донъя ишектәрен аса,
Ул ишеккә кистәр һыйғыһыҙ.
Ул ишеккә хистәр һыйғыһыҙ.

Өфөмдә төн, көндә ҡыуалаған
Киң урамдан атлай ҡараңғы.
Шәмдәлдәрҙә уттар нурға ҡумә
Өфө тигән затлы һарайҙы,
Өфө тигән атлы һарайҙы.

Тәгәрмәскә оҡшаш хәрефтәргә
Оло ҡала һыйған был һынға.
Эй, Өфөмә аҡ хистәрем түгел,
Саф хистәрем түгел йыһанға,
Мәңгелеккә оҡшаш был һынға.

Өфөмдә төн, әммә өн түгелме,
Өфөмдә көн, әллә төн түгел.
Көн түгелдер, мең йондоҙҙа күгем,
Мең йондоҙҙа балҡый йыһаным.
Өфө минең рухлы илһамым.

### Кешеләрҙе таптым...

Ҡалаларҙа кешеләрҙе таптым,
Кешеләрҙе - ысын кешеләрҙе.
Заман менән сапҡан замандашты,
Кеше булып ҡалған кешеләрҙе.
Өфөләрҙә таптым кешеләрҙе,
Уф, тигән бер мәлдә юлымда.
Өф, тине лә мине ҡамап алды,
Өфөм етәләне ҡулымдан.
Ҡалаларҙан, о, Өфөмдө астым!
Ҡабат астым гәзиз Өфөмдө.
Ишегенән ҡыйыр-ҡыймаҫ үтәм,
Өнгә әйләндереп төшөмдө.
Ҡалаларҙа кешеләрҙе таптым,
Кешеләрме мине таптылар.
Шырлыҡтарҙан ҡайтҡан шиғырҙарым
Шиғри һарайына яптылар.
Кешеләрҙе таптым ҡалаларҙа,
Алҡымымдан алғас ялалары.
Тындарымды быуыр сиккә еткәс
Нахаҡ тигән батша ялсылары.
Әллә таптым һеҙҙе, кешеләрем,
Әллә мине һеҙме таптығыҙ.
Һуҡырайған, телдән яҙған мине
Әллә, әллә килеп таптығыҙ,
Өфөм ҡуйынына яптығыҙ.

* * *

Бөйөк урыҫ телен рәниеттек шул,
Лермонтовтың телен онотоҡ.
Илде ил иткән тел - урыҫ телен,
Тирмәндәргә һалып он иттек.
Бөйөк Пушкин телен рәниеттек шул,
Дан йырланыҡ сити-митиға.
Глориямы, худи, фрилансермы,
Алдандыҡмы кәт һәм китиға.
Голкиперға ҡапҡа тотторабыҙ,
Ышанабыҙ, имеш, һаҡлай, тип.
Форвард менән лайнсмен пиар ҡора,
Ә арбитр, имеш, яҡлай тип.
Билет урынына тикет алып
Шоумендарға баҒам аптырап.
Блогер, хакер, юзерҙарға ҡарап,
Тел көрмәлеп торам ҡалтырап.
Диджиталмы, диджей, ОК, имеш,
Терраларға баҒам, уф, сайтта.
Фиджиталы, плейстейшендан ҡасам,
Мин, йәмәғәт, хәҙер офсайдта.
Хот-дог, чипсы ашап, кола эсеп,
Минең тормош хәҙер лайтмы лайт.
Драйвер минә нема, дедлайн норма,
Әйтеп ҡара минә, һайт, тип, һайт...
Бөйөк Пушкин телен рәниеттек шул,
Бөйөк түгел, хәҙер көйөк ул.
Ә шулай ҙа Пушкин әҫәрҙәре
Телде һаҡлар илем көйө ул.
Бөйөк Рәми телен рәниетәбеҙ,
Бөйөк Мостай телен онотабыҙ.
Илемде ил иткән башҡорт телен,
Тирмәндәргә һалып он итәбеҙ.
Телебеҙҙе ниңә онотабыҙ?..

✓ *Һәр сәйәхәтсе үҙенең рухына, булмышына, ҡараштарына, донъяуи талаптарына тура килгән ойоштороусыны эҙләй. Беҙгә, мәҫәлән, сәләмәт тормош алып барған, тәбиғәттән илһам һәм көс алып ҡайтырға теләгәндәр мөрәжәғәт итә.*

ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҢЕЛГӘ ЯТМАҒАН ЭШ...

## мейегә зыян килтерә

■ Стресс һөҙөмтәһендә организмдан бүленеп сыҡҡан химик берләшмәләр мейе туҡымалары өсөн зарарлы. Шуға ла стресс тәьҫирендә мейе кибеүе һәм хатта кешенең аҡылына зыян килеүе ихтимал, ти табиптар. Мейе өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыусылар исемлегенә яратмаған кеше менән ғаилә ҡороп йәшәү, йәрәхәт алғандан һуң килеп тыуған ситуациялар, шулай уҡ перспективаһыҙ эш тә инә. Тап улар мейе күҙәнәктәрен үлтереүсе кортикостероидтар барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе. Кортикостероидтар киҫкен хәлдәрҙә иммун системаһын баҫа һәм ҡан әйләнешендә шәкәр тупланышын арттыра. Бигерәк тә кортикостероидтарҙың тәьҫиренә мейенең хәтерләүҙәр формалаштырыу менән бәйле өлөшө - гиппокамп тиҙ бирешә.

■ АҠШ-та үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡарбуз атеросклероз үҫеше хәүефен кәметә. Кентукки университеты сысҡандарҙа һынау үткәреү өсөн уларға юғары холестеринлы аҙыҡ ашатҡан. Шул уҡ ваҡытта бер төркөм сысҡандарға ҡарбуз һуты эсергәндәр, икенселәре ябай һыу эскән. Һигеҙ аҙна үткәндән һуң ғалимдар сысҡандарҙың ауырлығын үлсәгән һәм килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе сағыштырған. Ҡарбуз һуты эскән сысҡандарҙың ауырлығы кәмерәк, уларҙың ҡан плазмаһындағы холестерин күләме лә әҙерәк булған.

■ Мичигана университеты ғалимы Джэйсон Моузер кешеләр үҙҙәре яһаған хатаны төрлөсә ҡабул итеүен асыҡлаған. Эксперттар раҫлауынса, үҙенең хатаһында нимәгәлер өйрәнәм, тип уйлаусы кешеләрҙең аҡыл ҡеүәһе күпкә үҫешкән була, улар яңылышыуҙарҙы һәм хаталарҙы ла еңелерәк ҡабул итә. Тормоштағы һәр осраҡтан ниндәйҙер һабаҡ алырға ынтылыусылар, әгәр ҙә хәл ҡатмарлашып китһә, мин уны мотлаҡ хәл итәсәкмен, әммә бер нәмә лә килеп сыҡмаһа, был проблеманы аңларға тырышасаҡмын, тип уйлай. Ә бына тағы ла аҡыллыраҡ була алыуҙарына ышанмағандар бер ҡасан да үҙҙәренең шәхси тәжрибәһе менән ҡуллана һәм үҙ хатаһында өйрәнә алмаясаҡ.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре энергетик эсемлектәрҙең хәүефле булыуы тураһында күптән белдергәйне. Беренсенән, был эсемлектәрҙең составында шәкәр күп күләмдә була. Шәкәрҙең тәүлегенә тәкдим ителгән нормаһы 22 грамм булһа, энергетик эсемлектәрҙә уның күләме 102 грамға етә. Икенсенән, уларҙың составындағы кофеин, таурин, женьшень ҡан баҫымын күтәрә һәм йоҡоһоҙлоҡҡа килтерә. Әммә бының менән генә энергетик эсемлектәрҙең зыяны бөтмәй: уларҙы ҡулланыу тахикардия, тын алыу менән бәйле проблемаларға, эпилептик өйәнәк, аритмия, аллергия, хатта үлемгә килтереүе ихтимал. Мәҫәлән, Францияла энергетик эсемлектең дүрт банкаһы 18 йәшлек спортсыны үлтерә.

■ Калифорнияның Stroma Medical ойошмаһы докторы 20 минутта күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртеү ысулын уйлап тапҡан. Был технология Lumineyes тигән атама алған. Уның нигеҙендә һоро күҙҙәрҙе зәңгәргә әйләндереүсе лазер ята. Лазерҙың энергияһы күҙҙәрҙең өҫкө төҫлө ҡатламынан һоро пигментты алып ташлай, һөҙөмтәлә, 2-3 аҙна эсендә унда зәңгәр төҫ тула. Процедураның бер кире яғы бар: күҙҙәрҙең элекке төҫөн ҡабат ҡайтарып булмаясаҡ.

ЗАМАН ШӨҒӨЛӨ

**Башҡортостанда туризм йылдан-йыл әүҙем үҫешә. Бәләкәй балаларҙан алып оло йәштәгеләргә тиклем иҫәпләнгән туристик маршруттар буйлап төбәк халҡы ла, республика ҡунаҡтары ла бик теләп сәйәхәт итә. Ысынлап та, үҙенсәлекле лә, ҡыҙыҡлы ла эшҡыуарлыҡ йүнәлеше - туризм. Бөгөнгө әңгәмәбеҙ - туризм өлкәһендә үҙ урынын тапҡан, туристарға киң билдәле "Динарҙар менән турҙар һәм ағып төшөүҙәр" туристик фирмаһы етәкселәре Динар БАЙЕГЕТОВ һәм Динара КАШАПОВАлар менән.**

# ДИНАРҘАРҘЫҢ СӘЙӘХӘТ ОЙОШТОРҒАНЫ



**➔ "Динарҙар" ҡасан барлыҡҡа килде? Эшмәкәрлегегеҙ туристик өлкәнең ниндәй йүнәлештәрен үҙ эсенә ала?**

**Динара:** Был беҙҙең ғаилә эшҡыуарлығы. Эшмәкәрлегебеҙҙе автомобиль турҙарынан башланыҡ. 2020 йылдың июнендә Динар Мәскәү ҡунаҡтары өсөн Шүлгәнташ мәмерйәһенә махсус автомобиль туры ойоштorҙо. Унан һуң Көнъяҡ Урал һәм "Башҡортостан" ҡурсаулыҡтарына, "Асҡын боҙ мәмерйәһенә" туристарҙы алып йөрөнөк. 2021 йылдан Ағиҙел буйлап катамаранда ағып төшөү йүнәлешендә эш башланыҡ. Шулай уҡ беҙ туристарҙы Бөрйән районы буйлап йәйәү маршруттарға алып сығабыҙ, экологик турҙар ойоштorабыҙ. Йәйге осорҙа Шүлгәнташ мәмерйәһе янында урынлашҡан "Аҡ тирмә" кафеһында туристарҙы тәмле аш-һыу менән һыйлайбыҙ.

**➔ Күп төрлө туристик йүнәлеште алып барған эшмәкәрлекте башлағанға тиклем ҡайҙа эшләнегеҙ? Нисек танышып китеп ғаилә ҡорҙоғоҙ?**

**Динар:** Беҙҙе "Шүлгән-таш" ҡурсаулығы таныштырҙы. Мин ҡурсаулыҡтың фәнни бүлегендә эшләй инем, Динара студент практикаһы сиктәрендә экскурсовод булып килде, унан һуң ҡурсаулыҡтың экологик бүлегендә эшләне. Мин һөнәрем буйынса географ, Динара - туризм буйынса һәм шулай уҡ М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында сит телдәрҙе үҙләштергән киң профелле белгес. Ғаилә ҡороп, Өфөлә бер аҙ йәшәгәс, Бөрйәнгә кире ҡайттыҡ. Туризм өлкәһе, тәбиғәт, Башҡортостаныбыҙ матурлығын ҡунаҡтарға күрһәтергә теләү баш ҡаланы ҡалдырырға мәжбүр итте.

**➔ Туризм өлкәһендә эшләүселәр һаны бермә-бер арта бара. Ошондай ҙур конкуренцияла юғалып ҡалмаҫҡа нимә ярҙам итә?**

**Динара:** Быйыл беҙ дүртенсе туристик миҙгелебеҙҙе асабыҙ. Яйлап үҫәбеҙ, йылдан-йыл камиллашырға, беҙгә мөрәжәғәт иткән туристар өсөн матур, хәтерҙәрендә яҡты хистәр ҡалдырырлыҡ турҙар ойоштororға тырышабыҙ. Үҙеңә эшләү, тимәк, башкөллө эшмәкәрлеккә сумыу, тигәнде аңлата. Әгәр бөтә булмышыңды биреп, ваҡытыңды бүлеп эшләмәһәң, уңышҡа өлгәшеүе мөмкин түгел. Шулай уҡ үҙ эшеңде үҫтереү, әүҙемләштереү өсөн финанс сығымдар ҙа күп талап ителгәнен билдәләп үткем килә.

**Динар:** Конкуренция һәр өлкәлә бар һәм, әйтергә кәрәк, яҡшы, мәҙәни көнәркәшлектең булыуы яҡшы. Был эшмәкәрлек үҙеңде сәмләндерергә булышлыҡ итә, эште алға алып барыу өсөн төрлө юлдар эҙләргә этәрә.

Беҙҙең өлкәлә конкуренция күп, ләкин был беҙҙе ҡурҡытмай. Һәр сәйәхәтсе үҙенең рухына, булмышына, ҡараштарына, донъяуи талаптарына тура килгән ойоштороусыны эҙләй. Беҙгә, мәҫәлән, сәләмәт тормош алып барған, тәбиғәттән илһам һәм көс алып ҡайтырға теләгән, әүҙем сәйәхәтте яратҡан һәм һәр көндән ниндәй ҙә булһа белем эстәргә теләгәндәр мөрәжәғәт итә.

Беҙҙең сәйәхәт ваҡытында һәр кем Башҡортостандың тарихына, мәҙәниәтенә, тормошона тулы кимәлдә "сума". Динара тәжрибәле экскурсовод булараҡ, һәр сәйәхәтте ысын мәғәнәһендә ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле итеүгә өлгәшә. Беҙҙең тағы ла бер "фишка", тип әйтәйем - йылғанан ағып барғанда ла, тауға күтәрелгәндә лә, ғөмүмән, һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә мотлаҡ башҡорт халыҡ легендаларына, риүәйәттәренә, эпостарына ҙур урын бүләбеҙ.

**Динара:** Ысынлап та, Динар дөрөҫ әйтә. Йылдан-йыл артып барған ҙур һәм бәләкәй туристик ойошмалар беҙгә даими рәүештә үҙ хеҙмәтебеҙҙе яҡшыртырға, сәйәхәтселәр өсөн ысын мәғәнәһендә тән һәм рух ялы ойоштороу өсөн көслө стимул булып тора.

Беҙҙең эшмәкәрлектең бер йүнәлешен - катамарандарҙа йылғанан ағып төшөүҙе алып ҡарағанда, туристарға беҙгә тиклем килеп етергә генә кәрәк. Ә ҡалғанын - аш-һыу әҙерләү, йоҡларға урын хәстәрләү, туҡталҡалар яһау һәм башҡаларҙы барыһын да беҙ үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ. Төнгөлөккә ҡайҙа туҡтарға теләйҙәр - йылға буйындағы матур яланда урынлашҡан палаткалар ҡаласығындамы, әллә ҡунаҡ йорттарындамы - барыһын да ҡунаҡтарыбыҙҙың теләгенән сығып ойоштorабыҙ. Беҙҙә ял, урыҫса әйткәндә, "под ключ".

Эшебеҙҙәге иң мөһим һәм иң көнүҙәк мәсьәлә - сәйәхәтселәрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү. Был беҙҙең төп бурыс. Бының өсөн мотлаҡ рәүештә барыһын да ҡотҡарыу жилеттары менән тәьмин итәбеҙ, ағыр алдынан инструкция үткәрәбеҙ, йылғала ла, туҡтағанда ла һәр туристы күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ.

**➔ Әйтеп үтеүебеҙсә, туризм менән шөғөлләнгән фирмалар күп. Тимәк, сәйәхәтселәр алдында һайлау мәсьәләһе лә тора. Ниндәй үҙенсәлектәргә ҡарап ял ойоштороу фирмаларын һайларға кәңәш итәһегеҙ?**

**Динара:** Иң беренсе ял ойоштороусы фирмалар тураһында халыҡтың нимә һөйләгәнен, интернетта ниндәй фекерҙәр булыуына иғтибар итергә кәрәк. Иң шәп реклама - ул "сарафан радиоһы" икәнлеге һәр кемгә мәғлүм. Беҙгә, мәҫәлән, үҙҙәренең таныштары, дуҫтары һәм туғандарының кәңәше менән килә күпселек туристар. Сәйәхәтсе ял итеү барышында оҡшаған һәм күңеленә ятмаған һәр күренеш тураһында мотлаҡ эргә-тирәһендәгеләргә һөйләй. Оҡшай икән - оҡшай, оҡшамай икән - оҡшамай. Быны бер нисек тә үҙгәртеп булмай.

✔ *Үҙең булдырған сүп-сарҙы йыйып алып, яҡындағы контейнерға ташлап китеү көсһөҙлөк түгел, ә кешенең аң кимәлен күрһәтеүсе күренеш булыуын бала саҡтан һеңдереп үҫтереү кәрәк.*



Шулай уҡ бер нисә йыл рәттән эшләп килгән компанияны һайлау урынлы. Тағы ла яҡшы күрһәткес - ял ойоштороусының социаль селтәренең матур, йөкмәткеле итеп алып барылыуы, фотоһүрәттәр менән тулыландырылған булыуы, шунда уҡ туристарҙың фекерҙәре яҙылыуы. Телефон аша һөйләшкәндә тулы яуап бирәләрме, аралашҡандан һуң яҡшы тойғо ҡалдыралармы - быларҙың барыһы ла мөһим күрһәткес. Буласаҡ турҙың яҡшы үтеүе шулай уҡ уның төплө программаһының булыуына ла бәйле. Мәҫәлән, беҙҙең турҙар көнөнә һәм хатта сәғәтенә тиклем алдан билдәләнгән һәм беҙ ошо ҡағиҙәне теүәл үтәргә тырышабыҙ. Йылғала ағып барыу тағы ла ниндәйҙер өҫтәмә сәйәхәттәр менән - мәмерйәгә инеү, тау башындағы ҡарау урынына күтәрелеү һәм башҡалар - тулыландырылған булыуы ла теге йәки был фирмаға өҫтөнлөк биреүгә ишара.

**Динар:** Хәҙерге ваҡытта туризм тик урындағы йәки Рәсәй халҡы өсөн генә булыуҙан үтеп, сит ил граждандарын да йәлеп итә. Тимәк, Башҡортостанда туризм өлкәһендә эшләүсе фирмаларҙа төрлө телдә һөйләшә белгән экскурсоводтарҙың күберәк булыуы мотлаҡ. Мәҫәлән, Динара, инглиз, француз, немец телдәрендә иркен аралаша, төбәктә беренсе аттестацияланған гид-тәржемәсе. Шуға күрә, сит илдән килеүсе туристарҙың ялын ойоштороуҙы үҙ инебеҙгә алыу беҙгә бер ауырлыҡ та тыуҙырмай. Һәм ошондай экскурсоводтар, тәржемәселәр ни тиклем күберәк булһа, беҙҙәге туризм тағы ла әүҙемерәк үҫешер ине. Яйлап быға килербеҙ, тип ышанам. Рәсәйҙең башҡа төбәктәре менән конкурент булырлыҡ, сит ил туристарын йәлеп итерлек өлкә булдырыу мөһим беҙгә.

➔ **Дәүләт программалары менән ҡулланаһығыҙмы?**

**Динар:** Ысынлап та, республика етәкселеге лә, Рәсәй хөкүмәте лә туризмды үҫтереүгә ҙур иғтибар бүлә. Был бигерәк тә үҙебеҙҙең төбәктә асыҡ сағыла. Шул уҡ төрлө программалар булдырыу, субсидия, грантлар биреү - барыһы ла был өлкәнең алға китешенә булышлыҡ итә. Нисек кенә булмаһын, туризм ҙур финанс сығымдар талап иткән өлкә. Шул уҡ катамарандарҙы яңыртып торорға кәрәк, туристарҙы сифатлы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү, палатка һәм башҡа туристик кәрәк-ярағын алыу, транспортҡа ағыулыҡ, шул уҡ әленән-әле һауыт-һабаны яңыртып тороу һәм башҡа бик күп сығымдар бар.

Эшебеҙҙе башлағанда субсидия алыу ҙур ярҙам булды, былтыр ҙур, яңы башҡорт тирмәһен шулай уҡ субсидия аҡсаһына алдыҡ. Беҙ туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ буйынса ойошторолған конкурстарҙа әүҙем ҡатнашабыҙ, сөнки "Ятҡан таш аҫтына һыу инмәй". Уңыштарыбыҙ һөйөндөрә һәм ҡанатландыра. "Йыл маршруты" Бөтә Рәсәй туристик премияһының Гран-приһын, "Башҡортостан Республикаһы туризм индустрияһы лидерҙары" милли премияһында Ағиҙел буйлап ойошторған маршрутыбыҙ менән "Иң яҡшы һыу маршруты" номинацияһында Гран-при яуланыҡ. Бар күңелебеҙҙе, көсөбөҙҙө һалып эшләүебеҙҙе ҙурлауҙары һәм баһалауҙары күңелде күтәрә, әлбиттә.

➔ **Ә ниндәй һорауҙар, мәсьәләләр борсой һеҙҙе?**

**Динара:** Финанс мәсьәләнән ситләшкәндә, иң борсоған һорау - эшләргә кеше табыуы ауыр. Күп нәмәне үҙ ҡулыбыҙ менән эшләйбеҙ. Иң ҡыҙыу осорҙа урындағы халыҡты йәлеп итәбеҙ. Уларға рәхмәтлебеҙ, әлбиттә, беҙҙең һымаҡ тәбиғәт яратыусы, матур ял ойоштороорға ярҙам итеүсе энтузиастар булыуы беҙгә лә ныҡ ярҙам. Әлбиттә, йыл һайын инде өйрәнгән, эштең бар айышын төшөнгән-белгән кешеләр менән эшләүе еңелерәк булыр ине. Оҙаҡламай нәк ошондай - берҙәм, туризмды яратҡан команда тупларбыҙ, тип өмөт итәм.

➔ **Туристарҙың күп булыуы яҡшы, әлбиттә. Ләкин меңәрләгән кешенән һуң күпме сүп-сар ҡала, төбәктең экологияһына ла ниндәйҙер зыян килмәй ҡалмайҙыр. Ошо яҡтан һеҙ ниндәй эштәр алып бараһығыҙ?**

**Динар:** Тәбиғәткә ҡарата булған һаҡсыллыҡ, уны таҙалыҡта тотоу турағында беҙ һәр ваҡыт яҙабыҙ, һөйләйбеҙ, аңлатабыҙ һәм эшләйбеҙ. "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре менән берлектә, ирекмәндәрҙе йәлеп итеп, Ағиҙел буйлап экологик ағып төшөү ойоштораБыҙ. Уның барышында туристар артынан ҡалған сүп-сарҙы йыйып алабыҙ. Әйткәндәй, үҙебеҙ ойошторған туристик ялдан һуң йылға буйында бер ниндәй ҙә сүп-сар ҡалмай, барыһын да йыйып, усаҡтарҙы матур итеп һүндереп китәбеҙ.

Был өлкәлә дәүләт менән туризм өлкәһендә эшләүселәрҙең берҙәмлеге кәрәк. Санитар таҙалыҡты тәьмин итеү өсөн йылға буйлап бәҙрәфтәр эшләү һәм уларҙы һәр ваҡыт таҙалыҡта тотоу, сүп-сар контейнерҙары ҡуйыу һәм шулай уҡ даими рәүештә уны бушатыу, субботниктар ойоштороу - быларҙың барыһы ла беҙҙең алда торған мөһим бурыстар. Ләкин туристик фирма быны бер үҙе генә атҡарып сыға алмай, шулай уҡ бөтә вазифаны тик дәүләт елкәһенә генә һалыу ҙа дөрөҫ түгел.

**Динара:** Халыҡтың экологик белемен арттырыу өҫтөндә эшләргә кәрәк. Һәр кем таҙалыҡ булдырыу тик уның йорто сиктәрендә генә түгел, ә тотош ауыл, ҡала, республика, ил, бөтә донъя кимәлендә икәнлеген аңлауы мөһим. Үҙең булдырған сүп-сарҙы йыйып алып, яҡындағы контейнерға ташлап китеү көсһөҙлөк түгел, ә кешенең аң кимәлен күрһәтеүсе күренеш булыуын бала саҡтан һеңдереп үҫтереү кәрәк. Тәбиғәт беҙгә тик матурлыҡ, байлыҡ, муллыҡ бирә, беҙ ҙә, үҙ сиратыбыҙҙа, уға ошондай ҡараштa булырға тейешбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Туризм үҫә Башҡортостанда, һүҙ юҡ. Матур ял тәкдим итеүсе ойошмалар ҙа арткандан-арта бара. Иң мөһиме, улар араһында республиканы, уның тәбиғәтен яратҡан, тарихын ихтирам иткән, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә битараф булмағандар күберәк булһын, тип теләге килә. Бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ Динар һәм Динара, һис шикһеҙ, илһөйәр, республикабыҙ өсөн янып-көйгән эшҡыуарҙар. Уларға рәхмәтле туристар һәм уңышлы эшмәкәрлек теләйбеҙ.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Тын алыу, йәки Прана тураһындағы фән

Һеҙҙе ҡыуандыра алам: тәнегеҙ бөрәү түгел, ә өсәү. Шуға күрә кемдер, тәнегеҙ тураһында нисек хәстәрлек күрәһегеҙ, тип һораһа, ҡайһыны менән, тип аныҡлағыҙ. Һәр кемдең өс тәне бар: Физик, Астраль һәм Каузаль. Физик тән есемдә һыйҙыра, астраль тән - уйҙар һәм хистойғолар һауыты, каузаль тән рухи донъяныҡы.

Тын алғанда һеҙ ҡанығыҙҙы кислород менән генә тулыландырып ҡалмай, астраль тән өсөн кислородҡа тиң булған прананы туҡландыраһығыҙ. "Прана" һүҙе санскриттан боронғо һинд фәне пранаяма, йәғни тын алыу сәнғәте атамаһынан алынған. Тап прана беҙҙең аңыбыҙҙы туҡландыра. Каузаль тәнебеҙҙә 72 мең нади - прана йөрөгән канал бар. "Был тормошомда нимәне үҙгәртә ала?" - тип һорарһығыҙ. Прана күп булғанда ул астраль тәндә иркен хәрәкәт итә, уй тулҡындарығыҙ ныҡ көслө була.

Яҡшы тын алыу өсөн һулыш алғанда кислород эскә тиклем барлыҡ киңлекте тултырырға тейеш. Ололарҙың күбеһе тиерлек бөтөнләй тын алмай. Улар һауаны йыш һулай, әммә был дөрөҫ түгел һәм файҙаһыҙ. Ауырлыҡ проблемаһын хәл иткегеҙ киләме? Тын алыуығыҙҙың онотолған күнекмәләрен тергеҙегеҙ.

Аҙыҡ эшкәртеү - яндырыу процесы. Берәй ваҡыт кислородһыҙ ут яғып ҡарағаныгыҙ бармы? Шулай булғас, ашағандан һуң организм кәрәкле күләмдә кислород алмаһа, аҙыҡты нисек яндырырға уйлайһығыҙ? Шуға ашағандан һуң өс минут тәрән итеп тын алып, һауаны аҫҡа - эсегеҙгә йүнәлтеп тын алығыҙ. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәҫ һәм тиҙ арала порошок диеталарынан һәм диета батончиктарынан баш тартырһығыҙ. Ышанығыҙ, пранаяма фәне - ысын мөғжизә. Ул беҙгә прананың каналдарҙа йәки надиҙа шәбәйтеп ебәргән әйләнешен тәьмин иткән практик сараларҙың күп арсеналын бирә һәм был организмдың оҙаҡ йылдар тупланған шлактарҙан таҙарыуына йөғонто яһай. Әммә был фән нервыһы ныҡ булмаған йәки консерватив кешеләр өсөн түгел.

### Инаныуҙарҙы ҡайтанан программалау

Бының өсөн "Мин үҙемә бай булырға рөхсәт итәм" йәки "Мин үҙемде көндән-көн яҡшыраҡ тоям" тигән ыңғай һөйләмде даими ҡабатларға кәрәк. Ыңғай уйлау концепцияһына ҡарата фәнни принциптарҙы ҡулланыу һеҙгә билдәле бер ваҡыт дауамында туҡтамай уйҙан ғына бер төрлө һүҙҙе ҡабатлау көсөнә ышанырға ярҙам итер.

Әгәр әлеге ваҡытта башығыҙҙағы инаныуҙарығыҙ белем, ғаилә һәм йәмғиәт аша формалашҡан икән, яңы инаныуҙарығыҙ ҡайтанан иркеле программаланыу һөҙөмтәһе булырға тейеш.

Бер инаныуҙы пыран-заран килтереп, уны икенсеһе менән алмаштырыу өсөн уйҙа ғына бер ҡыҫҡа йәки бер нисә фразаны ҡабатлау зарур. Һеҙҙең яңы уй тулҡыны Йыһандың тигеҙлеген боҙасаҡ һәм тигеҙлек һәм тигеҙһеҙлек ҡанунына ярашлы, ул һеҙҙең яңы талабығыҙҙы ҡәнәғәтләндерергә мәжбүр буласаҡ. Бының өсөн артыҡ аҡыл кәрәкмәй! Әгәр тағы ла миҫалдар кәрәк булһа, Джозеф Мэрфиҙың "Обретите здоровье, богатство и счастье, используя силу подсознания" китабын уҡығыҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**

## ТАБИП КӘҢӘШ ИТӘ

# МӘҒЛҮМӘТТЕҢ...
## зыян итеүе лә бар



**Өфөлә төбәк журналистары өсөн суицид һәм деструктив тотошто профилактикалауҙа ваҡытлы матбуғат сараларының роле тураһында семинар үтте. Кризис психологияһы үҙәге етәксеһе, Рәсәй журналистар берлеге ағзаһы Михаил Хасьминский ошо йәһәттән кәңәштәр бирҙе.**

Психолог фекеренсә, бөгөн күп кенә баҫмалар суицид осрактары тураһында мәғлүмәтте күпләп бирә. Был гәзит йә журналды интернет селтәрҙәрендә ошо яңылыҡ аша булһа ла уҡымлыраҡ итеү тигән маҡсат менән эшләнһә лә, был холҡонда үҙ-үҙенә ҡул һалыу, психологик йәһәттән үҙ-үҙенә йәки башҡаларға зыян килтерә алыу һыҙаттары өҫтөнлөк иткән кешеләр өсөн этәргес көскә әйә булыуы ихтимал. "Был бигерәк тә журналист тарафынан тикшерелмәгән фактарҙы артыҡ биҙәп, уға романтик хистәр өҫтәп бирелгән мәғлүмәттәргә ҡағыла. Бындай һәр үлемдең артында бер генә сәбәп тормауы ла бар, ғәҙәттә, бындай юлға барған кеше өсөн уны стреста тотҡан хәлдәр, кризисҡа килтергән ваҡиғалар күп була, бығa өҫтәп психик сирҙәрҙе лә әйтергә кәрәк. Шулай уҡ кешене суицид хәленә еткереүселәр ҙә була", - тип билдәләне Михаил Хасьминский.

Рәсәйҙең психология һәм суицидология өлкәһендә эшләүсе алдынғы эксперттар төҙөгән тәкдимдәр тураһында ла һүҙ булды. Авторҙар араһында психиатрҙар Борис Положий менән Евгений Любов та бар. Кәңәштәрҙең төүгеһе - суицид тураһында материал әҙерләгәндә дөрөҫ фактарға ғына таянырға. Ниндәйҙер дөйөмләштереүҙәрҙән ҡасырға кәрәк, статистиканы ла һаҡ ҡулланыу мөһим. Бындай темаға яҙғанда профессиональ экспертҡа мөрәжәғәт итеү урынлы. Суд-медицина экспертизаһы һәм тикшереү органдарының рәсми һығымтаһынан алда ниндәйҙер фараздар килтереү дөрөҫ түгел.

Уҡыусылар араһында ошондай уҡ хәлде ҡабатларға теләүселәр булыуы ихтималлыһын гел иҫтә тоторға кәрәк, шуға ла мәҡәләнең исемендә суицидҡа бәйле, уға саҡырып тороусы бер һүҙ ҙә булмаҫҡа тейеш. Интернет-мәғлүмәттең аҙағында ошо уҡ тема буйынса яҙылған барлыҡ мәҡәләләргә һылтанма бирергә лә ярамай. Киреһенсә, ошо уҡ хәлгә еткән хәүеф төркөмөндәге кешеләргә ярҙамға килергә әҙер булған хеҙмәттәрҙең исемлеген, улар менән бәйләнеш ысулдарын бирегеҙ. Профилактика йәһәтенән суицидаль тотоштоң физик сәләмәтлеккә, психик торошҡа кире йоғонтоһо, шулай уҡ уның менән бәйле килеп тыуасаҡ социаль проблемалар хаҡында әйтергә була.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

✓ Йыл да Химик көнө Менделеев таблицаһының яңы элементы символы аҫтында үтә. Иң тәүге байрамға беренсе һан бирелә - водород. Был байрам һөнәрмәндәрҙе, студенттарҙы, уҡытыусыларҙы, бөтә быуындарҙы берләштерә.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 26 МАЙ - ХИМИК КӨНӨ

**Химик көнө - химия һәм нефть химияһы сәнәғәте хеҙмәткәрҙәренең совет осоронан билдәләнгән һөнәри байрамы, май айының һуңғы йәкшәмбеһенә тура килә.**

Химик көнө СССР Юғары Советы Президиумының 1980 йылдың 1 октябренән "Байрам һәм иҫтәлекле даталар тураһында" Указына ярашлы булдырыла. СССР тарҡалғас та майҙың һуңғы йәкшәмбеһе Рәсәйҙә генә түгел, элек союздаш булған башҡа илдәрҙә лә һаҡланып ҡала.

Ауыр сәнәғәттең төп тармаҡтарына ҡараған химия комплексы үҙ эсенә химия һәм нефть химияһы сәнәғәттәрен ала, улар үҙ сиратында бихисап тармаҡтарға һәм етештереүҙәргә бүленә. Химия сәнәғәте етештергән әйберҙәр ҙә күп төрлө: уға кислоталар, һелтеләр, минераль ашламалар, төрлө полимер материалдар, буяуҙар, көнкүреш химияһы, лак һәм буяу, шулай уҡ резина-асбест, фотохимик һәм химия-фармацевтика продукцияһын эшләү инә. Ҡатын-ҡыҙҙар яңы төр үҙенсәлекле кер йыуыу порошоктары, косметика һәм ныҡлы колготкалар өсөн нәҡ химиктарға рәхмәтле. Ә ир-егеттәр иһә автомобиль өсөн яңы төр майҙар, спорт кейеме туҡымалары һәм аяҡ кейеме өсөн рәхмәтле.

Был һөнәри байрамдың үҙ йолалары ла бар. Мәҫәлән, йыл да Химик көнө Менделеев таблицаһының яңы элементы символы аҫтында үтә. Иң тәүге байрамға беренсе һан бирелә - водород. Был байрам һөнәрмәндәрҙе, студенттарҙы, аспиранттарҙы, уҡытыусыларҙы, бөтә быуындарҙы берләштерә.

Әйткәндәй, Рәсәйҙә генә түгел, бар донъяла билдәле химик - Дмитрий Иванович Менделеев. Химик элементтарҙың периодик системаһы уның төшөнә кергән, тиҙәр. Ул саҡта ғалимға 35 йәш була. Быйыл ошо асышҡа 155 йыл тулған. Менделеев 1869 йылда ул саҡта билдәле 63 элементты төҙөк бер системаға һала һәм был билдәһеҙ элементтарҙың сифаттарын асыҡларға ярҙам итә. Ғалим үҙе был хаҡта: "Периодик законға киләсәк боҙолоу менән янамай, ә тик өҫтәп төҙөлөү һәм үҫеш вәғәҙәләй", - ти. Был ысынлап шулай була: хәҙерге көндә элементтар һаны 118-гә еткән, ә 1955 йылда асылғаны менделеевий тип аталған. Ғалим үҙе тере саҡта ла бер нисә күҙаллауы дөрөҫкә сыға: 1875 йылда галлий, 1879 йылда скандий, 1886 йылда германий асыла. Уларҙың сифаттары ниндәй булыры алдан күҙаллана, периодик системала урын ҡалдырыла һәм был Периодик законды донъяла танытыуға килтерә. 2007 йылда Халыҡ-ара материалдар ғилеме буйынса конгреста Химик элементтарҙың периодик системаһы фән өлкәһендә кешелектең иң мөһим ун асыштарының береһе, тип таныла.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**19-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡытай. Ҡобайыр. Ҡабан. Һалыу. Тубыҡ. Сәйхана. Һандыҡ. Утрау. Япония. Сәс. Яға. Һынау. Лава. Наза. Бәкәл. Анна. Даға. Ацтек. Ҡырау. Лилипут. Нәҙәкәт.

**Вертикаль буйынса:** Һандуғас. Һиндостан. Ыласын. Ҡаҙы. Цейлон. Ус. Ял. Ҡабаҡ. Яза. Кәлимә. Бухенвальд. Арҡау. Йырын. Тут. Тау. Һабаҡ. Тары. Алҡа. Ҡыу. Уҡлау.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 май "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**"Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**31 май "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+
**2 июнь "Килен"** (З. Мусина), драмаһы менән Йылайыр ауылында. 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 май Премьера! "Мөхәббәт хаҡы"** (В. Афонин). 16+
**1 июнь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00, 13.00 0+
**2 июнь "Цирк на поляне"** (М. Непряхин), әкиәт. 11.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1-2 июнь "Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**30 май "Йөрәк тауышым - йырҙарымда"** Айгөл Һағынбаева концерты. 6+
**1 июнь "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), ғаилә өсөн мюзикл. 18.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**1 июнь Премьера! "Маугли. Книга Джунглей"** (Р. Киплинг, Р. Ғәйнуллина инсц.), әкиәт. 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**29 май Премьера! "Торатау мираҫы"** "Торатау" балалар халыҡ бейеүҙәре өлгөлө ансамбленең йомғаҡлау концерты. 0+

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӘҢКӘ ЙЫЯЛАР...

**2024 йылдың 20 майынан 2 июненә тиклем Башҡортостан халҡы тәңкәләрен ҡағыҙ аҡсаға бушлай алмаштыра йәки банктағы иҫәбенә күсерә ала.**

Тәңкәләрҙе акцияла ҡатнашҡан һәр банкҡа тапшырырға мөмкин. Бының өсөн ойошманың офисына паспорт һәм тәңкәләр менән килергә кәрәк. Тәңкәләрҙе тапшырырға мөмкин булған банктар исемлеге ошонда: монетная *неделя.рф*. Әле әйләнештә булған, йәғни 1997 йылдан башлап сығарылған аҡсаны ғына тапшырырға мөмкин. Һан буйынса сикләүҙәр юҡ. Ҡарайған, сыйылған, бөгөлгән һәм тишелгән тәңкәләр ҙә ҡабул ителә. Банкта эште тиҙләтеү маҡсатында аҡсаны алдан уҡ номиналдар буйынса айырып ҡуйыу яҡшы. Әгәр тәңкәләрҙе башҡа төрлө ҡулаҡсаға алмаштырырға теләһәгеҙ, акцияла ҡатнашыусы теләгән бер банкҡа мөрәжәғәт итергә була. Ә тәңкәләрҙе үҙ иҫәбенә күсереү өсөн банктың клиенты булырға кәрәк. Банктар тәңкәләр ҡабул итеүҙе төрлөсә ойоштора. Шарттарын банктың үҙендә белергә мөмкин.

ИҒЛАН

* * *

**"119-сы Өфө ат заводы"** Акционерҙар йәмғиәтенә (БР, Өфө районы, Ольховое ауылы) йылҡы көтөүселәр, йәш юртаҡ һәм юртаҡ тоҡомло бейәләрҙе ҡараусы йылҡысылар, дежур йылҡысылар, һауынсылар талап ителә.

Йылҡы көтөүсенең эш хаҡы **50-60 мең һум**, һауынсының - **35-45 мең һум**, йылҡы ҡараусыһының эш хаҡы **35-40 мең һум**.

Торлаҡ, юл хаҡы һәм махсус кейем - эш биреүсе иҫәбенә.

**Бәйләнеш өсөн телефондар: 8-996-256-17-92, 8-917-753-39-90.**

*Унының ижады тураһында замандаш шағирҙар ҙа, әҙәбиәтселәр ҙә, китап уҡыусылар ҙа берҙәй тетрәнеү, һиҫкәнеү менән телгә ала. Ул - башҡорт әҙәбиәтен үҙ иткән һәр кем өсөн бөйөк ижадсы, олуғ талант эйәһе.*

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ОШОНДАЙ БӘЙГЕЛӘР КӘРӘК!




**Өфөлә "Уҡы. Балалар" республика конкурсының финалы үтте. Сараны Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ярҙамында Әбйәлил районы йәш яҡташтар ойошмаһы уҙғарҙы.**

Ойоштороусылар балалар иғтибарына "Бәйғәмбәрҙәр тарихы" китабын тәҡдим иткән һәм уҡырға дүрт ай ваҡыт биргән. Артабан уҡылған китап буйынса онлайн тест үтеп, юғары мәрәйҙәр йыйыусылар конкурстың финалында ҡатнашыу хоҡуғын яулаған. БР Милли музейында үткән йомғаҡлау этабында 6-12 йәшлектәр һәм 12 йәштән өлкәндәр ике төркөмгә бүленеп, бәйге тотто. Ойоштороусылар әйтеүенсә, ҡатнашыусылар араһында әле яҙа белмәгәндәре лә булған һәм улар телдән яуап биргән.

"Уҡы. Балалар" конкурсында барыһы 300-ҙән ашыу бала ҡатнашҡан. Шулар араһынан бәләкәйҙәр төркөмөнә - 21, өлкәнерәктәрҙән - 35 кеше финалға үткән. 12 йәшкә тиклемгеләр төркөмөндә беренсе урынға Динә Айсина, икенсе урынға Камила Шакирова, өсөнсө урынға Әмир Мәҡсүтов лайыҡ була. Ә 12 йәштән өлкәндәр араһында беренсе урынды Дилара Исламова, икенсе урынды - Кәрим Шакиров, өсөнсө урынды Ғәлиәскәрова Өммә Сәләм яулаған. Еңеүселәргә һәм призлы урын алыусыларға электрон китаптар, 15 "Айфон" телефоны, айпад, велосипедтар, ә башҡа ҡатнашыусыларға китаптар бүләк ителгән. "Конкурсҡа әҙерлек тик яҡты хәтирәләр генә ҡалдырҙы. Яңы мәғлүмәт үҙләштереүе бик ҡыҙыҡлы бит, ә был конкурс өҫтәүенә Ислам дине тураһында белемдәр ҙә бирҙе. Ошоноң менән күңелемә яҡын булды. Ә инде тырышлығым өсөн шундай ҡиммәтле бүләккә лайыҡ булыуым артабан да китаптар уҡыуҙы дауам итергә дәртләндерҙе генә", - тип тәьҫораттары менән бүлеште Динә Айсина.

Ойоштороусылар фекеренсә, йәш быуынды китап уҡырға һәм хәтерҙәрен нығытырға этәреүсе, алған белемдәрен ҡулланырға өйрәтеүсе был конкурстың киләсәге бар. "Конкурстың маҡсаты - йәштәр араһында китап уҡыуҙы популярлаштырыу һәм тормошобоҙҙа тоғро юл күрһәтеүсе булған китаптарға ҡарата ихтирам тәрбиәләү. Бөгөнгө технологиялар үҫешкән заманда балалар биләүҙән смартфон ҡулланырға өйрәнеп, китап уҡыуҙан ситләшә. Бына ошондай күренешкә үҙгәреш индерергә, йәш быуынды китаптарҙағы ғәжәйеп донъя менән таныштырырға ниәт иткәйнек, килеп сыҡты кеүек", - тине "Уҡы. Балалар" конкурсының ойоштороусыһы, Әбйәлил йәш яҡташтар берлеге рәйесе Шәфҡәт Ғәбитов.

**Дилә ХАЗИӘКБӘРОВА.**

# КЕШЕЛЕК ҠАҘАНЫШЫ УЛ




**Ерҙәге иң боронғо эпостарҙың береһе "Урал батыр" балаларға яҡынайҙы. Башҡортостанда күренекле эпос буйынса буяу китабы донъя күрҙе.**

Йыйынтыҡты "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы әҙерләп сығарған. Китап өсөн эпостан өҙөктәр һайлап алынған һәм уларға аҡлы-ҡаралы иллюстрация төшөрөлгән. Рәссамы иһә Башҡортостанда тыуып үҫкән, әле Санкт-Петербургта йәшәгән Рената Хәйҙәрова. Музей-ҡурсаулыҡ директоры Фәүзил Маликов һөйләүенсә, эпос буйынса буяу китабы йәки комикс эшләү идеяһы менән улар күптән янып йөрөгән. "Шүлгәнташ мәмерйәһен үҫтереү тураһында һүҙ алып барғанда, "Урал батыр" эпосын күҙ уңынан ысҡындырып булмай. Беҙҙең музей-ҡурсаулыҡ Шүлгәнташ һәм ундағы ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәрҙе генә түгел, "Урал батыр"ҙың иҫтәлекле урынын һаҡлау һәм танытыу өҫтөндә эшләй. Мәмерйәнән тыш, был урынға Йылҡысыҡҡан, Ығышма күлдәре, Шүлгән йылғаһы һәм эпостағы башҡа киң билдәле объекттар инә. Маҡсатыбыҙ ябай - башҡорт халҡының мәҙәни мираҫын популярлаштырыу һәм һаҡлау. Эпосты кешелектең ҡаҙанышы булараҡ бәләкәй саҡтан уҡ өйрәнергә кәрәк. Балалар өсөн ауыр тексты төҫлө ҡәләмдәр ярҙамында үҙләштерергә мөмкин".

Китап-буяу сикләнгән тираж менән донъя күргән. Уны Бөрйән районындағы "Шүлгәнташ" музейында һатып алырға мөмкин.

# РӘШИТ НАЗАРОВ ҺЫНЫ...

**Ауырғазы районының Талбазы ауылында башҡорт шиғриәтенең сағыу вәкиле, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Назаровҡа бюст асыу тантанаһы үтте.**



Бюст шағирҙың исемен йөрөткән гимназия алдында урынлашҡан, уға ике йыл элек күренекле шағирҙың исеме бирелгән. Бюст авторы - Илдус Закиров. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Мәҙәниәт һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса комиссияһы рәйесе, "Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире Лариса Абдуллина бөгөнгө тантаналы көнгә еткергән ваҡиғалар тураһында түбәндәгеләрҙе билдәләй: "Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында башҡорт әҙәбитенә йәшен тиҙлегендә үҙенең киң билдәле "Йөрәк", "Йәшен" шиғырҙары менән килеп ингән Рәшит Назаровтың ижады менән бөгөн шиғыр яратҡан, һүҙ сәнғәтенең аһәңен, кимәлен баһалаған һәр кем таныш. Ниμәһе ҡыҙыҡлы, унының ижады тураһында замандаш шағирҙар ҙа, әҙәбиәтселәр ҙә, китап уҡыусылар ҙа берҙәй тетрәнеү, һиҫкәнеү менән телгә ала. Ул - башҡорт әҙәбиәтен үҙ иткән һәр кем өсөн бөйөк ижадсы, олуғ талант эйәһе. Бөгөн бер кемгә лә Рәшит Назаров ижады юғары һүҙ сәнғәте әҫәрҙәре булыуын иҫбатларға кәрәкмәй. Алда әйткәнемсә, уны әҙәбиәткә аяҡ баҫҡанда уҡ ҡәләмдәштәре маһир шағир булыуын танып, алҡышлап ҡаршы ала. Рәшит Назаров - ул башҡорт әҙәбиәтендә генә түгел, ә шиғриәте, яҙмышы менән Рәсәй, донъя әҙәбиәтендә бик һирәк осрай торған күренеш...

Аянысла сир, яҙмыш, шағирҙы һуңғы көндәрендә махсус интернатта йәшәүгә дусар иткән. Оҙаҡ йылдар яҙыусылар, Ауырғазы районы йәмәғәтселеге Талбазы башҡорт гимназияһына бөйөк шағирҙың исемен биреү өсөн көрәш алып барҙы. Был хәрәкәт ысын мәғәнәһендә көрәш ине, сөнки ҡаршылар ҙа булманы түгел. Рәшит Назаров ижадын юғары баһалап, унының ижадын, исемен мәңгеләштереү өсөн әүҙем эш алып барған Талбазы башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Светлана Атмасоваға, Ауырғазы районының элекке хакимиәт башлығы Миҙхәт Вәлитовҡа рәхмәт. Шул тиклем баҫалҡы, әммә маҡсатлы туғандарына рәхмәтлебеҙ - улар ышаныслы аҙымдар менән алға атланы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына тупланған материалдар, документтар менән мөрәжәғәт итте", - тип билдәләй Лариса Хашим ҡыҙы.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы иғлан иткән Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мираҫ йылында (2022 йылдың авгусында) Ауырғазы районы Талбазы ауылы мәктәптәренең береһенә башҡорт шиғриәтенең иң сағыу вәкилдәренең береһе Рәшит Назаров исеме бирелде. Шағирҙың әҫәрҙәре республиканың урта һәм юғары уҡыу йорттары программаһына индерелгән. Йыл һайын тыуған көнөндә "Назаров уҡыуҙары" шиғри, әҙәби, музыкаль саралар циклы үткәреү йолаға әүерелгән.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨЙӨКЛӨ...

## көйөк ашар

"Табамын" тип ашама, күп ашаһаң ҡоҫторор, "беләмен" тип һөйләмә, күп һөйләһәң, боҫторор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Теләктәр күберәк йәш йөрәктәргә хас, ул теләктәр ғүмер буйы һинең йөрәктә тулҡынландырасаҡ, тип уйлаусылар ахмаҡ: күп тын йылғалар шаулы шарламалар менән башлана, әммә уларҙың береһе лә диңгеҙгә ҡәҙәре күбекләнеп сапмай.

**(Михаил Лермонтов).**

Тормош бер ваҡытта ла түләүһеҙ бирелмәй һәм яҙмыш бүләк иткәндең һәр береһенең үҙ хаҡы бар.

**(Стефан Цвейг).**

Идеалдарҙың ҡиммәте шунда: яҡынлаған һайын, улар юҡҡа сыға.

**(Махатма Ганди).**

Беҙ шул ҡәҙәре күпте теләйбеҙ: беҙҙең бөтөн теләктәребеҙ тормошҡа ашһа ла барыбер үҙебеҙҙе бәхетһеҙ тойор инек.

**(Бертольд Ауэрбах).**

Тормошта ике трагедия бар: береһе - үҙеңдең иң изге хыялыңдың тормошҡа ашмауы, икенсеһе - тормошҡа ашыуы.

**(Бернард Шоу).**

Хыял менән уйнау ҡурҡыныс: селпәрәмә килгән хыял кешене ғүмерлеккә бәхетһеҙ итеүе ихтимал; хыял артынан ҡыуып йөрөп, ғүмереңдең үтеп китеүен һиҙмәй ҡалыуың, йә хыялый тойғолар менән янып, уны ҡорбан итеүең бар.

**(Дмитрий Писарев).**

Һәр кемдең башҡа берәүгә лә белдермәй торған, шулай уҡ хатта үҙенә лә белдерергә ҡурҡҡан теләктәре була.

**(Зигмунд Фрейд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:**
**"- Хөрмәтле Уҡытыусы, мин нисәмә йылдар үҙ-үҙемде тәрбиәләү, камиллаштырыу, үҙемдең эске проблемаларымды хәл итеү менән шөғөлләнәм. Ләкин алға китеш һиҙелмәй. Мин нимәне дөрөҫ эшләмәйем икән? - тип һораған берәү.**
**- Һин урыныңдан алға китмәйһең, сөнки үҙеңде проблемалары бик күп булған шәхес итеп тояһың, - тигән Уҡытыусы.**
**- Ә нисек хәл итергә һуң ул проблемаларҙы, улар бит ысынлап та бик күп, - ти икән теге кеше.**
**- Һин үҙеңде ул проблемаларҙы нисек хәл итергә икәнде белгән шәхес итеп той, - тип аҡыл биргән Уҡытыусы.**
**- Шул ғынамы? - тип аптыраған кеше.**
**- Бары шул ғына, - тигән Уҡытыусы..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24020

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
23 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2750
Заказ - 111913